*Кешенең йөҙө уның ауыҙынан сыҡҡан һүҙгә ҡарағанда ла күберәкте һөйләй ала: тел кешенең уйын ғына әйтә, ә йөҙ - тәбиғәттең үҙенең уйын сағылдыра.*

*(А. Шопенгауэр).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

6 - 12 НОЯБРЬ (ҠЫРПАҒАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru | 2002 йылдан башлап сыға | Һатыуҙа хаҡы ирекле | №45 (411)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Маҡсат - уңыштың төп сере...**

Шулай ти Өфөнөң иң яҡшы йәш ғаиләһе



4

**Яңы тыуған сабыйҙар менән...**



5 сәй эсеү йолабыҙ ҙа бар беҙҙең

**Сәләймәновтар көсө менән дә...**

милләте менән дә танытты үҙҙәрен донъяға



6

**Кем ул президент?**



8-9 Ул - ойоштороусыларҙы ойоштороусы...

14 ТВ-программа





### УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

Минең өсөн "Киске Өфө" ижади гәзит булараҡ күңелемә яҡын. Башҡа баҫмаларҙа бик әйтеп булмаған фекерҙәр бында әйтелә. Шул яғы менән "Киске Өфө" гәзите үҙенсәлекле. Гәзиттәр араһында ике төрлө маҡсат була. Тәүгеләре мәғлүмәт еткереүҙе төп маҡсат итеп ҡуя. Икенселәре мәғлүмәт тураһында фекер йөрөтә. "Киске Өфө" икенселәр рәтендә. Тағы, сыҡҡан гәзиттәр була, ижад ителгән гәзиттәр була. Был - ижад ителгән баҫма. Ижади булмаған әйбер ҡыҙыҡ булмай. Ижад ителгән әйбергә генә кеше һоҡланып ҡарай. Төп асылы - шул. "Киске Өфө" гәзитенең аҙнаға бер генә сығыуы ла бик отошло. Материалдар аҙна буйы уйланылып, күңелдән киserелеп, ижад ителә. Йышыраҡ сыға башлаһа, ижади булыуҙан туктар ине. Шуға ла беҙ был гәзиттең һәр һанын көтөп алабыҙ.

**Ринат КАМАЛ.**
**Яҙыусы, С.Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты.**

### УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

"Киске Өфө"нө даими уҡып барам. Ғөмүмән, республикабыҙ баҫмаларын, айырыуса башҡорт телендәге үҙебеҙҙең гәзит-журналдарҙан башҡа йәшәүҙе күҙ алдына ла килтереүе ҡыйын. Һәр береһенең үҙ йөҙө, үҙ йүнәлеше, һәр береһенең дә уҡыусы күңелендә үҙ урыны бар.

Ошо йәһәттән "Киске Өфө"гәзите башҡа баҫмаларыбыҙҙан айырмалы рәүештә рухыбыҙға, йәшәйешебеҙгә, көнитмешебеҙгә ҡағылышлы материалдарҙы күберәк бирә, башҡорт рухына яҡын, төплө, йыш ҡына әле бер ҡайҙа ла донъя күрмәгән тәү сығанаҡтар һәм тарихи хеҙмәттәрҙе баҫып сығарыуы менән алдыра.

"Киске Өфө"нө уҡымлы иткән уның үҙенә генә хас рубрикалары, биҙәлеше хаҡында ла әйтмәй булмай. Мәҫәлән, мин Әхмәр Үтәбай ойошторған "Монолог", "Диалог", "Әйт, тиһәгеҙ" рубрикаларындағы материалдарҙы уҡырға яратам, Таһир Ишкининдың көнүҙәк публицистикаһы ла гәзит йөкмәткеһен бермә-бер күтәрә.

Ҡайһы бер теләктәрем дә бар. Беҙҙең башҡорт донъяһы арҙаҡлы шәхестәргә бай, шөкөр. Гәзиттә әле был бер яҡлыраҡ сағылыш таба. Мәҫәлән, әллә күпме Социалистик Хеҙмәт Геройыбыҙ бар, уларҙы ла, бәлки, уҡыусы хәтеренә төшөрөп алыу кәрәктер. Юғиһә, үҙ ауылында йәшәгән Геройҙы белмәгән кешеләр ҙә бар арабыҙҙа. Әҙәбиәт өлкәһендә лә шәп шәхестәребеҙ бар. Ҡыҫҡа-ҡыҫҡа хикәйәләр, көләмәстәр ҙә йәнләндереп ебәрә гәзит битен. Төрлө темаға конкурстар ойошторолһон ине.

**Салауат МӨХӘМӘТШИН.**
**Баймаҡ районы Ҡолсора ауылы.**

ИШАРА

# ЗАР БЕЛДЕРГӘНСЕ...

## барыһы ла яҡшы, тиң дә йөрө икән

**Бер мәл баламды балалар баҡсаһынан алып ҡайтып барам. Ниңәлер ҡыҙымдың күңеле китек кеүек тойолдо. Йомшаҡ ҡына итеп арҡаһынан һөйөп, хәлкәйҙәрен һораштым. Ҡыҙым илай яҙып: "Маша исемле ҡыҙыҡай иң матур уйынсыҡтарымды ала. Әгәр бирмәһәң, тәрбиәсегә һинең турала әйтәм, тип янай. Инде өйҙән алып барған кескәй ҡурсағымды ла бирҙем. Матур уйынсыҡ бесәйемде лә бирҙем, ә ул: "Тағы уйынсыҡ алып кил, әтеү һинең турала тәрбиәсегә әйтәм!" - тип мине һаман ҡурҡыта..."- тип теҙеп алып китте.**

Икенсе көндө баламды баҡсаға алып барҙым да, тәрбиәсегә ҡыҙым менән булған һөйләшеү тураһында әйттем."Әллә минең ҡыҙым шаярамы, тыңлашмаймы?" - тип тә ҡыҙыҡһындым. Инна Павловнаның һушы китте: "Вәт, кескәй интриганка!" - тип, Машаны саҡырып алды. Шунан: "Һеҙ эшегеҙгә барығыҙ, ҡыҙығыҙ тыңлаусан, һәйбәт бала, уның өсөн борсолмағыҙ, ә мин Машаға бөтәһен дә аңлатырмын", - тип, мине тынысландырып сығарып ебәрҙе...

Был күптән булған ваҡиға бөгөн килеп тағы иҫемә төштө. Бына троллейбусҡа бер ҡарт килеп инде лә, водителгә: "Туҡталыштан үтеп китеп туҡтаның, Президентҡа ялыу яҙам!" - тип ҡысҡырҙы. Магазинға инһәм, тағы шундай уҡ янау: "Кисәге икмәкте һатаһығыҙ, Президентҡа ялыу яҙам!" - тип ҡысҡыра һатыусыға бер апай. Үәт китте бит Президент менән ҡурҡытыуҙар: "Ялыу яҙам! Ялыу яҙам!" Ҡырмыҫҡа иләүенә таяҡ тыҡҡандармы ни! Халыҡтың бөгөнгө ҡыланыуы аптырата. Ҡыҙыҡ та, сәйер ҙә был күренеш.

Урамдарҙа, магазиндарҙа ғына түгел инде "Ошаҡлайым", тип янаусылар. Яңы боролоштар яңалғанда, яңы етәкселәр тәғәйенләнгәндә ундайҙар һәр хеҙмәт коллективында тиерлек баш ҡалҡыта, тел сарлай. Ошаҡлашыу, ялыуҙар яҙыу менән булышмай, һәр беребеҙ үҙ урынында, үҙ эшен урынына еткереп, намыҫ менән башҡарһа, республикабыҙҙың яңы Президентына һәйбәт ярҙам булыр ине түгелме ни?

...Әхирәтем йәй буйы үҙенең баҡсаһында йәшәне. Көҙөн ҡайтты ла миңә шылтырата: "Илдә ниндәй яңылыҡтар бар?" - тип ҡыҙыҡһына. Әлбиттә, хәҙер Үҙәк каналдарҙа "Яңылыҡтар" тапшырыуын ҡарауы хатта триллерҙарҙан да ҡурҡынысыраҡ була башланы. Ә шулай ҙа мин уларҙы ҡарамаҫҡа, шәйләмәҫкә тырышам. Әхирәтемә лә улар тураһында һөйләмәйем. Ә М.Бернес йырлаған бер йырҙан өҙөк ҡабатлайым. Ул йырҙа бөтәһе лә янып көлгә оса. Ә ҡушымтаһында: "А в основном, прекрасная маркиза, все хорошо, все хорошо!" - тиелә...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

МӨХӘРРИР ҺҮҘЕ

**Бынан тап 8 йыл әүәл "Киске Өфө"нөң тәүге һаны донъя күрҙе. Был урында бер аҙ тарихи һүҙ кәрәктер, шулай бит? Тарих шунан ғибәрәт: журналистар менән бер осрашыуҙа ул саҡтағы Президентыбыҙ Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов "Ни өсөн баш ҡаланың һаман да башҡорт телендәге үҙ гәзите юҡ?" тигән һорау-дәғүәһен әйтеп һала. Был һүҙҙәрҙе ҡолағына һәм күңеленә индереп, "Вечерняя Уфа" гәзитенең ул саҡтағы энтузиаст баш мөхәррире Марат Муллаҡаев үҙенең редакцияһы эргәһендә был проектты башлап ебәргә тәүәккәлләй һәм "Башҡортостан" гәзитендә егерме йылдан ашыу эшләп, инде ҡанға һеңгән, инде күнегелгән эштән айырылырға теләмәгән миңә йүгереп килә. Бурыстың үтә нык яуаплылығын аңлаған мин, күпмелер икеләнгәндән һуң, үҙемде "боҙло һыуға" ырғытам...**

# СИҘӘМ АҠТАРАБЫҘ...

## ҡан ҡуҙғытыр һүҙҙәрҙе епкә теҙәбеҙ

Әйткәндәй, Марат Муллаҡаев тәҡдим иткән проекттың бары тик "Киске Өфө" тигән атамаһы һәм... Президент хәстәрләгән матди базаһы ғына бар ине. Проект бөтөн асылы, эстәлеге, рухы менән эш барышында ижад ителде. "Башҡортостан" гәзитендә эшләгән йылдарҙа тупланған " тул" артабан төн йоҡларға бирмәгән, туктамай әйләнеп торған фекерҙәр, идеялар ҡуласаһына әүерелде лә, мине бер тапҡыр ғына түгел, даими рәүештә, аҙна һайын әлеге лә баяғы "боҙло һыуға" ташланырға мәжбүр итте. Гәзиттең сираттағы һанын тапшырған йома көнөн мин тулғаҡтан арыныу мәле һымаҡ ҡабул итә инем. Һәр аҙна шулай... Аҙна башына ҡуласа тағы әйләнә башлай, ул әйләнә икән, туктап тороу, әйләнә-тирәнә ҡараныу, икеләнеүҙәр юҡ. Идеяларыңды йөкмәйһең дә, уларҙы ғәмәлгә ашырырға тип, алға йүгерәһең. Шул мәлдә бергә эш башлаған йәш журналистарым Әлфинә Ҡарағужинаға, Айҙар Хәкимйәновҡа, Валера Ғәйнетдиновҡа, Азат Ярмуллинға, гәзитте верстҡалаусы Шамил Харисовҡа, корректор ҙа, текстарҙы компьютерҙа баҫыусы ла, тәржемәсе лә эштәрен башҡарған Әминә Имашеваға, бер нисә айҙан беҙгә килеп ҡушылып, инемдәге йөктө еңеләйтә биргән Әхмәр Үтәбайға рәхмәтлемен...

Башланыу тарихы шулай...

Артабан... Беҙҙең ошо һигеҙ йыл эсендәге ижадты сиҙәм аҡтарыу менән сағыштырырға булыр ине. Яңы баҫма яңыса ижад итергә тейеш, тигән хәҡиҡәтте бик нык һанлап, уны төп ҡағиҙәбеҙ итеп алып, матбуғат майҙанында үҙебеҙҙең ҡабатланмаҫ, үҙенсәлекле эҙебеҙҙе һалырға тырышыуыбыҙ бына. Беҙҙең был үҙенсәлек ниҙән ғибәрәт? Әйткәнем бар шикелле: беҙ гәзит сығармайбыҙ, ә ижад итәбеҙ. Бар темаға, материалды алдан планлаштырабыҙ, уларҙы түңәрәк ҡорҙар, аңғәмәләр аша ойошторабыҙ һәм ултырып яҙабыҙ - был беҙҙең эш стиле. Уҡыусыларға мәғлүмәт бирер кенә ҡалма, ә мәғлүмәттең төбөнә "ҡом һалып", анализлап, уның һуҙын һығып сығарып, йомғаҡлап, һәр кемде уйландырырлыҡ, аңын ҡуҙғытырлыҡ, ҡанын ҡайнатырлыҡ, сәмен уятырлыҡ, аҡылын һәм һәләтен эшкә егерлек "емгә" әйләндер - быныһы журналист алдына ҡуйылған тәүмаҡсат. Кемдәр гәзитебеҙҙә яҙылғандарҙың ошо тәьҫирен күтәрә ала - беҙҙе уҡый, кем күтәрә алмай - башҡа баҫманы үҙ итә. Нисек кенә булмаһын, еңел мәғлүмәткә өйрәнгәндәр өсөн түгел беҙҙең баҫма. Теләһә ниндәй криминаль хәлдәр, ғәйбәттәр, имешмимеш хәбәрҙәр менән мауыҡҡандар өсөн дә түгел гәзитебеҙ. Аҡылын күңел төпкөлөнә йәшереп, ғәмен, дәртен ойотҡандар ҙа уҡый алмаҫ уны. Уйлана белгәндәр өсөн ул "Киске Өфө".

Ижад майҙанында еңеллек эҙләмәйбеҙ, уҡыусыларыбыҙға ла еңелелпе хәбәрҙәр менән күңел донъяларын сүпләргә кәңәш итмәйбеҙ. Беҙҙе бөгөн тормош шундай һынау алдына килтереп ҡуйҙы: әллә ҡайҙа ситкә тайпылып китеп барабыҙ. Насар ғәҙәттәргә эйәреп, упҡынға табан атлайбыҙ. Заман шауҡымына эйәреп, милләтебеҙҙән, асылыбыҙҙан, тамырҙарыбыҙҙан ситләшәбеҙ, хатта ата-әсә өгөтөн һанламайбыҙ. Кешенең иң ҙур трагедияһы, бар бәләләренең башы - асылынан ситләшеү. Ошо мәхшәрҙе туҡтатыр, халҡыбыҙҙы, бигерәк тә йәштәребеҙҙе тоғро юлға күндерер һүҙ кәрәк халҡыбыҙға. Аҡһаҡалдар, ағинәйҙәр, Зәйнулла ишан һымаҡ дин әһелдәренең һүҙе. Ә туған телдәге баҫмалар журналистары ошондай һүҙҙәрҙе ынйы бөртөгөләй йыйып, уларҙы бер епкә теҙергә тейеш.Ошо асыл һүҙ ҡомартҡыһын күҙенә элгәндәр, иманына ҡайтҡандар ғына ҡотолор заман һынауҙарынан. Иманына ҡайтҡандар ғына ахырызаман мәхшәренән имен ҡалыр.Бына ниндәй оло бурыс йөкмәтелгән милли баҫмаларыбыҙ иңенә. Беҙ, "Киске Өфө" гәзите коллективы, ошо яуаплылыкты тойоп эшләйбеҙ. Шуға ла матбуғат майҙанында сиҙәм аҡтарып, үҙ юлыбыҙҙы һалабыҙ...

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Был риүәйәтте лә һөйләгәнебеҙ барҙыр. Һүҙебеҙгә раҫ килтереп, тағы бер ҡабатлауҙан зыян булмаҫ."Бер саҡ Хоҙай Тәғәлә кешеләрҙең туктауһыҙ зарланыуынан, уфылдауынан арып киткән һәм уларҙан ҡайҙалыр йәшеренеп, ял итеп алырға булған. Шул саҡ фәрештәләренең береһе Уға шундай кәңәш биргән:"Хаҡ Тәғәләбеҙ, ҡайҙа ғына йәшенһәгеҙ ҙә, кешеләрҙең зарынан ҡотола алмаҫһығыҙ, улар Һеҙҙе Кафтау башына ҡасһағыҙ ҙа, диңгеҙ төбөнә төшһәгеҙ ҙә табасаҡ. Кеше таба алмаҫлыҡ бер генә урын бар: ул кешенең күңелендә. Шунда йәшеренегеҙ. Кеше бер ваҡытта ла үҙенең күңеленә күҙ һалмай..." Бына шулай. Бәхетле, уңышлы, өлөшлө, эшле һәм ашлы булыр, тормош маҡсатына өлгәшер өсөн бары тик үҙ күңеленә күҙ һалыу етә, тигәнгә ишара был.Быларға өлгәшеү өсөн "Киске Өфө" нө уҡығыҙ, ундағы фекер-кәңәштәрҙе ҡундырып алығыҙ күңелегеҙгә, тигәндә лә өҫтәп ҡуям. Аҡылығыҙҙы ойотмағыҙ, милләттәштәр!**



**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитовтың рәсми сайты асылды. Ул интернетта **www.presidentrb.ru** адресы буйынса урынлашҡан. Быға тиклем Президент сайты функцияһын БР-ҙың рәсми мәғлүмәти порталы үтәй ине. Президенттың беренсе персональ сайтында БР Президентының эшмәкәрлеге, уның статусы һәм вәкәләттәре, эске сәйәсәт һәм эш графигы менән танышырға мөмкин.

✓Республика парламенты спикеры, "Берҙәм Рәсәй" партияһының Башҡортостан төбәк бүлексәһе секретары Константин Толкачев белдереүенсә, 77 700 башҡортостанлы "Берҙәм Рәсәй" сафтарында иҫәпләнә. Төбәк бүлексәһе был күрһәткес буйынса Рәсәйҙә бишенсе урында. Төбәк политсоветы 2010 йылдың аҙағына тиклем республика һайлаусыларының 2,7 процентын "Берҙәм Рәсәй" партияһына йәлеп итергә тигән маҡсат ҡуйһа ла, республиканың күп районларында был күрһәткес күпкә юғарыраҡ, мәҫәлән, Нуриман районында - 6,7, Мәләүездә - 4,8, Илештә - 4,7, Ауырғазыла 4,3 процент.

✓2010 йылдағы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуҙың мөһим этабы тамамланды. Хәҙер белгестәр йыйылған мәғлүмәтте эшкәртеү менән мәшғүл. Алдан иҫәпләүҙәр буйынса, кампания барышында Башҡортостанда 4049,9 мең кеше теркәлгән. Уларҙың 2441,1 меңе - ҡалаларҙа, 1608,8 меңе ауылда йәшәй. Башҡортостанстат 8 ноябрҙә иҫәпләү ҡағыҙҙарын ҡабул итә башлаясаҡ, мәғлүмәттәрҙе эшкәртеү киләһе йылдың ғинуар урталарынан майға тиклем дауам итәсәк. Тәүге рәсми мәғлүмәттәр 2011 йылдың апрелендә донъя күрәсәк.

✓2011 йылға Башҡортостан бюджеты проектына индерелгән етди үҙгәрештәр һөҙөмтәһендә, республикала киләһе йылдан минималь эш хаҡы күләме артасаҡ. Республика Президенты Рөстәм Хәмитов белдереүенсә, 2011 йылдың 1 ғинуарынан минималь эш хаҡы 5500 тирәһе буласаҡ.

✓1 ноябрҙән "Өфө" аэропортынан Мәскәүгә "Скай Экспресс" (Sky Express) авиакомпанияһының даими рейстары асылды. Бөгөнгө көндә Мәскәү йүнәлешендә пассажирҙар ташыу менән шөғөлләнгән алты компаниянан айырмалы рәүештә, "Скай Экспресс" арзаныраҡ билет тәҡдим итеүе менән отошло. Әлегә рейс аҙнаһына өс тапҡыр ойошторолһа, декабрь башынан самолеттар Мәскәүгә көн һайын оса башлаясаҡ.

АҘНА ШАҢДАУЫ

# БЕРГӘ-БЕРГӘ, БАТТЫҠ ҠАРА ТИРГӘ,

## йәки Халыҡ берҙәмлеге көнө уңайы менән тыуған уйҙар

**4 ноябрь - Халыҡ берҙәмлеге көнө. Әле генә, 2005 йылда ғына, булдырылған байрам. Кем тарафынан, тиһегеҙме? Әлбиттә, дәүләт тарафынан. Уны ваҡытлы матбуғат сараларында бөтә халыҡ байрамы тип тә, иң мөһим дәүләт байрамы тип тә атап ҡарайҙар. Әммә әлегә халыҡ уны үҙ байрамы тип ҡабул итергә бер ҙә теләмәй. Берләшергә ашыҡмай. Был хәл нимәнән килә һуң? Халыҡтың берҙәм булырға теләмәүенәнме икән? Ай-һай, кәрәк саҡта - һуғыш булһынмы ул, әллә байрам булһынмы, кешеләр шунда уҡ тупланып, ойошҡан бер көскә әүерелә, берләшә. Ана, мәҡәлдәрҙә генә алып ҡарағыҙ. "Ил төкөрһә...". Аҙағын әйтеп тә тормайым, үҙегеҙ беләһегеҙ. "Ил бар ерҙә сыпсыҡ үлмәй", "Ил көйөнгәндә көйөн, ил һөйөнгәндә һөйөн" тигән һәм башҡа бик күп мәҡәлдәр тап ана шул берҙәмлек хаҡында һөйләй түгелме? Ә һепертке һәм айырым-айырым сыбыҡтар тураһындағы бөтә халыҡтарҙа тиерлек булған хикәйәт?**

Халыҡтың берҙәмлеген бер нисек тә инҡар итеп булмай. Мәсәлән, күп кенә милләттәрҙә борон-борондан килгән бергәләшеп эш эшләү йолаһы бар. Башҡорттарҙа - ул өмә. Өмәләшеп йорт күтәргәндәр һәм йорт-ҡура һылағандар. Хәҙер ҙә күтәрәләр, хәҙер ҙә һылайҙар. Бергәләшеп ҡаҙ йолҡалар. Кәбән ҡоялар. Һарыҡ ҡырҡалар. Урыҫтарҙа ул "помочи" тип аталған. Сыуаштарҙа - "пулаш" (булашыу һүҙенәнме икән?) йәки "ниме", чечендарҙа - "белхи". Кешеләр бергәләшеп юл һалған, янғындан зыян күреүселәргә ярҙам иткән, саман һуҡҡан, мәсет һәм сиркәүҙәр күтәргән. Халыҡ бергәләшеп эшләп кенә ҡалмаған, бергәләп ял итә, күңел аса, байрам ойоштора белгән. Һабантуй булһынмы, әллә урыҫтарҙың масленицаһымы, мариҙарҙың шорыкйолдарымы - халыҡ һәр ваҡыт бергә булған. Бергәләшеп ат сабыштырған, батырҙарҙың көрәшкәндәрен тамаша ҡылған. Урыҫтарҙың хатта бергәләшеп ауылға ауыл, урамға урам йөҙрөк һуғышына йөрөү йолаһы булған. Юҡҡа ғынамы ни башҡорт "Айырылғанды - айыу, бүленгәнде бүре ашар" тиһә, урыҫ уны "Один в поле не воин" тип күтәреп алған. Ингуштар иһә "Халыҡтың берҙәмлеге таштан да нығыраҡ" тип ҡеүәтләгән. Ул ғына ла түгел, йәмәғәт, кеше бит хатта араҡыны яңғыҙы эсә алмай. Бер танышым эргәһендә рюмка күтәрерлек кеше булмаһа, көҙгөгә ҡаршы ултырып булһа ла шешәнең төбөнә төшә. Үҙ-үҙе менән (көҙгө аша) сәкәштерә, үҙенә һүҙ ҡуша...

Ә һуғыш башланһа... Борон башҡорт урыҫ иленә сит-яттар һуғыш менән килһә, баш күтәреүҙәрен туктатып тороп, Рәсәйҙе яҡларға яу сапҡан түгелме? Тимәк, дәүләткә хәүеф-хафа янаһа, тотош халыҡ үҙ мәнфәғәттәрен ситкә ҡуйып (хатта ул ергә, дингә, телгә ҡағылһа ла) дәүләт мәнфәғәттәрен өҫтөн ҡуйған.

Булмаһа, был байрамдың тарихын байҡайыҡ. Бәлки, бөтә хикмәт шундалыр? 1598-1613 йылдар. Рәсәйҙә Болғансыҡ осор. Ундырышһыҙ йылдар. Йәй буйына ҡырау төшә. Сентябрь айынан Рәсәйҙә ҡар ята. Иген уңмай. Илдә аслыҡ. Иван Яуыз вафат булғас, Мәскәүҙә власть баярҙар ҡулдарына күсә. Ас халыҡ баш ҡалаға ағыла. Уларға икмәк тараталар. Әммә ҡорһағы буш халыҡты икмәк менән генә туйындырып буламы? Асланғас кешеләр оло юлға сыға. Был Пикалево халҡы кеүек федераль трассаға арҡыры сығыуҙы аңлатмай. Оло юлға сығыу - ул юлаусыларҙы талап ғүмер итеү тигән һүҙ. Бишәр йөҙ кешене берләштергән юлбаҫар шайкалары барлыҡҡа килә. Халыҡ араһында Иван батшаның алтынсымы, етенсеме ефетенән тыуған улы Дмитрийҙың тере ҡалыуы хаҡында хәбәр тарала (асылда иһә, ул 1591 йылда уҡ үлтерелә). Ошо ваҡытта илдә "Ялған Дмитрий" пәйҙә була. Уның кем булыуы, ҡайҙан килеп сығыуы әле һаман булһа ла бәхәсле. Үҙен Дмитрий батша тип атаусы Рәсәй тәхетенә эйә булыу маҡсатында ярҙам һорап, поляктарға мөрәжәғәт итә. Польша короле Сигизмунд Ялған Дмитрийҙы Рәсәй батшаһы тип ҡабул итә, уға ярҙам вәғәҙә итә. Һәм 1605 йылда Ялған батша йыйын әтәргәләмдәрҙән торған ғәскәре менән Мәскәүгә инә. Урыҫ баярҙары уны ысын батша, Иван Яуыздың тулы хоҡуҡлы вариҫы тип иғлан итә. Хатта уны электән күреп әле "таныусылар" ҙа табылған, имеш. Аңлап торһағыҙҙыр, баярҙар ул саҡта Рәсәйҙә власты һынландырған ҡатлам.

Ялған Дмитрий батша булғас, Рәсәйгә сит-яттарға ишек шар асыла. Ҡалалар, ауылдар нуғай урҙалары, ҡырым татарҙары, поляк һәм литва ғәскәрҙәре, хатта Запорожье казактары тарафынан аяуһыҙ талана, кеше тамам бөлгөнлөккә төшә. Халыҡ быға сыҙамай. Илдең төрлө төбәктәрендә баҫҡынсыларға ҡаршы баш күтәрә, яуға сыға. Урындағы воеводалар, халыҡты ҡоралландырып, ополчение (йәғни, халыҡ ғәскәре) ойоштора. Түбәнге Новгород ҡалаһынан урындағы староста Кузьма Минин менән кенәз Дмитрий Пожарский ойошторған ополчение Мәскәүҙән поляктарҙы ҡыуып сығара ла инде. Был хәл 1612 йылда була. Бөгөнгө календарь буйынса, ваҡиға яҡынса 4 ноябргә тура килә. Йәғни, тап ошо көндә халыҡ берләшеп (иң мөһиме, үҙ-ара ғына түгел, ә ябай ҡатлам булған крәҫтиәндәр юғары ҡатлам булған кенәздәр, воеводалар менән ойошоп! Быны әтнәкәһе ҡайҙа уның!) илдең азатлығын, үҙ аллылығын яулап, заманса әйткәндә, суверенитетын яҡлап алып ҡалған. Бына ҡалай боронғо тарихы бар был байрамдың, тиерһегеҙ, моғайын. Асылда иһә, ул көндө 1917 йылға тиклем үк байрам иткәндәр. Алла инәһенең Ҡаҙан иконаһы (Казанская икона Божьей матери) көнө, тип. Бәҡтиһән, Минин менән Пожарский Мәскәүгә бәреп ингәндә, уларҙың ҡулдарында тап ошо икона булған, имеш. Һәм ул ополчениеға көс-ҡеүәт, ғәйрәт биреп, еңеүгә өндәп торған. Бына бит, тағы ла ҡайһы ягы бар был байрамдың. Әммә нишләптер һаман халыҡ берләшергә теләмәй был көн тирәләй. Эйе, ял итергә өҫтәмә көн барлыҡҡа килеүе, һис шикһеҙ, насар түгел. Әммә был ҡарарҙы ҡабул итеүсе баяр... ғәфү, йәмәғәт, түрәләр, Мәскәү түрәләре, халыҡты берләштереү хаҡында түгел, ә бөтәнләй икенсе нәмә тураһында уйлаған һымаҡ. Хәтерегеҙҙәлер, быға тиклем ноябрҙең етеһендә бөтә Рәсәй һәм элекке СССР халҡы Бөйөк Октябрь революцияһының йыллығын байрам итә торғайны. Ул ваҡиға элекке (батша тип әйтәйемме икән) календарь буйынса 25 октябргә тура килеүгә ҡарамаҫтан, совет заманында 7 ноябрь байрам көнө булды. Яңы Рәсәй етәкселеге халыҡты ошо (бөгөнгө ваҡытта кәрәк булмаған һәм хатта билдәле бер кимәлдә зыянлы) датанан айырыр өсөн (халыҡ хәтеренән юйып ташлар өсөн, тип тә әйтергә мөмкин) 4 ноябрҙе Халыҡ берҙәмлеге көнө тип иғлан итә лә инде. 1612 йылдағы ваҡиға булмаһа, икенсе берәй нәмә уйлап сығарылыр ине, моғайын.

Халыҡ берҙәмлеге хаҡында дауам итәйек. Бөйөк Ватан һуғышын телгә алып тормайым. Ситтән килгән дошманға ҡаршы Рәсәй халҡы һәр ваҡыт тиерлек берҙәм күтәрелгән. Айырым хыянатсылар хаҡында түгел бөгөн һүҙ. Халыҡтың был сифатын (бергәләшеп дәррәү күтәрелеп сығыу һәләтен, тимәк) Сталиндан һуң да оҫта файҙаландылар. Хрущевтың сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрен күтәреү кампанияһы, мәсәлән. Халыҡ һәр ваҡыт властың (1612 йылда - баярҙарҙың, 1941-1945 йылдарҙа Сталиндың һәм уның эргәһендәгеләрҙең, һуңынан Хрущевтың, Брежневтың һ.б.) хаталы ҡарарҙарын үҙ яурындарында күтәреп, хыянатсыл эшмәкәрлектәрен үҙ елкәһендә татып, барыбер ахыры сиктә еңеүсе булып сыҡҡан.

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, беҙҙең илдә халыҡты бер ваҡытта ла кешегә һанаманылар. Ул һәр ваҡытта ла ресурс, кеше ресурсы булып ҡына ҡала килде. Нефть йәки газ, урман йәки һыу кеүек үк. Ә "ресурс"ты бит төрлөсә файҙаланырға һәм ҡулланырға мөмкин - танкыларға ҡаршы ташларға, Кавказ тауҙарында конституцион тәртип урынлаштырырға, тауыштарын тартып алырға... Уйлы, фекерле, тауышлы халыҡ кәрәкмәй власҡа. "Ресурс" кәрәк - амбразураға ятырға, таранға барырға, тауыш бирергә. Ә ирекле кешене "ресурс"ҡа әүерелдерер өсөн бары тик ҡурҡытып тотоу ғына фарыҙ. Шул юл менән генә уны ауыҙлыҡларға һәм теҙгендә тоторға мөмкин. Аттың уртын шаҡарып ауыҙлыҡ кейҙергән һымаҡ. Ә "бүләк"кә (йәғни, һоло урынына) иһә - иҫәпһеҙ-һанһыҙ байрамдар. Халыҡ берҙәмлеге көнө ише, мәсәлән.



**Таһир ИШКИНИН.**

Минең сайт: **www.ishkinin.net**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Амур өлкәһенең Благовещенск ҡалаһында башҡорт балы күргәҙмәһе үтте. "Амур.инфо" агентлығы хәбәр итеүенсә, был ҡала халҡына башҡорт умартасылары шифалы балдың егерменән артыҡ төрөн тәҡдим иткән. Сортына ҡарап, татлы аҙыҡтың бер килограмы 450 һумдан 950 һумға тиклем тора.

✓ БР Президенты Рөстәм Хәмитов Өфө-аэропорт автомобиль юлында урынлашҡан ИКЕА сауҙа комплексы төҙөлөшө менән танышты. Президент әйтеүенсә, төҙөлөш документацияһындағы ҡайһы бер пункттарҙы тәртипкә килтерәһе бар, тиҙ арала ошо кәмселектәр бөтөрөлһә, сауҙа комплексы бер нисә аҙнанан асыласаҡ.

✓ 2011 йылда "Берҙәм Рәсәй" партияһының социаль программалары сиктәрендә Өфөлә, Стәрлетамаҡта һәм Бөрөлә яңы спорт объекттары төҙөләсәк. Был турала партияның Юғары советы рәйесе Борис Грызлов үҙенең БР Президенты Рөстәм Хәмитовҡа яҙған хатында белдерә. М. Аҡмулла исемендәге БДПУ партияның "500 бассейн" проектына ингән һәм киләһе йылда был уҡыу йортонда бассейн барлыҡҡа киләсәк. Алдан иҫәпләүҙәр буйынса, объекттың хаҡы 130 млн һумдан ашыу.

✓ Республикала үҙ эшен асырға теләүселәр өсөн "старт-ап"ҡа документтар ҡабул итеү эше ҡайтанан тергеҙелде. Яңы эш башлаусы эшҡыуарҙарға 300 мең һумға тиклем аҡса бирелә. Ғаризалар республиканың Бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереү һәм ярҙам фонды бинаһында ҡабул ителә.

✓ Силәбе өлкәһенең Йәмәғәт палатаһы Рөстәм Хәмитовҡа хат менән мөрәжәғәт итте. Һуңғы арала Ирәмәл тауына бәйле хәлдәрҙән һуң, күрше төбәктең йәмәғәт эшмәкәрҙәре экологик ҡағиҙәләрҙе боҙған өсөн яуаплылыҡты арттырыу кәрәклеге тураһында һәм тәбиғәтте һаҡлау өсөн көрәшеүсе йәмәғәт ойошмаларына ярҙам итәсәктәрен белдерә.

✓ "Башгидромет" үҙәге хәбәр итеүенсә, алдағы көндәрҙә республикала ямғыр һәм ҡар яуыуы көтөлә. Төндә минус бер градустан дүрт градусҡа тиклем һалҡынайтасаҡ. Көндөҙ - нулдән плюс биш градусҡа тиклем. Шулай уҡ Башҡортостанда ай уртаһына тиклем ҡар ятмаясағы тураһында ла хәбәр итәләр "Башгидромет" үҙәгенән.

# БИШ, ТИГӘС ТӘ НИ ЯМАН?

## Ильястан Иван тыуһа, шул яман...

**Ошо көндәрҙә Өфө балалар ижады һарайында Совет районының балалар баҡсалары, урта һәм урта махсус белем биреү учреждениелары араһында "Шәжәрә байрамы" үтте. Сараға килеүселәр үҙҙәрен тарих биттәрен аҡтарыусы бөгөнгө заман Геродоты итеп тойғандыр. Минең дә күҙ алдыма бер нисә быуат элек булып үткән шанлы ваҡиғалар килеп баҫҡандай булды. Ырыу шәжәрәһе шул ырыу кешеләренең ергә аҫабалығын билдәләгән берҙән-бер документ булған. Аҫабалығын юғалтҡан башҡорт байғош тип иҫәпләнгән. Шуға күрә, ергә үҙенең хужа булыуын дәлилләү өсөн шәжәрә ҡағыҙҙарын нәҫелдән-нәҫелгә васыят итеп ҡалдыра торған булған боронғолар. Бөгөнгө шәжәрәләр аҫабалыҡ хоҡуғын ҡайтанан тергеҙергә ярҙам итерме, юҡмы, белмәйем. Әммә уларҙың милләтте милләт итеп һаҡлап ҡаласаҡ документтарҙың береһе булыуына иманыбыҙ камил.**



Байрамды асҡан саҡта Совет районы хакимиәте башлығы урынбаҫары Махийәнов Рифан Нәби улы оло нәҫел ағасын халҡыбыҙ ысынбарлығы менән сағыштырып, бик матур фекер әйтте: "Ағас үҙенең тәрән тамырҙары менән туйынырға тейеш. Уның көсө - тамырҙарынан килгән һутта". Был фекерҙе һәр сығыш ҡеүәтләне. Ҡурай, ҡумыҙ, думбыра сынына, ҡобайыр, йыр моңдарына сорналып, бейеүҙәр, сәхнәләштереүҙәр һәм интерактив таҡталар ярҙамында көсәйтелеп тәҡдим ителде нәҫелдәр сылбыры. Сәхнәгә сыҡҡан һәр ҡатнашыусы "Шәжәрә" байрамына яңы биҙәк өҫтәне. Фатима Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһы сығышын билдәләп үтергә кәрәк. Оҙаҡ йылдар уҡытыусы булып эшләгән Таңһылыу Лотфулла ҡыҙы Ғәниева шәжәрә тураһында һөйләүҙе бай концерт номерҙары, "Тереһыу" фольклор ансамбле сығыштары менән байытты.

27-се мәктәп уҡытыусыһы Рәзилә Аслаеваның 5 йәшлек Ильяс исемле улы барыбыҙҙы ла хайран итте. Һүҙҙең ни тиклем ҙур тәьҫир итеү көсөнә эйә икәнен яҡшы белә Рәзилә апай Аслаева. Уларҙың һәр һүҙе -ҡанатлы, һәр хәрәкәте - халыҡсан. Бәләкәй Ильястың үҙе менән таныштырып, "Мин - бөрйән ырыуынан Ильяс батыр булам", тиеүе, үҙ ырыуының тамғаларын шартлатып әйтеүе, ут сәсрәтеп бейеүе, ата-әсәһе шәжәрәһен яттан һөйләүе, әсәһе менән "Бер тигәс тә ни яман" ҡобайыры ярҙамында сәсәнлеген дә күрһәтеүе байрамдан ҡабатланмаҫ тәьҫораттар ҡалдырҙы. Әсәһенең "Биш тигәс тә, ни яман", тип һорауына баланың "Ильястан Иван тыуһа - шул яман!" тип яуап биреүе тетрәндерҙе. Биш йәшлек малайҙың рухы ҡайһы бер ун биш йәшлектәр өсөн дә өлгө булырлыҡ. Был сараның күҙгә бик үк ташланып бармаған, әммә иң төп әһәмиәте - Ильяс кеүек балаларҙы ошо сараға әҙерләү, уларҙың күңелен халҡыбыҙ моңо, рухы менән байытыу ул.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**"Шәжәрә байрамы"на килгән мәктәп уҡыусылары араһында ҡайһы берәүҙәр тамашаның бөтөүен дә көтмәй сығып китте. Хәйер, ул балалар килеп ингән саҡта уҡ башҡортса матур итеп биҙәлгән сәхнәгә ҡарап, сәхнә артынан ағылған ҡурай моңон ишетеп, "Нам же здесь не место" тигәйне. Бөгөнгө көндә ҡайһы берәүҙәрҙең тамырҙарын онотоуы бер бөгөн килеп тыуған мәсьәлә түгел. Тик ул балаларҙы ғына ғәйепләргә лә ярамай. Был хаҡта халҡыбыҙ ысынбарлығын бик нескә тойған фекер эйәһе: "Тәбиғәттә имән тамырынан бер ваҡытта ла ҡайын йә ҡарағай үҫеп сыҡмай. Имәндән- имән, ҡарағайҙан - ҡарағай үҫеп сыға. Тәбиғәт бер ваҡытта ла яңылышмай. Ә кешеләр, ниңәлер яңылыша", - тигәйне. Шәжәрәләребеҙҙең иң мөҡәддәс маҡсаты - беҙҙе һаҡлау, беҙҙең бурыс - уларҙы киләһе быуынға еткереү.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**





**Өфөлә йыл һайын үткәрелә килгән һәм ҡала тормошонда матур йолаға әүерелгән сара һәм конкурстар бар. Ошо көндәрҙә шундай бәйгеләрҙең береһе - "Йәш ғаилә - 2010" конкурсының ҡала этабы тамамланды һәм унда Өфө ҡала округының Октябрь районынан Тимербулатовтар ғаиләһе гран-при яуланы.**

# МАҠСАТ - УҢЫШТЫҢ ТӨП СЕРЕ...

## Шулай ти Өфөнөң иң яҡшы йәш ғаиләһе

Сығыштары менән Баймаҡтан булған Римма һәм Шайморат Тимербулатовтар икеһе лә Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында эшләй: Римма Мирсәйет ҡыҙы балаларға башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән белем бирһә, Шайморат Азамат улы хужалыҡ эштәре буйынса директор урынбаҫары. Уларҙың ун йәшлек Гөлйөҙәм исемле ҡыҙҙары һәм дүрт йәшлек Ғайсар исемле улдары Өфөлә йәшәүселәргә "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсы аша яҡшы таныш. Баш ҡалала беренсе тапҡыр уҙғарылған был бәйгелә Гөлйөҙәм гран-при һәм "Өләсәйем әкиәте" тигән номинацияла енеү яулаһа, ә Ғайсар икенсе урын ала. Бынан тыш, Гөлйөҙәм төрлө фәнни-ғәмәли конференцияларҙа ҡатнашып, музыка мәктәбенә лә йөрөп өлгөрә. Ғайсар ҙа апаһынан ҡалышмай, 152-се башҡорт балалар баҡсаһында ойошторолған бер сара ла был бәләкәс йыйрсы һәм бейеүсенән тыш үтмәй. Балаларын халҡыбыҙ педагогикаһы, йола-ғәҙәттәре, байрамдары нигеҙендә тәрбиәләгән Тимербулатовтар башҡорт театрҙарына, концерттарына йөрөргә ярата, өйҙә лә тик башҡортса ғына һөйләшәләр. Хатта Ғайсар күршелә йәшәгән малай-ҡыҙҙарҙың да башҡортса һөйләшеүен талап итә икән.

"Йәш ғаилә" конкурсында Тимербулатовтарҙың 18 быуынлыҡ шәжәрәһе лә, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан ҡартаталарына һәм ҡул эштәренә арналған күргәҙмәләре лә жюри тарафынан юғары баһалана. "Конкурста еңеү өсөн генә түгел, ә республикабыҙҙың баш ҡалаһында ла рухлы, балаларын үҙ милләтенең традицияларында тәрбиәләүсе йәш башҡорт ғаиләләре бар икәнлеген күрһәтеү өсөн дә ҡатнашҡайныҡ", - тиҙәр Римма һәм Шайморат Тимербулатовтар. Һәр сығышынан милли рух бөркөлөп торған был ғаилә, ысынлап та, башҡалар араһында үҙҙәрен лайыҡлы күрһәтеүгә өлгәште.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ғаилә башлығы Шайморат Азамат улының фекеренсә, бәхеткә өлгәшеү, уңышлы булыуҙың төп сере - маҡсат ҡуя белеүҙә. Бигерәк тә ҡалала маҡсатһыҙ йәшәү - ғүмерҙе заяға уҙғарыуға тиң. Ауырлыҡтан да, ҡара эштән дә ҡурҡмаһаң, Өфөлә торлаҡлы ла, машиналы ла булып була, ти ул. Һәм, әлбиттә, халҡыбыҙ артһын, ҡеүәйһен, тиһәк, һәр беребеҙҙең ғаиләбеҙ ныҡ булырға тейеш. Шул саҡта ғына илебеҙҙең дә биле ныҡ булыр.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, баш ҡала йәшәүсе халыҡтың иҫәбе - 1 064 000. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев әйтеүенсә, 2002 йылдағы иҫәп алыуҙар ваҡытында ҡалала 1 022 000 кеше йәшәгән. Халыҡтың иң күбе Октябрь районында йәшәй, икенсе урында - Калинин, унан һуң Орджоникидзе районы тора.

✓Баш ҡалала үткән ауыл хужалығы тауарҙары йәрминкәләрендә 13,8 мең тонна картуф һатылған. Быйыл йәшелсәнең был төрөнә хаҡ байтаҡҡа күтәрелеүгә ҡарамаҫтан, Өфөләр уны күпләп һатып ала һәм 2009 йылдың көҙөндә үткән йәрминкәләрҙә һатылған картуфтың күләме менән сағыштырып ҡарағанда, был һан күпкә кәмемәгән. Шуныһы ҡыҙыҡ: Өфөгә картуфты башлыса сит төбәктәрҙән, мәҫәлән, Барнаулдан, Төмәндән, Красноярскиҙан, Новосибирскиҙан, Магнитогорскиҙан, Омскиҙан, Алтай крайынан, Кемерово өлкәһенән һәм хатта Беларусь республикаһынан килтерәләр.

✓Республикала старт алған "Социаль кәрзин" акцияһында яҡынса 700-гә яҡын сауҙа предприятиеһы ҡатнаша. Уларҙың иҫәбенә "Байрам", "Пятерочка", "Полушка", "Матрица" кеүек эре сауҙа селтәрҙәре лә инә. Башҡорт сауҙа ассоциацияһы белдереүенсә, был акцияға ауыл ерҙәрендә урынлашҡан 70 магазин да ҡушылған.

✓Өфөлә 8 ноябрҙән 19 ноябрҙә тиклем һөт биҙе яман шешен иҫкәртеү маҡсатында махсус акция үтәсәк. Был көндәрҙә ҡаланың 21-се, 18-се, 13-сө, 10-сы, 8-се, 4-се дауаханаларында һәм ҡатын-ҡыҙҙар консультациялары составында УЗД кабинеты булған барлыҡ дауалау-профилактик учреждениеларҙа маммографик һәм ультратауышлы тикшеренеү үтергә, консультациялар алырға мөмкин. Маммографик тикшереү үтеү өсөн 276-13-03 телефоны буйынса берҙәм электрон регистратураға алдан шылтыратып яҙылыу мотлаҡ.

✓Башҡортостан мосолмандары Мәккә һәм Мәҙинәнең изге урындарына хаж ҡылыу өсөн юлға сыҡты. 49 кешенән торған беренсе төркөм Өфөнән аҙна башында сәйәхәткә юлланһа, бөгөн уларҙың тағы бер төркөмөн изге юлға оҙаттылар. Улар "Иҙел Хаж" үҙәге һәм "Аира-Тур" туристик компанияһы тәҡдим иткән тур буйынса хаж ҡыласаҡ һәм 25 ноябрҙә кире әйләнеп ҡайтасаҡ.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ЯҢЫ ТЫУҒАН САБЫЙҘАР МЕНӘН...

## сәй эсеү йолабыҙ ҙа бар беҙҙең

**Һигеҙ йыл эшләү дәүерендә редакциябыҙ хеҙмәткәрҙәренең... бер балалар баҡсалыҡ уҡ булмаһа ла, бер төркөмлөк тиерлек балалары донъяға килде. Быйыл ғына өс бала - баш мөхәррир урынбаҫары, билдәле яҙыусы һәм шағир Әхмәр Үтәбайҙың ҡыҙы Тамсы, баш мөхәррирҙең иҡтисад буйынса урынбаҫары Илһам Әхмәтҡужиндың ҡыҙы Мәликә, редакцияның водителе Рөстәм Абдрахмановтың икенсе улы Искәндәр тыуҙы.**

Балалар бер аҙ яратып-һөйөрлөк, кеше күҙенә күрһәтерлек булған көндә көтөп алып, ошо арала уларҙы әсәләре менән бергә үҙебеҙгә ҡунаҡҡа саҡырҙыҡ. Аталарына оҡшап, был балалар ҙа әүҙем, гәмле, күңелсәк булып сыҡты. Мыжып та ҡарамайынса, көмөш тауыштар сығарып көлһөндәрме, яңы һөнәр күрһәтергә теләп һикерһендәрме, йә үҙҙәренең үтә ҡыҙыҡһыныусан булыуын белдереп, һәр беребеҙҙең битен һыйпап йә тырнап ҡараһындармы... Бала булған ерҙә батша юҡ, тиҙәр халыҡта. Шулайҙыр. Үҙҙәренең ауыҙҙарына ғына ҡаратып ултыртып ҡуйҙы был ҡунаҡтарыбыҙ беҙҙе. Ата-әсәләрен сабыйҙары менән ҡотлап, теләктәр теләгәс, гөрләшеп сәй эскәс, редакцияның килендәре менән һөйләшеп алдыҡ.

Әхмәр Ғүмәр улының хәләле Фәйрүзә Үтәбаева ҡыҙы тураһындағы ҡыҙыҡтары, бала һөйөнөсө менән уртаҡлашып, шуларҙы бәйән итте: "Ҡыҙымды бөгөн "Киске Өфө" ҡунаҡҡа саҡырҙы, мин уға әйәреп килдем. Ҡыҙыбыҙ шундай ирәбе генә, матур ғына булып үҫеп килә, Аллаға шөкөр. Көтөп алған балабыҙ ҡәҙерле булһа ла, әпәүләп бармайбыҙ, беҙҙә нисек тәрбиәләгәндәр, шулай үҫтерергә тырышабыҙ. Атаһы менән күберәк булыуын теләйем. Минә ҡарағанда, атаһы менән күпкә ихласлыраҡ ҡыҙыбыҙ: уның эштән ҡайтҡанын көтөп ала, ундай ихласлыҡ менән минә көлгәне лә юҡ хатта. Исемен атаһы ҡушты. Был исем минең үҙемә лә бик нык оҡшай, ҡыҙыма башҡа исем килешмәҫ тә ине һымаҡ. "Тамсым тыуҙы, донъям мөлдөрәмә тулды", тиели мин. Тамсы минең өләсәйемдең ғүмерен оҙайтыусы ла, тип уйлайым. Ҡартатайым вафат булғандан һуң төнөләп кенә йөрөгән өләсәйем беҙ ауылда сакта дәртләнеп, матур итеп кейенеп, Тамсыға килдем, тип, алыҫ ҡына йәшәүебеҙгә ҡарамаҫтан, йәйәүләп килеп етә, кәнә буйы бала менән уйнап, йәшәүгә дәрт алып ҡайтып китә. Ана шулай ҡарт өләсәһенең тәрбиәһен дә алды Тамсыбыҙ был йәйҙә. Мин ауырлы саҡта уҡ атаһы уға ҡурай уйнай торғайны, шуға күрәләр ҙә, ҡурайға битараф түгел ҡыҙыбыҙ: онотолоп китеп тыңлай. Шулай уҡ боронғо йырҙарҙы ла ярата. Ҡайнымды телевизорҙан күрһәткәйнеләр, тапшырыу бөткәнсе ауыҙ асып ҡарап ултырҙы. Әллә тауышын танины микән? Әле Тамсыға 8 ай. Тиҙ үҫте. Үҙемдең танһығым да ҡанмай ҡалды. Яңы тыуған саҡтарын, йүргәккә төргән мәлдәремде һағынып китәм. Үҙемде тулыһынса уға бағышлайым. Бер ниндәй ауырлығын да тоймай, рәхәтләнеп үҫтерәм мин баламды".

Азалия водителебеҙ Рөстәм Абдрахмановтың хәләле. "Бығаса тиклем "Киске Өфө" гәзите редакцияһына килгәнем юҡ ине, - тине Азалия киленебеҙ. - Бөгөн, ниһайәт, килеп, яратып уҡыған баҫмамды ижад иткән шундай күркәм, ихлас, сабый күңелле коллектив ағзалары менән танышырға насип булды. Беҙ ике ул тәрбиәләйбеҙ: Асҡарға - 4 йәш булһа, Искәндәребеҙгә әле 6 ай ғына. Бөгөн беҙҙең улдарыбыҙ өсөн генә түгел, үҙебеҙ өсөн дә бик ҡыуаныслы ваҡиға булды. Саҡырыуығыҙ өсөн ҙур рәхмәт".

Иң кесе ҡунағыбыҙ Мәликәгә, Илһам Сәйфетдин улының ҡыҙына, әле 4 кенә ай. Бәләкәймен, тип тормаған, әсәһе Раушанияны өйҙә ҡалдырып, ул редакцияға үҙе генә килгән. Ҡунаҡта үҙен бик аҡыллы тотто ҡыҙсыҡ: илап та, мыжып та торманы, "үҙебеҙҙең кешеләр" тип уйланы, ахыры, бер ҙә ятһыраманы ла, ҡулдан-ҡулға йөрөп, һәр кемдән үҙен һөйҙөрөп сыҡты. Собханалла, күҙ генә теймәһен үҙенә!

Ике "хан" үҫтереүсе Гүзәл һәм Тайфур Сәғитовтар Әмирхан менән килгәйне. Батырхан мәктәптә ине әле. Гүзәл беҙҙең редакцияла шулай уҡ бик яуаплы эштә - компьютерҙа версткалаусы булып эшләп, декретҡа сыҡҡайны. Әмирханыбыҙ былтыр тыуған балаларыбыҙ иҫәбендә. Әммә ул быйыл донъяға килгән ҡыҙҙарыбыҙ - Тамсы һәм Мәликә менән әле үк танышып ҡуйырға тейеш, тип уйланыҡ. Халҡыбыҙҙың "Ҡолаҡ тешләтеү" йолаһын атҡарыуға тиклем барып етмәнек тә, шулай ҙа, Алла бойорһа, уныһы ла тергеҙә торған матур йолаларҙың береһе икәнен бер ваҡытта ла иҫтән сығармайбыҙ. Шулай итеп, һүҙҙе Гүзәлебеҙ алды: "Киске Өфө"нән Әмирханды ҡунаҡҡа саҡырып шылтыратҡас, шул тиклем ҡыуандыҡ. Таныштарыбыҙға "Киске Өфө" ҡунаҡҡа саҡырҙы", тинәк, эй, аптырашалар. Ысынлап та, бындай татыу, берҙәм, күңелле, әүҙем коллективтар һирәк осрай шул. Ә бында, гүйә, бер ғаилә йыйылған: эштәре лә ырамлы бара, байрамдарға ла ваҡыттары ҡала, етмәһә, шундай ҙур табын ҡороп, балаларға ла шатлыҡ өләшергә өлгөрәләр. Сабыйҙарҙы шатландырыу - иң ҙур сауаптарҙың береһе. Беҙҙең балаларыбыҙҙы ҡыуандырған өсөн үҙегеҙгә лә ҙур сауаптар яуһын. Малайҙарыбыҙ менән гәзит уҡыусылар "Атың кем" рубрикаһы аша таныш инде. Малайҙарыбыҙҙы бәләкәй саҡтарынан спорт менән дуҫ булырға өйрәтербеҙ, тибеҙ. Әле I класта уҡыған Батырханыбыҙ "Салауат Юлаев" хоккей клубында шөғөлләнә. Әмирхан да ҙурая биргәс, ағаһына ҡушылыр. Киләсәктә малайҙарыбыҙ "Киске Өфө" гәзитен уҡып, үҙҙәре лә ошонда эшләгән ағай-апайҙар кеүек аҡыллы, белемле, рухлы булһындар, тип теләйбеҙ".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Шау-гөр килеп ала торған гәҙәте бар редакциябыҙ коллективының. Ҡорбан байрамында ҡорбан ашы ойоштормай ҡалмайбыҙ, һәр кемебеҙҙең тыуған көнөн билдәләйбеҙ. Ғөмүмән, эш араһындамы, эштән һуңмы, күмәкләп ултырып, шау-гөр килеп, көләшеп сәй эсеп ала торған гәҙәтебеҙ бар (Беҙҙең редакция коллективы айыҡ табындарҙы ғына үҙ итә, икәнен дә әйтеп ҡуяйыҡ). Бына тағы бер матур йолабыҙ - яңы тыуған сабыйҙарҙы ҡунаҡҡа саҡырыу йолаһы тыуып тора. Киләсәктә балалар күберәк тыуһын һәм был йола йышыраҡ ҡабатланһын, тип теләйбеҙ.**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА.**




УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

БЕҘГӘ 8 ЙӘШ

# ХАЛЫҠҠА ХЕҘМӘТ ИТЕҮСЕ БАҪМА

Мәғариф өлкәһендә байтаҡ йылдар эшләгән кеше буларaҡ, балаларға белем биргәндә лә, уларҙа изгелек, Тыуған илгә һәм туған телгә тоғролоҡ, ғәҙеллек кеүек иң күркәм сифаттар тәрбиәләүҙә лә ярҙам итеүсе "Киске Өфө" гәзите минең генә түгел, ә бөтә республика уҡытыусылары һәм тәрбиәселәренең иң яҡын дуҫы. Элегерәк ҡайҙа ғына йөрөһәм дә халыҡҡа "Киске Өфө" гәзите тураһында һөйләп йөрөй торғайным, хәҙер бындай рекламалауға гәзит мохтаж түгел, сөнки уны бөтә ерҙә лә беләләр һәм ратып уҡыйҙар. Үҙем почта килгәс тә иң тәүҙә "Киске Өфө"нө, һуңынан башҡа республика гәзиттәрен уҡыйым һәм аҙаҡтан ҡыҙыҡ өсөн генә "Комсомольская правда" кеүек пиар-гәзиттәргә күҙ йүгертеп сығам.

"Киске Өфө"лә йәнең теләгән әйберҙе уҡырға була, Урал арьяғы халҡы әйтмешләй, юҡ нәмә үҙе юҡ унда. Кеше башҡа йән эйәләренән нимәһе менән айырыла - ул уйлай белә, кешене уй йәшәтә. Был баҫмала һине уйландыра, дөрөҫ йүнәлеш күрһәтә торған рубрикалар ифрат күп һәм төрлө-төрлө. Шиғриәтме, арҙаҡлы ғалимдарыбыҙ, фән әһелдәренең "Диалог" һәм "Монолог"тағы сығыштарымы, Таһир Ишкининдың сәйәсәтеме, халҡыбыҙға ғына хас юморға бай көләмәстәрме, нимә ул тормош тигән һорауға яуап биреүсе афоризмдар һәм риүәйәттәрме, матур йәшәү, аҡыллы булыу өсөн, ниндәйҙер ваҡиғанан фәһем һәм белем алыу өсөн кәрәкле бөтә мәҡәләләр тупланған унда.

Бөгөн телевизорҙан күрһәтелгән "бысраҡ" күренештәрҙән дә, ҡайһы бер гәзиттәр яҙған пиарҙан да халыҡ тиҙҙән ялҡасаҡ. Өс-дүрт-биш йыл элек телевизорҙан яңылыҡтар, Үҙәк каналдарҙан күрһәтелгән бәхәсләшеү ярҙамында дөрөҫлөк эҙләмәк тапшырыуҙарҙы ҡарарға ярата торғайным. Бәхтиһән, улар дөрөҫлөк эҙләмәй, ә бер-береһенә пиар яһай һәм аҡса көрәй булып сыҡты. Ошондай шарттарҙа халыҡты тәрбиәләүсе "Киске Өфө" һымаҡ баҫмаларҙың кәрәклеген тағы ла яҡшыраҡ аңлай башланйһың. Милләтемә хеҙмәт итеүсе бындай гәзиттең булыуы менән бәхетлемен.

**Әхиәт ҒӘЙЕТБАЕВ,**

**Ә. Исҡужин исемендәге 9-сы балалар музыка мәктәбе директоры.**

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Ҡан тамырҙарын таҙартыу



❖ Һарымһаҡ төнәтмәһе яһарға һәм бер тамсы төнәтмәгә 7-8 тамсы һөт өҫтәп эсергә. Был төнәтмә ҡан тамырҙарындағы төрлө ултырмаларҙы ҡырып төшөрә, таҙалай.

❖ Сәскә атып өлгөрмәгән кесерткәндең өҫкө өлөшөн япраҡтары менән киҫеп алаһың, ҡуләгәлә киптерәһең. 5 ҡалаҡ ваҡланған үләнде ярты литр һыуға һалаһың да 5 минут һүрән утта бешекләйһең, һуңынан һөҙәһең. Бал йәки шәкәр ҡушып, көнөнә 4 мәртәбә яртышар стакан эсәһең.

### Шәкәр ауырыуынан

❖ 1 ҡалаҡ сирень бөрөһөн 1 литр ҡайнар һыуҙа 2 сәғәт төнәтергә. Ас ҡарынға көнөнә 3 мәртәбә 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Дегәнәк тамыры, шыршы еләге япрағын 30-ар грамм алып, 200 мл ҡайнар һыуҙа 2 сәғәт төнәтергә һәм ашар алдынан көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ 1-2 балғалаҡ ҡыҙыл миләште 1 стакан ҡайнап торған һыуға һалып, 30 минут төнәтергә. Ас ҡарынға көнөнә 2 тапҡыр 2-3 ҡалаҡ эсергә.

❖ 20 грамм ҡара шыршы еләге, 20 грамм кесерткән, 20 грамм туҙғанаҡ тамырына 200 мл ҡайнар һыу ҡушып, 2 сәғәт термоста төнәтәһең. Ашар алдынан 20 минут алда көнөнә 3 мәртәбә яртышар стакан эсергә.

### Гайморит

❖ Салҡан ятып, бал киҫәктәрен сәтәкәй бармаҡ менән танау тишектәренә индерергә кәрәк.

❖ Бер стакан ҡайнаған һыуға ярты ҡалаҡ тоҙ, шул уҡ күләмдә сода, 5 тамсы йод ҡушырға. Ошо ҡатнашманы көнөнә өс тапҡыр пипетка менән танауға һалырға.

### Дүләнә (боярышник)

Йөрәкте ҡан менән тәьмин итеү, ҡан баҫымын тәртиптә тотоу, йөрәк-ҡан тамырҙарын нығытыу өсөн 1 ҡалаҡ ваҡланған емеште йәки сәскәләрен 1 стакан араҡыға һалалар һәм ябыҡ һауытта 7 көн тоталар, һөҙәләр һәм ашар алдынан көнөнә 1 мәртәбә 20-30 тамсы эсәләр.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Аҙғын бай булғансы, абруйлы һәм һөнәрсән фәҡир булыуҙы артыҡ күрегеҙ. Аллаһы Тәғәлә хәҙрәтенә оҡшаған эштәр эшләгеҙ, әмерҙәрен үтәгеҙ. Күңелегеҙҙе вәғәз менән нурландырығыҙ.*






## ОЛОЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Өсөнсө өгөт

Башҡаларҙың ғәйептәрен күрһәгеҙ, үҙ ғәйептәрегеҙҙе хәтерләгеҙ. Үҙ ғәйебен күргән кеше башҡаларҙың ғәйебе менән шөғөлләнмәç. Һис кем өсөн соҡор ҡаҙмағыҙ, юғиһә үҙегеҙ төшөрһөгөҙ. Халыҡ менән көрәшһәгеҙ - йығылырһығыҙ. Мосолмандарҙың йөҙ һыуын түкһәгеҙ, үҙегеҙҙең йөҙ һыуығыҙ түгелер. Фекерегеҙгә хайран булһағыҙ - аҙашырһығыҙ, халыҡҡа тәкәбберлек итһәгеҙ - хур булырһығыҙ. Эштәрегеҙҙә аҡыл эйәләре менән кәңәшләшһәгеҙ - үкенмәçһегеҙ. Ғалимдар мәжлесендә ҡатнашһағыҙ - ололанырһығыҙ. Ахмаҡтар мәжлесенә инһәгеҙ, уларҙың берене булып исәпләнерһегеҙ. Аҙ һөйләгеҙ - аҙ яңылышырһығыҙ. Ялған һөйләп, исем сығарһағыҙ, бөтә халыҡтың күҙенән төшөрһөгөҙ. Шөһрәт әсире булһағыҙ - мәсхәрәгә ҡалырһығыҙ. Һәр кемдең дәрәжәһен белһәгеҙ, хайуандар дәрәжәһенән сығып, кешеләр дәрәжәһенә аяҡ баçырһығыҙ. Аллаһы Тәғәләнән башҡа һис кемдән бер нәмә өмөт итмәгеҙ, теләмәгеҙ, үҙ гонаһтарығыҙҙан башҡа һис бер нәмәнән ҡурҡмағыҙ. Белмәгән нәмәләрҙе: "Белмәйем", - тип әйтеүҙән оялмағыҙ. Белергә тейешле ғәмәлдәрҙе өйрәнеүҙән ғәрләнмәгеҙ. Үҙегеҙ һөйгән нәмәләрҙе башҡалар өсөн дә һөйөгөҙ. Үҙегеҙ өсөн теләмәгән нәмәләрҙе башҡалар өсөн дә теләмәгеҙ. Түбән булған нәфсегеҙҙе кешеләргә ҡол итмәгеҙ. Аҙғын бай булғансы, абруйлы һәм һөнәрсән фәҡир булыуҙы артыҡ күрегеҙ. Аллаһы Тәғәлә хәҙрәтенә оҡшаған эштәр эшләгеҙ, әмерҙәрен үтәгеҙ. Күңелегеҙҙе вәғәз менән нурландырығыҙ. Нәфсегеҙ һимерһә, үлемде иçкә төшөрөгөҙ. Үткән ҡәүемдәр өçтөнә килгән нәмәләрҙе хәтерләп, ғибрәт алығыҙ. Донъяғыҙ өсөн әхирәтегеҙҙе һатмағыҙ. Белмәгән нәмәләр хаҡында белеүсе булып һөйләмәгеҙ. Үҙегеҙгә һөйләнмәгән һүҙҙәргә яуап бирергә тырышмағыҙ. Ахыры боҙоҡлоҡ булыр, тип фараз ителгән юлдарға инмәгеҙ. Аллаһы Тәғәлә ризалығы өмөт ителгән урында халыҡ шелтәһенән ҡурҡмағыҙ. Хәйер эйәләренә яҡын булһағыҙ, уларҙан һаналырһығыҙ. Уçалдарҙан йыраҡ тороғоҙ. Хаҡығыҙ булмаған урындарға ҡарамағыҙ. Харам эш - ағыуҙыр. Үҙ ризыҡтарығыҙҙы үҙегеҙ эшләп табығыҙ. Кешеләргә ышанып ятмағыҙ. Ышанып ятыу иһә тик ҡәберҙә булғандарға ғына ярарлыҡ хәлдер.

*АФАРИН!*

# СӨЛӘЙМӘНОВТАР КӨСӨ МЕНӘН ДӘ...

## милләте менән дә танытты үҙҙәрен донъяға

**Елисей яландарында ит ейеп, ҡымыҙ эсеп, ҡурай тартып, мәҙәнилеге менән Гетены хайран иткән, Ҡаһым түрә тигән батыр етәкселегендә Париж урамдарынан һыбай үткән башҡорттарҙың батырҙары бармы икән бөгөн? Ошо тарихты китаптарҙан уҡыған кемдер, моғайын, үҙ-үҙенә шундай һорауҙы биргәндер. Бәлки, ул кемдер Америка Ҡушма Штаттарында рингҡа сығып, донъянан йыйылған бар бокс оçталарын да еңеп сыҡҡан ул башҡорт егеттәренең еңеүенә лә шаһит булғандыр. "Был ике спортсы ла Рәсәйҙән икән! Кем? Башҡорттар тиһеңме?" - тигән шыбырҙашыуҙарҙы ла ишеткәндер ул...**



2006 йылдың декабре. Нью-Йорк ҡалаһы. Алда һүҙ барған ике егет финалға сыға... Улар хәҙер бер-береһе менән алышырға тейеш... Тамашасылар көтә... Кем еңер? Тулҡынландырғыс бер-нисә минут үтеү менән, судья сығып, икеһенә лә чемпион исеме бирелеүе тураһында хәбәр итә! Ике спортсы ла шат! Сөнки улар быға тиклем бер ваҡытта ла бер-береһенә ҡаршы һуғышмаған. Улар - игеҙәктәр. Туғанлыҡ хисен аяған Нью-Йорк бокссылар берлегендә "Игеҙәктәр финалға сыҡҡан осраҡта улар бер-береһе менән һуғышмай" тигән положение бар икән. Был хәл хас та Голливуд киноһына оҡшаған, эйеме? Әммә был кино ла, йәнһүрәт тә түгел: был - башҡорт егеттәре Хәбир һәм Сабир Сөләймәновтарҙың ҙур спорттағы бер көнө генә...

Әйткәндәй, башҡорт халҡында ағалы-ҡустылылар бер ваҡытта ла бер-береһенә ҡаршы һуғышмаған. Был - быуаттар һуҙымында тәрбиәләнгән аçыл һыҙат. Башҡорт яугирҙәре туғандары менән бер сафта алышҡан. Дуçтарынан бигерәк, туғандарына нығыраҡ ышанған улар. Сетерекле хәлдә иң яҡын дуçтың да һыныуы мөмкин. Шул уҡ ваҡытта ҡан-ҡәрҙәшең һине, ниндәй генә хәл килеп тыуһа ла, ташламай... Был турала Илгизәр Бураҡаевтың "Башҡорт көсө" исемле хикәйәһе айырыуса күңелгә үтеп инерлек итеп бәйән итә. Халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижадында "ағай-эне талаша, атҡа менһә - яраша" тигән әйтем дә бар. Йәғни, көндәлек тормошта була торған ығы-зығыларға ҙур иғтибар бирмәй ир-егеттәр. Ә инде ил-йорт өсөн ҡаза килһә, шунда уҡ яраша. Мәшһүр "Урал батыр" эпосында ағалы-ҡустылы Урал менән Шүлгәндең тормош принциптары ни тиклем ҡапма-ҡаршы булғанда ла, улар бер-береһенә ҡул күтәрмәй... Ошондай бөйөк идея ҡалдырған аҡыл эйәләребеҙгә хайран ҡалырлыҡ бит!

Хәбир менән Сабир - бәләкәй генә башҡорт ауылынан сыҡҡан ҙур егеттәр. 1980 йылдың 17 декабрендә донъяның иң көслө кешеһе - Эльбрус Ниғмәтуллинды биргән Арғаяш районының Илембәт ауылында тыуған улар. Бер-береһенә ике тамсы һыу һымаҡ оҡшаштар үҙҙәре. Күрше Дәрүиш ауылына урта мәктәпкә йөрөп уҡыйҙар. Үҙҙәре бик хәрәкәтсән булып үçә. 17 йәшлек саҡтарында билдәле спортсы, кикбоксинг буйынса Рәсәй һәм Европа чемпионы Салауат Байрамғәлин ҡулында шөғөлләнә башлайҙар. Урта мәктәпте тамамлау менән игеҙәктәр Силәбе ҡалаһының Аграр-инженер университетына уҡырға инә. Күп тә үтмәй, Салауат Байрамғәлиндың кикбоксинг мәктәбе лә Силәбегә күсә. Студент йылдарында ла был спорт төрө менән шөғөлләнеүҙәрен дауам итә егеттәр. Тәүҙә ҡала, тиҙҙән - өлкә, ә артабан Рәсәй кимәлендә еңеү яулай улар.

Ил беренселеге өсөн ярыштарҙың береһендә Рәсәйҙән Америкаға күсеп киткән бер тренер егеттәргә кикбоксингты ҡалдырып, үҙенең мәктәбендә бокс менән шөғөлләнергә тәҡдим итә. "Сөнки АҠШ-та бокс киң таралған", ти ул. Был һөйләшеү уларҙың алдағы тормошонда хәл иткес роль уйнай. "Эмигрант"тың тәҡдименә егеттәр риза була. Шулай итеп, ҡулдарына диплом алған Хәбир менән Сабир Америкаға оса.

АҠШ-тың Нью-Йорк ҡалаһында егеттәр сәмләнеп эш башлай. Көндәлек күнекмәләр, ярыштар... Бер үк ваҡытта инглиз теле буйынса белемдәрен дә камиллаштыралар.

Канзас ҡалаһында һәүәçкәр бокссылар араһында үткәрелгән "Алтын бирсәткә" исемле ярышта 2005 йылда Сабир 54 кг-ға тиклемгеләр араһында - беренсе, ә Хәбир 57 кг-ға тиклемгеләр араһында икенсе урынды яулай. Был еңеү уларҙы артабанғы еңеүҙәргә ҡанатландыра. Бер йыл үткәс, ауырлыҡтарын тигеҙләп, Хәбирҙе игеҙәге Сабир менән бер рингҡа сығаралар. Ошо йылдың декабрендә "Алтын бирсәткә"не үҙ ҡулдарына кейә Сөләймәновтар, йәғни чемпион исемен яулайҙар. Был ярыштан һуң егеттәр, донъя чемпионы исемен яулауға әҙерләнәсәкбеҙ, тигәйнеләр. Күптән түгел Хәбир Сөләймәнов Бөтә донъя бокс берлегенең алтын билбауын яуланы.

Бөгөнгө көндә Хәбир профессиональ спорт менән әүҙем шөғөлләнә. Ул 22 октябрҙә Глендейл (АҠШ, Калифорния) ҡалаһында уҙғарылған Бөтә донъя бокс берекмәһенең WBO NABO вакант титулына лайыҡ булды. Ул Хавьер Галло исемле мексиканлыны 9-сы раундта нокаутҡа ебәрҙе. Хәбир Сөләймәнов менән интернет аша бәйләнешкә сығып, ошо еңеү тураһындағы тәьçораттары менән уртаҡлашыуын үтендек:

- Беренсенән, терәк-таяныс булғандары өсөн барлыҡ яҡташтарыбыҙға рәхмәт еткерергә теләйбеҙ. Шул арҡала беҙ үҙебеҙҙе ышаныслыраҡ тоябыҙ, яңғыҙ түгеллегебеҙ өсөн һөйөнәбеҙ. Икенсенән, Дәүләт Думаһы депутаты Марсель Харис улы Йосоповҡа, беҙгә милли кейем бүләк итеүе өсөн Ғайсина Флүзә Фәтхулла ҡыҙына рәхмәт еткерәбеҙ, - тине ул. - Сабир Силәбе ҡалаһында үҙенең эшен асып ебәрҙе. Унын ҙур булмаған эшҡыуарлыҡ фирмаһы бар, - тип дауам итте һүҙен Американың милләттәшебеҙ үҙенең игеҙәге тураһында. Игеҙәктәрҙең араларында меңәр саҡрымдар ятһа ла, күрешеп торалар. Ярыш алдынан Сабир Америкаға килеп, туғанына терәк-таяныс булған. Милли костюмды ла үҙе менән ул килтергән.

Американдар бер ваҡытта ла башҡорт халҡы тураһында ишеткәндәре юҡ икән. Милли костюм уларға бик оҡшаған. Яҡташыбыҙ был еңеүҙең еңел генә бирелмәүен, дәғүәсеһен тейешенсә баһалап еткермәгәнлеген йәшермәне:

- Тәүҙәрәк мәрәйҙәр буйынса бер аҙ ҡалыша инем, ярыштың урта тирәһендә "икенсе һулышым" асылып киткәндәй булды. Мин Галлоның кәүҙәһен йышыраҡ дөмбәçләй башлағас, унын хәле бөтә башлауын һиҙҙем. Ҡулдарын төшөрә башлаған сағын ғына тура килтереп, үҙемдең яратҡан алымымды ҡулландым - уң яҡтан яңағына эләктерҙем, - ти "алтын билбау" хужаһы. Ҡаршы яҡ спортсыһы ауыр нокаут менән ҡолай. Рефери шунда уҡ ярышты туҡтата... Был еңеүе уға донъяның иң көслө 10 бокссыһы исемлегенә инергә ярҙам итер, тип ышана яҡташыбыҙ. Профессиональ бокстың бер төрөндә бөтә донъя чемпионы исемен яулауҙы маҡсат итеп ҡуйған ул.Әле шул маҡсатына ынтылышы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Хәбир Сөләймәнов сираттағы еңеүенән һуң бүләкләү тантанаһына башҡорт ҡамсат бүреге кейеп сыҡты. Ул шул рәүешле үҙенең көсөн, таһыллығын ғына түгел, тамырҙарын, милләтен бар донъяға танытты.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

*ВӘЛИДИ КӨРӘШТӘШТӘРЕ*



# МӨХТӘР ҠАРАМЫШЕВ

**Мөхтәр Батыргәрәй улы Ҡарамышев - Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан башҡорт офицерҙарының береһе, сардар. 1895 йылда Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙенең (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Ишембай районы) Маҡар ауылында тыуған. Милли хәрәкәт эшмәкәрҙәре Гәрәй һәм Әмир Ҡарамышевтарҙың ҡустыһы.**

Тәүге белемде Маҡар ауылы мәктәбендә ала. 1906 йылда мөғәллим атаһы Орск ҡалаһына эшкә күсерелә, Мөхтәр бында училище тамамлай. Артабан педагогия курстарында белем ала. 1915 йылда хәрби хеҙмәткә алынып, фронтҡа әләгә. 1917 йылдың сентябренә тиклем 14-се драгун полкы составында һуғышта ҡатнаша. Яраланғас, уны бер айға ялға ҡайтарып ебәрәләр. Тиҙҙән инде илдә сәйәси хәлдәр ҡырҡа үҙгәреп китә. Октябрь аҙағында большевиктар власты үҙ ҡулына ала. Мөхтәр тыуған яғына ҡайтҡас, Иҫке Сәйет ауылы мәктәбе мөдире булып эшкә төшә. Был осорҙа Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт киң ҡолас ала. 1918 йылдың ғинуарында Юрматы кантонының беренсе ҡоролтайында М. Ҡарамышев кантон башҡармаһына һайлана. Әммә Ырымбурҙа Башҡорт хөкүмәте ҡулға алыныу менән Башҡортостан автономияһының урындағы власть органдарының эше лә юҡҡа сыға.

1918 йылдың йәйендә прапорщик Ҡарамышев Башҡорт армияһы сафтарына хеҙмәткә алына. Июль айынан башҡорт ғәскәрҙәренең инспекторы булып хеҙмәт итә һәм бер үк ваҡытта ҡорал-боеприпас складының етәксеһе вазифаһын башҡара. Йәғни ғәскәрҙәрҙе ҡорал менән тәьмин итеү буйынса шөғөлләнә. 1918 йылдың 27 авгусында Мөхтәр Ҡарамышевҡа Башҡорт хәрби шураһының артиллерия бүлеге мөдире бурысы йөкмәтелә. Хәрби шураның 28-се (§ 4) фарманында: "Прапорщика Карамышева, назначенного приказом № 7, § 4, инспектором Башкирских войск и заведующим оружием считать с того же числа на должности заведующего артиллерийским отделом ввиду неимения штатных должностей инспектора Башкирских войск и заведующего оружием и фактически ведением складом боевых припасов и оружием Башкирского военного совета", - тиелә.

1918 йылдың көҙөндә прапорщик Ҡарамышев, мәрхүм ағаһы Әмир Ҡарамышев етәкселек иткән 1-се Башҡорт кавалерия полкына командир итеп тәғәйенләнә. Подпоручик званиеһы бирелә. 1-се полк менән ул 1919 йылдың ғинуарына тиклем командалыҡ итә. Ошо осор эсендә Ҡыҙыл армия ғәскәрҙәренә ҡаршы ҡанлы яуҙарҙа ҡатнаша. Күрһәткән батырлыҡтары өсөн ротмистр итеп үрләтелә.

1918 йылдың декабрь аҙағында Мөхтәр Ҡарамышев Стәрлетамаҡ ҡалаһы янында Ҡыҙыл армия частарына ҡаршы фронт тота. Ошо районда һуғышҡан бөтә ирекле башҡорт отрядтары М. Ҡарамышевтың ҡулы аҫтында туплана. Ул Стәрлетамаҡ фронты командующийы итеп тәғәйенләнә. Бында башҡорт ғәскәрҙәренә бик ауыр шарттарҙа һуғышырға тура килә. З. Вәлидиҙең 30 декабрҙә ғәскәри старшина Богдановҡа яҙған хатында асыҡ сағыла: "На Стерлитамакском фронте действует 1-й кавалерийский имени Карамышева полк 400 человек при 152 винтовках и 400 конях. Юрматынский отряд 150 человек, Табынский отряд 200 человек. Туда же двигается Кипчакский отряд 160 человек, Джетировский отряд 120 человек, Тамъян-Катаевский 400 человек, Усерганский отряд 180 человек. Бурзянский 300 человек остается на охране Правительственных учреждений в Баймакском районе.

Руководство башкирским конным полком и отрядами в Стерлитамакском районе объединяются в руках командующего Башкирскими силами Стерлитамакского района, которым назначаю ротмистра Карамышева. Только эти части полуголодные так же не имеют денег и без патронов, пулеметов и недокомплект оружия", - тип хәбәр итә Зәки Вәлиди һәм ҡорал менән ярҙам итеүҙе һорай.

Аҡтарҙан ярҙам ала алмағас, Мөхтәр Ҡарамышев етәкселегендәге ғәскәрҙәр Стәрлетамаҡтан сигенергә мәжбүр була. 1919 йылдың ғинуар башында 1-се Башҡорт кавалерия полкы Башҡорт корпусына барып ҡушыла. 10 ғинуарҙа Зәки Вәлиди М. Ҡарамышевты башҡорт ғәскәрҙәренең баш интенданты итеп тәғәйенләй, ә 1-се Башҡорт кавалерия полкын Муса Мортазин етәкләй.

Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, 1919 йылдың мартында, Мөхтәр Ҡарамышев, Башревкомдың аҙыҡ-түлек бүлеге мөдире, артабан Мораҡ ауылы һәм районы гарнизоны начальнигы булып хеҙмәт итә. Апрель айынан Хәрби эштәр буйынса халыҡ комиссариатында дөйөм эштәр бүлеге (общий части) начальнигы вазифаһында була.

1919 йылдың авгусында, Башҡортостан автономияһы хөкүмәте (Башревком) Саранскиҙан ҡайтҡас, Мөхтәр Ҡарамышев Табын кантоны ревкомы рәйесе итеп тәғәйенләнә. 1919 йылдың декабрендә Тамъян-Ҡатай кантонына хәрби комиссар итеп күсерелә. Һаулығы ҡаҡшау сәбәпле 1920 йылдың ноябрендә Мөхтәр Ҡарамышев тыуған яғына ҡайта һәм уҡытыусы булып эшләй. Әммә тиҙҙән Юрматы кантонының ер эштәре бүлеге мөдире итеп эшкә алына. Унан инде Дыуан-Ҡошсо кантонының Совнархоз рәйесе итеп күсерелә. 1921 йылдың февралендә "Белрайлесконтора"ға комиссар итеп тәғәйенләнә. Октябрь айында Мөхтәр Ҡарамышевты Стәрлетамаҡҡа Башҡортостандың социаль тәьминәт халыҡ комиссариаты коллегияһына эшкә алалар.

Тап ошо осорҙа партия сафтарын таҙартыу эше киң ҡолас ала. 1921 йылдың 15 ноябрендә комиссия Мөхтәр Ҡарамышевтың элекке эшмәкәрлеген тикшереп, Башҡорт армияһында ҡыҙылдарға ҡаршы һуғышҡанын иҫкә төшөрөп: "Исключить из партии как активного участника в борьбе против Совввласти и участника арестов коммунистов при Соввласти как националиста без права вступления...", - тигән хөкөм сығара.

Мөхтәр Ҡарамышевтың артабанғы яҙмышы билдәһеҙ. Күп кенә Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте эшмәкәрҙәрен һәләк иткән 30-сы йылдар репрессияһы уны ла урап үтмәгәндер, күрәһең.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

*УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ*




# ГӘЗИТЕБЕҘ ИЗГЕ ЮЛДА

**"Киске Өфө"гә ул сыға башлағандың тәүге ике йылында ғына яҙыла алмағайныҡ, хәҙер йыл һайын унһыҙ тороп ҡалғаныбыҙ юҡ. Үҙем дә, иптәшем дә, балалар ҙа - бөтә ғаиләбеҙ менән яратып уҡыйбыҙ, көтөп алабыҙ, сөнки "Киске Өфө"нө башҡа бер гәзит менән дә алыштырырлыҡ түгел.**

Тәүге битенән башлап (ундағы анонста ус төбөндәгеләй йөкмәтке күренеп тора), аҙаҡҡы битенә тиклем (иң тәүҙә 16-сы биттәге "Аҡыл-ҡаҙна" рубрикаһын уҡый һалып алам) йөкмәткеле, ғибрәтле, ҡыҙыҡлы мәҡәләләрҙән туплана гәзиттең һәр һаны. Шулай әйләндереп, тулғандырып, яңынан тәүге биттәргә йомолам. 3-сө бите, Таһир Ишкининдың "Көн ҡаҙағы"на ғына һуктырған аналитик мәҡәләнең аҡрынлап, һеңдереп уҡыйым. Уның кеүек яҙған башҡа журналисты мин белмәйем: кинәйәләп, йомшаҡ ҡына һөйләү стиле, үҙенсәлекле юморы менән ниндәй ҡатыға ултырта ул ҡайны берәүҙәрҙе! Төрлө рангылағы чиновниктарҙан да ҡурҡып тормай, афарин!

Артабанғы биттәр һәр береһе үҙенсәлекле тематикаһы менән матур һәм уҡымлы. Урта биттәрҙәге "Диалог", "Монолог", "Ғаилә ҡоро" һәм башҡа рубрикалар тормошсан мәсьәләләр, милләтебеҙ яҙмышы, киләсәге өсөн мөһим проблемалар күтәреүе менән ҡиммәтле. Әйткәндәй, "Киске Өфө" балалар өсөн дә, йәштәр өсөн дә, өлкәндәр өсөн дә берҙәй уҡымлы баҫма. Мәктәп уҡыусылары, уҡытыусылар өсөн күпме тарихи сығанаҡтар, күләмле мәҡәләләр баҫылы! Беҙ үҙебеҙ рус ғалимы һәм тарихсыһы Иван Лепехиндың башҡорттар хаҡындағы яҙмаларын ҡыҙыҡһынып уҡыныҡ. Йәш ғаиләләр өсөн бала тәрбиәләүҙә "Тәнәйҙәгә тәғәйен тәрбиә" халҡыбыҙҙың тормош тәжрибәһенән сығып, бик урынлы, матур кәңәштәр бирә.

...Өлкәнәйелә инде, 66 йәш менән барғанда инде күпте лә белһәң кеүек, ләкин ошо үҙебеҙҙең "Киске Өфө"нө уҡыған һайын шуға инанаһың: мәңге йәшә һәм мәңге уҡы икән ул! Күпме фекер донъяһы, күпме уй уята гәзитебеҙ битарҙ булмаған уяу күңелдәрҙә! Хатта 96 йәшлек атайым беҙгә Билалдан ҡунаҡҡа килгән арала ла, күҙлеген кейеп, ошо гәзитте ентекләп уҡып сыға. "Бына ошо мәҡәләне уҡынығыҙмы, уҡығыҙ әле!" - тип билдәләп ҡуя йәки гәзитте үҙе менән алып ҡайтып китә.

Йәл, гәзит хаҡында фекерҙәрҙе теркәп барыу ғәҙәтем юҡ, бер юлы ына бөтәһен дә һөйләп тә бөтөрөрлөк түгел. Иң мөһиме: "Киске Өфө" милләтебеҙҙе асылына әйҙәүсе изге юлда. Ошо юлда уға Хоҙай Тәғәлә ярҙам, илһам һәм сабырлыҡ бирһен. Беҙ, гәзиттең меңәрләгән уҡыусылары ла, ситтә тороп ҡалмайыҡ: "Киске Өфө"нө халҡыбыҙ араһында таратыуҙа, гәзиттең йөкмәткеһен төрләндереүҙә ҡулыбыҙҙан килгән ярҙамды күрһәтәйек.

**Сания ӘМИНЕВА.**
**Баймаҡ районы Темәс ауылы.**

*БЫЛ - ГОНАҺ!*



# ЯТ МӨЛКӘТТЕ ҮҘЛӘШТЕРЕҮ

**"Баҡара" сүрәһенең 188-се аятында: "Бер-берегеҙҙең малын ғәҙелһеҙлек менән тартып алып ашамағыҙ. Кешенең малын өлөшләтә генә булһа ла махсус тартып алыр өсөн, хөкөмдарҙарға ришүәт бирмәгеҙ. Был - гонаһ", - тип яҙылған.**

Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм):

**"Кем дә кем күршеһенең бер ҡарыштай булһа ла ерен баҫып алһа, Ҡиәмәт көнөндә уның муйынына баҫып алғанынан ете тапҡыр артыҡ дүңгәләк кейҙерәләр".**

Ҡөрьәндә яҙылған: **"Шик юҡ, Аллаһ һеҙгә туҙан бөртөгө кеүек тә ғәҙелһеҙлек ҡылмаҫ"** ("Ниса", 44).

Хәҙистә әйтелә: **"Аллаһ кешеләрҙең бер-береһенә ҡарата күрһәткән ғәҙелһеҙлектәре тураһында яҙыуҙарҙы иғтибарһыҙ ҡалдырмаҫ".**

Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): **"Мул бурысты түләүҙе һуҙыу ғәҙелһеҙлек"**, - тигән.

Иң ҙур ғәҙелһеҙлек - һинә тейеш булмаған килемдә алыр өсөн алдап ант итеү. Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): **"Кем дә кем ант итеп мосолмандың мөлкәтен үҙләштерә, шуның өсөн тамуҡты аса һәм ожмахты тыйылған итә"**, - тигән. Унан: **"Эй, Аллаһ илсеһе! Хатта ваҡ-төйәк әйбер булһаламы?"** - тип һорағандар икән, Ул: **"Хатта мисуҡ ағасының һабағы ла"**, - тип яуап биргән.

Икенсе бер хәҙистә Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): **"Әгәр кемде лә булһа беҙ хеҙмәтсе итеп тәғәйенләһәк һәм ул беҙҙән энә булһа ла урлаһа, ул хыянатсы булыр, һәм Ҡиәмәт көнөндә ул урлаған нәмәһе менән килер"**, - тигән.

**"Аллаһтың мөлкәтен ғәҙелһеҙ юлдар менән алыусыны Ҡиәмәт көнөндә ут көтәр".**

**"Тыйылған ризыкты ашап үҫеүсе ожмахҡа инмәҫ. Ул уттан да күберәккә лайыҡлы".**

Әбү Бәкр (радиаллаху анху) еткерә:

**"Тыйылған менән туҡланыусы ожмахҡа инмәй".**

Был ҡағиҙәләр залимдарға, юлбаҫарға, бурҙарға, хыянатсыларға, алдаҡсыларға, үҙенең бурысын ҡайтарырға теләмәүселәргә, һатып алыусыны алдап, кәм үлсәүселәргә, кемдеке икәнлеген белмәйенсә ерҙән юғалған мөлкәтте үҙенә алыусыларға, фактты йәшереп шикле мөлкәтте һатыусыларға, азарт уйын уйнаусыларға, хаҡты күтәргән һатыусыларға ҡағыла.

✓ *Мин Рөстәм Зәки улы Хәмитовҡа яңы типтағы сәйәси эшмәкәр итеп ҡарайым. Уның яңыса эшләй алыуының төп сәбәбе уның ғалим булыуындалыр, тием. Республикабыҙҙа беренсе тапҡыр ғалим президент булды.*

# КЕМ УЛ

## Ул - ойоштороусыларҙы

**Беҙҙең редакцияға килеү йөрөүселәр араһында шундайҙары ла бар: улар алдан хәбәр итмәй-нитмәй, шым ғына килеп инәләр ҙә, ашығыс эшең булһа, ҡамасауламай, әйтергә теләгән һүҙен еткерер мөҙҙәт көтөп, сабыр ғына ултыра бирәләр. Ундайҙарҙы беҙҙең редакцияға үҙҙәре яҙған ниндәйҙер мәҡәләне йә әҙәби әҫәрҙе ашығыс баҫтырып сығарыу ихтыяжы ла йөрөтмәй, улар, асылда, беҙҙең гәзитте уҡып йә тормоштағы башҡа бер фәһемле ваҡиға айҡанлы күңелдәренә тулышҡан хистәре, уй-фекерҙәре менән уртаҡлашырға, үҙебеҙсә әйткәндә, эс бушатырға тип килә редакциябыҙға.**
**"Саҡырылмаған ҡунаҡ - Тәңре ҡунағы", тиҙәр. Шуға күрә беҙ ҙә, эшебеҙҙән айырылып булһа ла, ундай ҡунаҡтарыбыҙға ваҡыт бүлергә тырышабыҙ. Хәҙер инде 8 йыл буйына сыҡҡан "Киске Өфө"нөң ундай штатлы ҡунаҡтары ла барлыҡҡа килде. Улар: танылған иҡтисадсы, ғалим Мазһар Иҫәнбаев, академигыбыҙ Ғайса Хөсәйенов, шағир һәм фән докторы Рәшит Шәкүр, фән докторы Әхмәт Сөләймәнов, ғалим һәм юрист Закирйән Әминев, Өфөнөң "Ҡар кешеһе" Анатолий Легкота, Учалынан фиҙаҡәр шәхесебеҙ Спартак Илъясов, Сибайҙан запастағы подполковник, яҙыусы Хәлил Һөйөндөков, сәсәниә Асия Ғәйнуллина, уҡытыусы Әнүзә Йомағолова һ.б.**
**26 октябрҙә, йәғни Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитовтың үҙ посында эшләй башлауына 100 көн тулғанда, алдан һөйләшеп ҡуйғандай тиерлек, редакциябыҙға өс кеше килеп инде. Улар: филология фәндәре докторы, академик Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ, медицина фәндәре докторы, профессор Мәхмүзә ҒӘЙНУЛЛИНА һәм Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы рәйесе урынбаҫары Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ. Сәй артындағы әңгәмә үҙенән-үҙе башланып, ил-көн, республика, уның президенты Рөстәм Хәмитовтың 100 көн эсендә башҡарғандары, тарих, хәҙерге заман мәсьәләләренә ялғанып китте. Махсус алдан әҙерләнһәң дә, улай килеп сыҡмаҫ…**
**Кеҫәнән диктофонды сығарып, сәй артында әйтелгәндәрҙе яҙып алып, һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итәм. Әңгәмәлә күберәк аҡһаҡалабыҙ Әхмәт Мөхәмәтвәли улы һөйләне, башҡаларыбыҙ иһә ара-тирә уның һүҙенә ҡушылып ултырҙы.**

▸ **Республикабыҙҙы төрлө йылдарҙа етәкләгән шәхестәр һәр ҡайһыһы үҙ заманына күрә уның ҡеүәтен арттырыр өсөн үҙ көсөн һалған. Әйтәйек, Зыя Нуриев менән Миҙхәт Шакиров һуғыштан һуңғы йылдарҙа республикабыҙҙы көслө индустриаль, нефтехимик, ауыл хужалығы төбәге итеүгә өлгәшһә, Мортаза Рәхимов илдең һынылышлы мәлендә республикабыҙҙа тотороҡлоҡто һаҡлап ҡалыу өсөн ҙур көс һалды, тап шул осорҙа Урал тауҙары аша асфальт юл һалынды, меңәрләгән мәҙәниәт һәм мәғариф усаҡтары ҡалҡып сыҡты. Ә бына республикабыҙҙың яңы етәксеһе килгәс, беҙ үҙебеҙҙең тарихыбыҙға, мәҙәниәтебеҙгә һәм сәнғәтебеҙгә, йәшәү рәүешебеҙгә ҡарата интеллектуаль ҡарашты, иғтибарҙы тойомлайбыҙ. Бындай ҡараш республикабыҙҙың тәүге башлыҡтары Әхмәтзәки Вәлидиҙән, Шәһит Хоҙайбирҙиндан алып тойолмағайны…**

**Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ:** Мин был хәлде спортсының оҙон дистанцияға йүгереп килгәненән һуң ниндәйҙер тын яңыртыуы тип тә атар инем. Үҙемдә лә икенсе һулыш алғандай һиҙәм. Президенттың телебеҙ, тарихыбыҙ мәсьәләләренә ҡарата уяу, аҡыллы фекер йөрөтә белеүе оҡшай. Мин бының менән, тәүге президент насар эшләне, тип тә әйтмәйем. Шулай ҙа мин телебеҙ, тарихыбыҙ, мәҙәниәтебеҙ мәсьәләләре буйынса хат, мөрәжәғәт яҙып, тәүге хужабыҙға инә алмай торғайным. Унда ниндәйҙер үтә алмаҫлыҡ кәртәне тоя инем мин. Рөстәм Хәмитов эшләй башлағандан алып гәзиттәрҙәге, Интернеттағы мәҡәләләрен уҡып барам, ә бына тел мәсьәләһе хаҡындағы "Коммерсант" гәзитендәге интервьюһы ныҡ һөйөндөрҙө.

Үкенескә ҡаршы, беҙҙең матбуғат һуңғы ваҡытта ҡайҙалыр Кавказдағы Ҡадыровтың әйткәне буйынса республика башлығы нисек аталырға тейешлеге хаҡында һүҙ ҡуйыртып ебәрҙе. Ҡадыровҡа оҡшай икән, ул үҙен төрлөсә итеп атаһын, әммә беҙгә ул указ түгел. Беҙ, башҡорттар, яуланып алынған илдә йәшәмәйбеҙ, үҙебеҙҙең аҡыллы бабаларыбыҙҙың Иван IV менән килешеүе аша паритет нигеҙендә берләшкәнбеҙ. Ул ваҡытта әле Рәсәй дәүләтселегe ойошмаған була. Беҙ Рәсәй дәүләте менән түгел, Мәскәү дәүләте менән ҡушылғанбыҙ. Тағы бер хата: Иван IV башҡорттарҙың аҫабалыҡ хоҡуғын раҫламаған, ә таныған. Иван IV башҡорттарҙың татар-монгол ғәскәрен үҙ иленә индермәй, көньяҡтан урап үтергә мәжбүр итеүе хаҡында ла белгән, сөнки был факт урыҫ йылъяҙмасылары тарафынан теркәлеп ҡалған. Мин быларҙы ни өсөн һөйләйем? Хәҙер тарихҡа яңыса ҡарарға кәрәк. Әйткәндәй, Президентыбыҙ Рөстәм Хәмитовтың "Өфө-II" ҡаласығына иғтибары һәм уны боронғо Башҡорт ҡалаһы тип таныуы, музей төҙөлә башлауы ла беҙҙең алда күп кенә мөмкинлектәр аса. Беҙгә үҙ тарихыбыҙҙы төптән яңынан барларға кәрәк. Тарих алдында башҡорттоң ҡыҙарыр урыны юҡ. Беҙ бер кемдең дә ерен яулап алмағанбыҙ һәм бер кемдең дә еренендә йәшәмәйбеҙ. Рөстәм Хәмитов үҙенең бер интервьюһында: "Мин Башҡортостан халҡы алдында президент булараҡ ант иткәнмен", тине. Миңә уның был яуабы ныҡ оҡшаны.

**Мәхмүзә ҒӘЙНУЛЛИНА:** Яңы Президентыбыҙҙың эшләй башлауына 100 көн. Мәңгелек кимәленән ҡарағанда, 100 көн бер миҙгел дә түгел, шулай ҙа ниндәйҙер фекер әйтергә кәрәктер, тип улайым. Сөнки яңы етәксебеҙҙең ыңғай башланғыстарын беҙ күтәреп алмаһаҡ, уларҙы тормошҡа ашырыуҙа беҙ ярҙам итмәһәк, хилафлыҡ булыр. Рөстәм Зәки улы минең өсөн һәм мин эшләгән институт өсөн бик тә яҡын кеше. 90-сы йылдарҙың башында ул "йәшелдәр" хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашты. Хәтерләйһегеҙҙер, 1989 йылда Өфө халҡы фенол менән ағыуланды. Фенол менән хлор берләшмәһе диоксинды барлыҡҡа килтерә. Диоксин - донъялағы иң зәһәр ағыуҙарҙың береһе һәм ул зарары буйынса радиоактив нурҙарҙан ҡала икенсе урында тора. Диоксинлы һыу эскәндән һуң кешелә көнөндә генә үҙгәрештәр барлыҡҡа килмәй. Кеше йәшәй-йәшәй организмындағы системалары тарҡала башлай, ниндәйҙер сирҙәр барлыҡҡа килә һәм икенсе-өсөнсө быуында репродуктив һәләтте юҡҡа сығара. Беҙ Рөстәм Хәмитов менән ошо проблемалар өҫтөндә бергәләп эшләнек. Оҙаҡ та тормай, ул Йәшәү рәүешенең хәүефһеҙлеге институтының директоры булып китте. Ул ваҡытта беҙҙең институт Өфө Гигиена һәм профессиональ ауырыуҙар ғилми-тикшеренеү институты тип атала ине. Институттарыбыҙ ҡәрҙәш булғас, хеҙмәт иткән өлкәләребеҙ ҙә ҡәрҙәш булды.

Рөстәм Зәки улы беҙгә Президент булып килгәс, милләтебеҙ өсөн иң "сей" проблемаларҙы күрә һәм уларҙы республика кимәлендә күтәрә белеүе менән күптәрҙә үҙенә ҡарата ихтирам уятып өлгөрҙө. Күпме йылдар Торатауҙы "Сода" берекмәһенә ватырға бирәләр, тигән һүҙҙәр һөйләнде һәм изге тауыбыҙ рәсми кимәлдә яҡлау тапмай килде. "Өфө-II" ҡаласығы, боронғо Башҡорт ҡалаһы тураһында республика, Рәсәй, бөтә донъя кимәлендә күпме дәлилдәр, иҫбатламалар яңғыраны, әммә был да элекке етәкселек тарафынан рәсми рәүештә танылманы. Әгәр ҙә беҙҙәге кеүек боронғо ҡала башҡа урында табылһа, улар күтәрелеп сығып, бар донъяға белгертер ине был фактты. Ә беҙҙә ҡулда булған әллә күпме документ-раҫлауҙарҙы ла танырға теләмәнеләр. Ә Президентыбыҙ Рөстәм Хәмитов ҡаласыҡ урынына тәүге тапҡыр барғанында уҡ унда музей булдырыу, бының өсөн кәрәкле аҡса бүлеү мәсьәләһен хәл итте. Беҙҙең тарихҡа, беҙҙең мәҙәниәткә ҡарата ошондай интеллектуаль ҡараштың бөтөнләй булғаны юҡ ине әле. Башҡорт атының, башҡорт ҡымыҙының, башҡорт бал ҡортоноң һәм башҡорт балының брендтарын булдырыу хаҡындағы тәҡдимдәре генә лә ни тора! Республика етәксеһенең Ирәмәл тауын тәбиғәт ҡомартҡыһы тип иғлан итеү һәм уны һаҡлауҙы ойоштороуға йүнәлтелгән ҡарары ла хәҙерге ваҡытта тапандыға әүерелә барған изге тауыбыҙҙы һаҡлап ҡалыу мөмкинлеге бирәсәк. Был мәсьәләләр унар-иллешәр-йөҙәр йыл хәл итеүҙе көткән мәсьәләләр.

Рөстәм Зәки улы, әлбиттә, буш урынға президент булып килмәне. Республикабыҙ һуңғы егерме йыл эсендә күҙ эйәрмәҫ тиҙлектә үҙгәрештәр кисерҙе. Беҙҙә бөйөк төҙөлөштәр барҙы. Шулай булғас, бында республикабыҙҙың тәүге президенты Мортаза Рәхимовтың хеҙмәте хаҡында ла әйтеп китмәй булмай. Беҙ уға бының өсөн үҙе иҫән-һау сағында рәхмәт һүҙҙәрен дә әйтә белергә тейешбеҙ.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ:** Мин Рөстәм Зәки улы Хәмитовҡа яңы типтағы сәйәси эшмәкәр итеп ҡарайым. Хәҙерге заманса әйткәндә, уның яңы форматта, яңыса эшләй алыуының төп сәбәбе уның ғалим булыуындалыр, тием. Ҡарағыҙ әле, республикабыҙҙа беренсе тапҡыр ғалим президент булды. Ошо фекерҙә генә фәһем алырлыҡ мәғәнә бар. Әлеге ваҡытта Рәсәй кимәлендә лә фән докторының президент булғаны юҡ. Әлбиттә, ғалим булған шәхес үҙенең ил менән идара итеү эшендә ғалимдар ҡулланған ысулдарҙы, сараларҙы һәм формаларҙы ҡулланасаҡ. Һәр бер ғилемдә һәр ваҡыт фундаменталь идеялар һәм ул идеяларҙан килеп сыҡҡан айырым проблемаларҙы хәл итеү юлдары бар. Хәмитовтың сәйәси эшмәкәрлегендә ғалимлығы нисек сағыла һуң? Ул Башҡортостандың төп стратегияһын бер генә һөйләм менән билдәләне: беҙ Башҡортостанды заманса, башҡаларҙың күҙен ҡыҙҙырырлыҡ, инвестициялар йәлеп итерлек, инновациялар булырлыҡ матур, мәҙәниәте, рухиәте үҫешкән илгә әүерелдерергә тейешбеҙ! Һәм быға өлгәшеү өсөн ул хәҙерге демократик сәйәсмәндәргә хас булған сараны һайланы. Саралар ике төрлө: беренсеһе - бүлгелә лә идара ит, икенсеһе - халыҡты тупла, йыйна һәм идара ит. Ул икенсе юлды һайланы һәм етәкселәрҙән тәүге булып башҡорттарҙы бүлгеләүгә ҡаршы сыҡты. Бүлгеләргә маташыусыларҙы енәйәтсе тип атаны хатта. Ул хатта оппозицияның да конструктив фекерен эшкә егеү яғында. Минеңсә, тик ғалим кеше генә бындай фекерҙе әйтә алалыр. Хәмитов теоретик түгел, уның ғәмәли сәйәсәтендәге ғалимлығы Башҡортостандың тарихына, мәҙәниәтебеҙгә, телебеҙгә, ғөмүмән, халҡыбыҙға ҙур ихтирам менән ҡарарға мәжбүр итә. Был мөнәсәбәтен ул үҙе лә белдерә һәм башҡаларға ла асыҡтан-асыҡ еткерә. Ә үҙенең һәр аҙымынан, һүҙенән ғәйеп табырға тырышыусылар тураһында ул "ҡапҡа аҫтынан сәүек эттәр өрөүө", тип бик дөрөҫ әйтте.

**Мәхмүзә ҒӘЙНУЛЛИНА:** Мин Президентҡа 7 биттә 7 позиция буйынса хат ебәрҙем. Фән үҫеше, һаулыҡ һаҡлау системаһы, тәрбиә мәсьәләләре, республикабыҙ телевидениеһы, демография, милли кадрҙар мәсьәләләре хаҡында ул хат. Хатта күтәрелгән мәсьәләләрҙең береһе - үҙем эшләгән медицина өлкәһе. Хәҙерге ваҡытта медицина әхлаҡһыҙ бер өлкәгә әүерелеп бара. Дөрөҫөн әйткәндә, медицина күҙлегенән ауырыу кеше тауарға әүерелде. Һуң, тауар булғас, ул үҙен аҡларға, сифатлы булырға, йәғни һауығырға тейеш тәһә. Бөгөн бигерәк тә ауылда йәшәүселәрҙең һаулығы шул тиклем нығ ҡаҡшаған. Сөнки һаулыҡ һаҡлау учреждениелары уларҙан алыҫлашҡан. Бөгөн хатта 399 кеше йәшәгән ауылдарҙа фельдшер пункттары юҡ. Ни өсөн 399 кеше, тием? Сөнки закон буйынса фельдшер пункты 400-ҙән ашыу кеше йәшәгән ауылдарҙа ғына эшләргә тейеш. Күҙ алдына килтерегеҙ: бер кеше ауырып китте лә, автобус ватылды йә юлды буран ҡаплап китте икән, ти. Был саҡта ашығыс ярҙам талап иткән ауырыуҙар ваҡытында бер укол һалынмаған өсөн генә үлеп китергә тейешме? Кеше бөгөн иң арзан тауарға әүерелде. Парадокс шунда: кеше арзан, ә дарыуҙар ҡиммәт.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ:** Һеҙгә өҫтәп, мин шуны ғына әйтер инем: хәҙерге ваҡытта ауылдарҙа һәм ҡалаларҙа йәшәүсе күптәрҙең интеллектуаль һәм физик потенциалы ҡулланылмай, уларҙың файҙалы эш коэффициенты бик түбән. Бөтә ил буйынса халыҡтың энергетикаһы файҙаланылмай, елгә оса.

**Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ:** Республикабыҙҙа президент алмашынған саҡта күптәр беренсе президентты күп нәмәлә ғәйепләп маташты. Әлбиттә, мәҙәниәт, тел мәсьәләләрендә уның ҡулы етмәгән урындар булды, бар. Илебеҙҙә һәм республикабыҙҙа проблемалар әле лә етерлек. Әйтәйек, 2010 йылды Рәсәй Федерацияһында Уҡытыусылар йылы тип иғлан иттеләр һәм тап ошо йылда меңәрләп уҡытыусылар эшһеҙ ҡалды. Улар эшһеҙ ҡалды, тимәк, уларҙың ғаиләләре лә ас ҡалды, тигән һүҙ. Күпме мәктәптәр ябылды. Беҙҙең республикала ла Мортаза Ғөбәйҙулла улы яңы мәктәп аса килә, артынан уны ябыусылар

**✓ Мәҙрәсәләрҙә, мәсеттәрҙә уҡыу-уҡытыу эштәре татар телендә алып барыла. "Ышаныслы" татарҙан диниә назараты рәйесе тәғәйенләнә. Былар барыһы ла башҡорттарҙың рухын ҡаҡшатыу өсөн махсус рәүештә эшләнә.**

# ПРЕЗИДЕНТ?

## ойошторoусы...



килә ята. Оптималләштереү иң беренсе нәүбәттә башҡорт ауылдарына ҡағыла. Үткән быуаттың 70-се йылдарында "перспективаһыҙ ауылдар" тигән осорҙо үттек һәм оптималләштереү ошо осорҙо тағы ла яманыраҡ итеп ҡабатлау һымаҡ килеп сыҡты. Ҡурған өлкәһенең Сафакүл районында ғына тап ошо арҡала 18 башҡорт ауылы юҡҡа сыҡҡан да инде. Бындай хәлдәр беҙҙең республикала ла ҡабатланыуы ихтимал. Ферма юҡҡа сыҡһа, мәктәп ябылһа, электр сымы ҡырҡылһа, халыҡ ҡайҙа китә инде? Яңы Президентыбыҙ тарафынан был проблемаға ла иғтибар булыр, тигән ышаныстамын.

**▶ Президенттың дәүләт теле булараҡ та, туған тел булараҡ та башҡорт телен уҡытыуға үҙенең аныҡ позицияһы булыуы һөйөндөрә...**

**Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ:** Тел мәсьәләһе беҙҙә гел генә билдәле бер мәл еткәс, йәғни халыҡ иҫәбен алыу осоро етеп килгәндә ҡуҙғый башлай. Тел тураһында белгәне лә, белмәгәне лә һөйләй. Ҡатмарлыҡтар әҙәби тел, һөйләш, диалект төшөнсәләрен бутауҙан ғына килә. Беҙ, тарихи Башҡортостандың һәр дүрт төбәгендә йәшәүселәр, барыбыҙ ҙа башҡортса беләбеҙ, үҙ диалектыбыҙҙа һөйләшәбеҙ. Төньяҡ-көнбайышта йәшәгән башҡорттар ҙа башҡорт телен белә, тик башҡорт әҙәби телен генә белмәй. Бының сәбәптәре тарихта. Екатерина II указы буйынса мәҙрәсәләрҙә, мәсеттәрҙә уҡыу-уҡытыу эштәре татар телендә алып барыла. "Ышаныслы" татарҙан диниә назараты рәйесе тәғәйенләнә, уға ҡаҙнанан жалование тәғәйенләнә. Билдәле булыуынса, былар барыһы ла баш эймәҫ башҡорттарҙың рухын ҡаҡшатыу өсөн махсус рәүештә эшләнә. Һуңынан совет мәктәбенә күскәндә лә ошо традиция дауам ителеп, башҡорт әҙәби теленән алыҫ торған һөйләштәрҙә татар теле автоматик рәүештә уҡытыла. Бының һөҙөмтәһен беҙ әле татыйбыҙ. Д. Зелениндың "Великорусские сказки Пермской губернии" тигән китабында башҡорттарҙың 8 әкиәте бирелгән. Ул әкиәттәрҙең береһе Собханғол тигән шәкерттән яҙып алынған. Собханғол ҡайһы ауылда йәшәгән? Алабуға ауылында, ул хәҙер Татарстандағы ҡала. Китапта: "Субхангул. Башкир. Учится в медресе. Русский язык не знает. Между прочим, пишет стихи на татарском языке (Именно на татарском, так как школа не разрешает писать на башкирском)...", тип яҙылған.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ:** Әхмәт ағай, һеҙ бында айырым һөйләшеү талап иткән мәсьәлә күтәрәһегеҙ. Бында, әлбиттә, башҡорт теленең лексик һәм грамматик күп төрлөлөгө тураһында ла һүҙ алып барырға булыр ине.

**Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ:** Тағы ла ҡабатлап әйтәм: халыҡ иҫәбен алыу ваҡыты килеп етһә, беҙ һәр ваҡыт "тел" тигән тырмаға баҫабыҙ. Телселәрҙең һәлкәүлеге арҡаһында беҙ үҙебеҙҙең бик күп милләттәштәребеҙҙе юғалттыҡ. Ә мәктәптә телгә һөйөү тәрбиәләү урынына, уҡыусыларға ҡағиҙә ятлатабыҙ. Вәкил Хажиндың әйтеүе буйынса, башҡорт мәктәбендә уҡыусылар иң ауыр фән тип башҡорт телен атай икән. Мин уларҙы төҙәтеп әйтер инем: башҡорт теле түгел, ә башҡорт теле грамматикаһы. Авторы хет ун тапҡыр классик булһын, унан йолҡоп алынған һөйләм менең рухыма ла, зиһенемә лә бер нәмә өҫтәмәй. Минеңсә, грамматика китабы белешмә өсөн генә өҫтәлдең ситендә ятырға, ә балалар ижади эшләргә тейеш. Хәҙерге ваҡытта баланың интеллектуаль яҡтан үҫеүенә иң ныҡ ҡамасау иткәне - мәктәп. Беҙҙең этник фекерләү үҙенсәлеген иҫәпкә алмайынса, йәһүд туғандарҙың методикаһын беҙгә тәҡдим итәләр. XX быуаттың 20-се йылдарында Америкала урындағы төп ҡәүем -индеецтарҙы нисек итеп цивилизациялы халыҡтар кимәленә күтәрергә, тигән проблема өҫтөндә эшләйҙәр. Социологтар, психологтар, педагогтар шундай һығымтаға килә: баҡтиһәң, индеецтар бөтөнләй икенсе төрлө фекерләй икән. Европанан килгән халыҡ рациональ, йәғни логик фекерләй, ә урындағы халыҡ образлы фекер йөрөтә. Беҙ ҙә шулай фекерләйбеҙ. Йырҙарыбыҙҙың тәүге юлында тәбиғәт тураһында һүҙ бара ла, ҡалған өлөшөндә тормошҡа бәйле фекер әйтелә. Урыҫ һәм башҡа көнбайыш халыҡтары әкиәттәре "В некоторым царстве, в некоторым государстве...", тип башланһа, беҙҙең әкиәттәр "Борон-борон заманда...", тип башлана. Урыҫтар арауыҡ (пространство) буйынса, беҙ ваҡыт киңлеге буйынса фекер йөрөтәбеҙ. Һуғыш тигән афәттең килеп сығыуы арауыҡ буйынса буйынса фекер йөрөтөүгә бәйләнмәгән микән әле? Киңлек буйынса фекер йөрөтөүселәр яғынан, йәғни көнбайыштан. Ҡыҫҡаһы, беҙҙең этник фекерләү тибы башҡаларҙыҡынан ныҡ айырыла, шуға күрә беҙгә бөтөнләй икенсе типтағы уҡыу программалары кәрәк.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ:** Башҡорт милләтен һаҡлау беҙҙең дәүләттең, республиканың иң төп бурысы булырға тейеш тә. Хәҙерге заман конструктив идеялар, конструктив тәҡдимдәр заманы. Минеңсә, ундай идеялар һәм тәҡдимдәр ойоштороу мәсьәләләренә арналырға тейешле. Коммунистар урыҫ демократтары һымаҡ "Кем ғәйепле?", "Нимә эшләргә?" тип кенә ятмаған, ә нисек итеп яңыса ойоштороу юлдары менән илдең ҡеүәтен арттырырға, тигән маҡсат ҡуйып эш иткән. Ойоштороусылар бөтөн эштәрен, ғаиләләрен, ҡалаларҙағы уңайлыҡтарҙы ташлап, ауылдарға, тайгаларға, далаларға китә. Мәҫәлән, Ҡытайҙың күтәрелеүе лә ойоштороу моментының үҙгәреүенән башлана. Бөгөн беҙҙең ауылдарҙа шундай ойоштороу көстәре бармы һуң? Ауыл хакимиәттәре юҡҡа иҫәп, ә район хакимиәттәре отчет яҙа. Минеңсә, республикабыҙҙың яңы етәксеһе, шундай ойошторoусыларҙы ойошторoусы булып торорға тейештер ҙә.

**▶ Президент булыуына 100 көн тулыу уңайы менән ике сәғәт буйы журналистарҙың һорауҙарына яуап биргәнендә Рөстәм Зәки улы республикабыҙҙы торған ер тип кенә түгел, ә Тыуған илем, Ватаным тип белгән һәр кем кинәнеп хупларлыҡ һүҙҙәр әйтте. Әммә шуныһы: ҡайһы берәүҙәр яңы Президентты тәғәйенләгән ваҡыттағы һағайыу, ышанмау тойғоһонан барыбер арынып бөтә алмай әле һәм Рөстәм Хәмитовтың был сығышын "Ул һүҙ генә бит..." тип баһалауҙы дауам итә...**

**Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ.** Быны ла аңларға була. Сөнки ундай ҡараш кешенең үтә скептик булыуынан ғына килмәй. Уның сәбәбе тәрәнерәк. Мәғлүмдер ки. Никита Хрущев егерме йыл эсендә коммунизм төҙөй һалабыҙ, тип, ниндәй генә волюнтаристик реформалар яһап ҡараманы - бары ҡоронан ағыҙғандай ғына итте. Леонид Брежнев - үҫешкән социализм, Михаил Горбачев - әҙәми йөҙлө социализм, Борис Ельцин федерация хасил итеүсе субъекттарға улар "йота алған тиклем суверенитет", реформа, демократия вәғәҙә итте. Тәүгеһе торғонлоҡта йөҙҙөрҙө, икенселәре, АҠШ белгестәре әҙерләгән "Гарвард проекты"на ярашлы эш итеп, "перестройка", "реформа" тигән оран шауы аҫтында, асылда, Берлин стенаһын ғына түгел, социалистик лагерҙы, Варшава договорын, КПСС-ты, СССР-ҙы юҡ итеүгә өлгәште, капиталистик мөнәсәбәттәрҙе тергеҙеүгә, киң мәғәнәлә "культура - потом", тип, мәғариф, мәҙәниәт, медицина, фән һәм, ғөмүмән, бюджет өлкәһендә, аграр системала эшләүселәрҙе фәҡир байғоштар хәленә төшөрөүгә иреште, олигархтарға, коррупцияға киң юл асты. Минең уйлауымса, власть башына килгән һәр кемдең вәғәҙәләре, изге ниәттәре уларға бына шул сәбәптән скептиктарса ҡараш уята ла инде. Ошо хаҡта уйланып, халҡыбыҙҙың бөйөк шағиры Мостай Кәрим әле 1963 йылда уҡ:

Вәғәҙәләр бирмә. Үттек инде
Еңел-елпе йәшәр осорҙо.
Иренмәйек, дуҫым: "Һап!"-тиәйек,
Һикереп сыҡҡас ҡына соҡорҙо! -

тип яҙғайны бит инде.

Скептиктар яңылышһын өсөн, республиканың яңы етәксеһе янында, уға фекерҙәш, ысын таяныс булырҙай, ышаныслылығы, тоғролоғо һүҙҙә түгел, ғәмәлдә иҫбатланған ярҙамсылар булыуы шарт. Бының өсөн ышаныслылыҡ, тоғролоҡ, эшсәнлек, әүҙемлек кеүек сифаттарҙың барыһын да берләштергән, шуларҙы аныҡ билдәләрлек коэффициентмы, тест формаһымы, һәр хәлдә, ниндәйҙер бер үлсәм ҡулланыу фарыз. Икенсе төрлө әйткәндә, кадрҙарҙы һайлауҙа, урынлаштырыуҙа шәхси тоғролоҡ, яҡташлыҡ, танышлыҡ, ағай-энелек, этник сығыш "үлсәме"нә нигеҙләнеп түгел, алға киткән демократик илдәр тәжрибәһенә таянып, фәнни, ғәмәли яҡтан нигеҙләнгән яңы принциптар менән эш итеү зарур. Ҡыҫҡаһы, әлеге лә баяғы яманатлы Сталиндың ҡасандыр: "Барыһын да кадрҙар хәл итә", - тигәне әле лә актуаль. Тик уға "... шул иҫәптән кадрҙарҙы һайлауҙы ла, урынлаштырыуҙы ла" тигән ҡушымта ғына өҫтәге килә.

Ә шулай ҙа үҙ ғүмеремдә миңә республикабыҙҙың берәй етәксеһенең башҡорт теленең яҙмышы хаҡында борсолғанын, һәр хәлдә, был хаҡта бар донъя ишетерлек итеп әйткәнен иҫләмәйем. Президентыбыҙ Рөстәм Зәки улының башҡорт телен яҡлап әйткән һүҙҙәре өсөн бары : "Афарин! Рәхмәт!" - тип кенә әйтке килә. Шулай тип әйтәм дә, "Ахти!" тип ҡуям, тәрән үкенес менән. Ни өсөн? Сөнки бындай һүҙҙәр бынан кәмендә бер-ике йыл элек әйтелһә, бәлки, Президентыбыҙ: "Бөгөн донъяла ике миллион самаһы башҡорт бар", - тип кенә түгел, ауыҙ тултырып: "Ике миллион башҡорт бар!"- тип әйтер ине. Әммә беҙ һаман да ҡасандыр, бары Эйек-Юшатыр һөйләшенә генә нигеҙләнеп, филология өлкәһендә махсус белеме һәм әҙерлеге булмаған кешеләрҙән торған һәм тик мәғариф халыҡ комиссариатының коллегияһы ғына ҡабул иткән әҙәби тел нормаларын, төньяҡ, төньяҡ-көнбайыш, төньяҡ-көнсығыш аҫаба башҡорттарҙың һөйләш үҙенсәлектәрен дә иҫәпкә алып, камиллаштыра бармауыбыҙ арҡаһында, йәниҫәп ваҡытында бик күп ҡәрҙәштәребеҙҙе юғалта торабыҙ. Ни өсөн тигәндә, әлегәсә камил булмаған әҙәби телебеҙҙең шул нормаларын белмәүселәр үҙҙәрен бүтән милләт вәкиле тип белә. 2002 йылғаса үткәрелгән йәниҫәп кампаниялары ваҡытында милләтте туған тел буйынса билдәләү ҙә халыҡты шуға күнектерҙе. Ә быйылғы йәниҫәп ваҡытында байтаҡ башҡорт һәм татарҙың (һәр хәлдә, Өфөлә) икенсе милләт телен туған тел йәки әсә теле тип иҫәпләүе мәғлүм. Ҡыҫҡаһы, башҡорт әҙәби тел нормаларын камиллаштырыу хаҡында хәбәр һөйләүҙән, айырым авторҙарҙың был мәсьәләгә матбуғатта ыңғай йә кире субъектив ҡараштарын белдереп, сығыш яһауҙарынан (ә бындай сығыштар, сираттағы йәниҫәп кампанияһы алдынан ҡыҙып китеүсән) уны дәүләт кимәлендә хәл итеүгә күсергә ваҡыт. Президентыбыҙҙың башҡорт телен яҡлап әйткәне был хаҡта етди уйланырға һәм ғәмәли эшкә тотонорға форсат бирә. Юҡһа, һаман да был мәсьәлә тап йәниҫәп алған һайын абына торған, дөрөҫөрәге, һабы менән маңлайға шарт иттерә торған иҫке тырма булып ҡала бирәсәк...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Эйе, халыҡта "Айһыҙ атың маҡтама, йылһыҙ ҡатын маҡтама", тигән бик тапҡыр һүҙҙәр бар. Шуға күрә лә беҙ был әңгәмәлә яңы Президенттың 100 көнлөк хеҙмәтенә баһа биреүҙән бигерәк, илебеҙ, республикабыҙ һәм милләтебеҙ алдында торған проблемаларҙы атап үтеүгә күберәк иғтибар бирергә тырыштыҡ. Улар ниндәйҙер кимәлдә республикабыҙҙың яңы етәксеһенә наказдар рәүешендә лә яңғырай. Хәйер, был проблемаларҙы Рөстәм Зәки улы күптән беләләр ҙә, тигән өмөттәбеҙ.**



**Әңгәмәне Әхмәр ҮТӘБАЙ яҙып алды.**

***✓ Прокуратура үҙ эшен эшләне, бер йыл эсендә йәш һалдаттарҙы йәберләгән ете оло һалдат дисбатҡа оҙатылды. Әммә уның үҙен һәм дивизия командирын "түбәнәйттеләр". Ҡанаттарын ҡайырҙылар, ҡулдарын бәйләнеләр…***




Көтмәгәндә Абдуловты икенсе полкка күсерҙеләр. Үҙенең етешһеҙлектәре, ҡытыршылыҡтары менән был полктың казармаһы әкренләп уның күнеккән төйәгенә әйләнеп барған мәлдә генә. Полкташтарының күптәре менән дуҫлашып та алғайны. "Бабайҙар", әлбиттә, инде уны бимазаламаһалар ҙа, һаман да ҡырын ҡарай. Хәйер, уларҙың йылмайып ҡарауына мохтаж да түгел Тәфтизән. Яҡташы Илһамды ла башҡаса ҡыйырһытҡандары юҡ. Ә бына икенсе полкка күсереүҙәренең сәбәбен генә белмәй ине. Ошо мәсьәлә буйынса замполитҡа мөрәжәғәт итмәксе булды. Подполковник Тәфтизәнде тыңлап бөткәс, бер аҙ уфтанған һымаҡ итте лә өҫтәлендәге ҡаптан сигарет алып ҡабыҙҙы.

- Ә һин үҙең нисек уйлайһың? Ни өсөн һине башҡа часҡа күсереүҙәре мөмкин?

- Бер нисек тә, - тине Абдулов, бер аҙ икеләнгән һымағыраҡ. - Берәй эш боҙғанмынмы әллә?..

Замполит тәмәкеһен һурып, тәрән итеп тын алды ла, алдында торған көл һауытына төпсөгөн ҡаға-ҡаға:

- Абдулов, полктағы оло һалдаттар менән мөнәсәбәтең нисек? - тип һорап ҡуйҙы.

"Бына ҡайҙан ел иҫә икән. Задконың танауын ул һындырған икәнде белеп ҡалдылармы әллә..." Тәфтизәндең тәндәре эҫеле-һыуыҡлы булып китте, быуындары бушағандай итте.

- Нормально, - тигән булды һалдат шулай ҙа.

Замполит хәйләле йылмайып, урынынан торҙо ла, ҡулдарын салбар кеҫәһенә тығып, кабинет буйлап унда-бында үткеләне.

- Нормально, тиһең инде...

- Так точно! - тип ҡабат нығытты һалдат үҙенең әйткәнен.

- Эх, һалдат, нормально түгел шул, - тине замполит, уның тураһында бик күп мәғлүмәт белгәндәй. - Өлкән һалдаттар һине бик ҡыйырһыталар имеш, тигән хәбәр йөрөй, шул дөрөҫмө?

- Мине бер кем дә ҡыйырһытмай, - тине һалдат. - Кем һеҙгә улай тине? - Һалдат үҙе лә һиҙмәҫтән, начальник менән бәхәскә инде.

- Беҙ барыһын да беләбеҙ, Абдулов. Карантинда булған хәлдәр ҙә беҙгә мәғлүм...

Ул үткән ваҡиғалар тураһында мәғлүмәт командованиеға ниндәйерәк хәлдә барып еткәне Тәфтизән өсөн сер булып ҡалды. Һәр хәлдә, уны ысынлап та ҡыйырһыталар, имеш, тип ниндәйҙер "яҡшылыҡ теләүсе" уларға еткергән булырға тейеш.

- Так что, һалдат, тыңла мине. Яңы полкка барғас та конфликтҡа инергә тырышма, бигерәк тә оло һалдаттар менән. Хәтереңдә тот: баш менән таш ярып булмай. Аҡ ҡарғаны ҡара ҡарғалар яратмай. Һалдат булып хеҙмәт иткән кеше булараҡ, быны бик яҡшы беләм.

Һаман да шул "аҡ ҡарға"... Йәш һалдаттарҙы йәберһетеүгә юл ҡуймаҫҡа берәй ысул уйлап таба алмайҙармы икән... "Иптәш подполковник, ҡасандыр һеҙ ҙә дембелдең сылғауын йыуып йөрөнөгөҙмө?" - тип һорарға ине лә бит, тик замполит бындай һорауҙы дөрөҫ аңламауы мөмкин...

- Мине башҡа частҡа күсереүегеҙҙе һорағаным юҡ та...

- Ә бына быныһын командование үҙе белә...

- Мин икенсе полкка күсергә теләмәйем, иптәш подполковник.

- Дивизия командирының әмерен үҙгәртә алмайым, иптәш Абдулов. Хуш булығыҙ, - тине замполит етди төҫ алып...

* * *

...Кабинетынан рядовой Абдулов сығып киткәс, подполковник Сафронов тағы тәмәкеһен алып ҡабыҙҙы. Һалдатты үҙ иркенән тыш башҡа частҡа күсереп, дөрөҫ эшләнеме икән улар?.. Ә бит ысынында иһә был һалдат казармала йылдан-йыл тамыр йәйә барған бик әшәке ғөрөф-ғәҙәткә ҡаршы яңғыҙы яуға сыҡҡан. Япа-яңғыҙы...

Офицер күрмәгән саҡта һалдат коллективында ҡылынған хулиганлыҡ менән нисек кенә көрәшеп ҡарамайҙар, ләкин яман шеш кеүек үҫешкән "бабайлыҡ" сирен һис кенә лә алып ташлап булмай, ул ауырыу быуындан-быуынға күсә... Часть буйынса дежурныйҙан тыш, уставта ҡаралмаһа ла, яуаплы офицер ҙа ҡуйып ҡаранылар. Йәш һалдаттарҙы һис юҡҡа йәберһетеп йөрөгәндәре өсөн хулиганлыҡ ҡылған һалдаттарҙы хәрби трибунал суды аша хөкөмгә лә тарттырҙылар. Тик һөҙөмтәлә командир менән замполитты "һалдаттар араһында бушаҡ тәрбиә эше өсөн" тип дәрәжәһен түбәнәйтәләр... Шулай булғас, әлбиттә, һәр командир үҙенең өйөндәге сүп-сарҙы ситкә сығармай, йәшереп алып ҡалырға тырышасаҡ...

Әсенеп уйланған Сафронов яңы сигарет алып ҡабыҙҙы.

...Офицерҙарҙы йоҡларға һалдат казармаһына ғына күсерергә ҡала түгелме һуң?.. Офицер дәрәжәһен шул тиклем үк төшөрөп ташлаһаҡ, армиябыҙҙа кем офицер булып, үҙ ғүмерен армияға бағышларға теләр икән... Хулиганлыҡ ҡылған оло һалдаттар менән асыҡтан-асыҡ һөйләшеүҙәр ҙә файҙаһыҙ. Һөҙөмтәлә йәберһетелгән һалдатҡа уларҙан икенсе тапҡыр ошаҡлашҡан өсөн дә эләгә. Үҙе лә ҡасандыр һалдат хеҙмәтен татыған, унан үҙ ғүмерен армияға, һалдаттарҙы тәрбиәләү эшенә бағышлаған Сафроновтың уйҙарының осо-ҡырыйы күренмәне. Был ракета полкына ул ике йыл элек кенә замполит итеп тәғәйенләнде. Бынан алда биләп торған урыны юғарыраҡ - дивизия кимәлендә, ә хәрби званиеһы - полковник ине. Түбәнәйтелеп килде ул ошо урынға. Тик ни өсөн? Үҙенең тәртипһеҙлеге өсөнмө? Ғүмеренең күп өлөшөн армияға бағышлап, йәне-тәне менән бирелеп, Тыуған иленә тырышып хеҙмәт итеп йөрөп тә, ниндәй насар эш ҡылды әле ул? Ә бына ниндәй эш ҡылды ул: үҙ дивизияһындағы "бабайлыҡ" осраҡтарының береһен дә йәшермәйенсә, прокуратураға яҙып бирҙе. "Бабайлыҡ"ты хирург юлы менән үҙ дивизияһынан алып ташламаҡ булғайны. Прокуратура үҙ эшен, әлбиттә, эшләне, бер йыл эсендә йәш һалдаттарҙы йәберләгән ете оло һалдат дисбатҡа оҙатылды. Әммә уның үҙен һәм дивизия командирын "түбәнәйттеләр". Ҡанаттарын ҡайырҙылар, ҡулдарын бәйләнеләр... Хәйер, уның тырышлығы бушҡа китмәне: ул хеҙмәт итеп киткән дивизия хәҙер уставса йәшәү буйынса иң өлгөлөләр рәтенә ингән. Унда хәҙер бөтөнләйгә "бабайлыҡ" күренеше юҡ, тиҙәр.

Оло һалдаттарға баш эйергә теләмәгән башбаштаҡ Абдулов Сафроновта ниндәйҙер хөрмәт тойғоһо уятты. Бар йәш һалдаттар ҙа шулай ҡыйыу булһа икән, тигән уй килде уның башына. Абдуловты башҡа частҡа күсереүгә лә теше-тырнағы менән ҡаршы булғайны ла, ләкин уның һүҙенә ҡолаҡ һалыусы булманы. Казармала кем ни менән шөғөлләнгәнен штаттан тыш булған "хәбәрселәр" аша белеп торған, һалдат яҙмышына битараф булмаған подполковникка, ысынлап та, уйланырлыҡ етди сәбәптәр бар ине. Хәҙер икенсе полкка киткән йәш һалдатты ни көтә - бер Алла үҙе генә белә инде. Икенсе полк, тигәс тә, ул ер сигендә түгел, ә күрше казармала ғына. Тик коллектив ҡына башҡа, ә һөҙөмтәлә - шул уҡ һалдат коллективы. Һалдаттар араһында, ғәҙәттә, һәр хәбәр йәшен тиҙлегендә таралыусан. Ул барасаҡ полк һалдаттары - йәштәре һәм ололары, моғайын, Абдулов хаҡында хәбәрҙарҙыр...

* * *

Икенсе полкта Тәфтизәнде яңы старшина ҡаршы алды. Әйберҙәрен һанап, опись буйынса ҡабул итте. Казармала тағы ла уға икенсе ярустағы карауат эләкте. Ә иң ҡыҙығы - уларҙың күрше взводының отделение командиры теге "шпингалет" - сержант Колупаев... Полкка килер алдынан ғына кеҫәһендәге сәғәтен ҡулына яңынан тағып алған Тәфтизән был сержантты күреү менән мунса янында булған яҙғы ваҡиғаны хәтерләне...

Теге оҙон Васильев та ошо полкта икән. Тағы ла бер аҙ оҙонайып, нәҙегәйеп ҡалған һымаҡ. Ул меҫкенде оло һалдаттар ғына түгел, ә ярты йыл хеҙмәт иткәндәр ҙә ҡыйырһытҡаны һиҙелә. Бөтөнләйгә һындырғандар меҫкенде. Әле Тәфтизән килгән тәүге көндө үк ярты призывҡа ғына өлкәнерәк бер һалдат: "Эй, Васильев, тәмәке табып алып кил, ҡайҙан булһа ла", - тип әйтеү менән тегеһе "Хәҙер", тип йүгереп китә һалып барғанын күрҙе. Уның йомошон үтәп бөтөүгә, икенсеһе уны карауатында ятҡан көйө үҙенә эсергә һыу алып килергә йыуыныу бүлмәһенә ебәрҙе. Ә йоҡлар алдынан көнкүреш бүлмәһендә ул тырыша-тырыша бейек үксәле кескәй генә "таныш" итектәрҙе таҙарта ине.

Отбойҙан һуң Тәфтизән бер талай йоҡоға китә алмай аҙапланды. Олатаһы һөйләгән элекке әрме хәлдәрен иҫләне. Һуғыш мәлендәге оло һалдаттарҙың йәштәргә булған мөнәсәбәтенә көнләшеп ҡараны. Кешеләр бер-береһе менән татыу йәшәһен өсөн уртаҡ дошмандың булыуы - һуғыш булыуы мотлаҡмы икән? Шул көйө генә, һуғышһыҙ ғына татыу йәшәргә лә бит. Әле уның был ят частҡа күсеүе лә шул арҡала. Хәҙер ул ни өсөндөр элекке полкын һағынды. Хатта танауы һынып, бер аҙ ҡыйшая биреп уңалған әлеге ефрейтор Задко ла ниməһе менәндер уға яҡын һымаҡ тойолдо. Ул барҙа яҡташы Илһамға ла һуңғы ваҡытта әллә ни ҡырын һүҙ әйтеүселәр юҡ ине. Хәйер, казарма әллә ҡайҙа түгел, яҡында ғына. Мөмкинселек табып, күрешеп торорҙар әле...

Төн уртаһында уны рота буйынса дневальный уятты:

- Абдулов, һине саҡырталар, - тине ул шым ғына. - Бытовкаға...

...Тәфтизәнде айыуҙай өс бәһлеүән ҡаршы алды, ә сержант Колупаев быларҙың эшенә ҡыҫылмағандай, ниндәйҙер көй һыҙғырғылап, тәҙрә төбөндә ултыра.

- Сәғәт нисә икән? - тип һүҙ башланы өсәүҙең береһе һөҙә ҡарап.

Тәфтизән ҡулындағы сәғәтенә ҡараны.

- Төнгө беренсе ярты, - тине.

-Йә, таныш булайыҡ, - тип, икенсеһе, башҡаларына ҡарағанда олпатыраҡ кәүҙәлеһе, бер аҙ йылмайғандай итеп, Тәфтизәнгә ҡулын һуҙҙы. Йылмайып торғас, ысынлап та кешеләрсә танышырға итәлер, тип уйланы һалдат. Тәфтизән уға ҡул бирҙе. Ләкин, уңдараҡ торған өсөнсөһө, аңғармаҫтан, бар көсөнә йәш һалдаттың эсенә төрттө. Егет ике ҡуллап эсен тотоп, бөгөлөп төштө. "Колупаев... Тик уның ғына эше. Шулай ҙа яңғыҙы һөжүм итергә шикләнгән..." Шулай тип уйлап өлгөргән, инде күп тапҡыр "бабай"ҙарҙың туҡмау ысулдарын татып ҡараған һалдаттың оҙаҡ уйланырға ваҡыты юҡ ине. Был юлы типкесләнеп ятырға бер ҙә иҫәбе булманы. Киҫекмәҫтән һөжүмгә күсергә кәрәк. Тик төп ударҙың йүнәлешен генә дөрөҫ һайлап алырға. Бер-ике секундта шул уйҙар башына килде. Һәм ул һайланы: төп удар объекты тәҙрә төбөндә йәш һалдатты нисек типкеләгәндәрен тамаша итергә йыйынып ултырған Колупаев булырға тейеш! Уны дөмбәҫләргә йыйынған өсәү хатта бер ни эшләп тә өлгөрмәне, Тәфтизән сүгеп ултырған еренән йәшен тиҙлеге менән һикереп торҙо ла, әле бер ни ҙә аңғарып өлгөрмәгән Колупаевҡа ташланды. Бер һикереүҙә барып етеп, бар көсө менән уның яңағына тондорҙо... Хатта "ыһ" та итеп өлгөрә алмаған сержант, тәҙрә өлгөһөн рамы-ниһе менән этәреп, икенсе ҡаттан тышҡа осто...

Теге өсәүҙең ҡайғыһы хәҙер йәш һалдатта түгел ине. Өсөһө лә йүгереп барып, көҙгө һалҡын, саф һауа өрөп торған тәҙрәнән тышҡа баҡты. Унан, һаман да Тәфтизәнгә иғтибар итмәй, йүгереп сығып киттеләр. "Хәҙер бөттө баш, дисбатты ситләтеп китеп булмаҫ", тип уйлап өлгөргән Тәфтизән бер аҙҙан ауыҙ-мороно ҡанға буялған, ярым тере Колупаевты казармаға күтәреп алып инеп килгән теге өс һалдатты күрҙе.

- Дневальный, срочно госпиталдән "Ашығыс ярҙам" саҡырт! - тип бойорҙо береһе, һәм шунда уҡ шым ғына: - Яңылыш йығылып төштө, тиеп әйтерһең, - тине...

"Ашығыс ярҙам" бик тиҙ килеп етте. Һүгенә-һүгенә ниҙер мығырланған Колупаевты носилкаға һалып алып сығып киттеләр.

Шул арала килеп еткән часть буйынса дежурный, йәш кенә лейтенант, ротаны теҙеп ҡуйырға ҡушты. Бер-ике минут үтеүгә, бар рота трусик һәм итектәрен генә кейгән килеш казарманың оҙон коридорында ике рәт булып теҙелеп торҙо. Полктың, батальондың, ротаның командирҙарын һәм замполиттарын өйҙәренән ашығыс рәүештә саҡырттылар. Армияла шундай тәртип, күрәһең. Ун-ун биш минуттан инде бөтә полк аяғөҫтө ине.

Командирҙарҙың күпме генә төпсөнөп һорашыуына ҡарамаҫтан, Колупаевтың нисек йығылып төшкәнен күреүсе булманы. "Тәҙрә төбөндә тәмәке тартып ултыра ине ул, - тине дневальныйҙарҙың береһе. - Йығылыш йығылып төшкәндер..."

Шунан башҡа яуап ала алмаған командирҙар, ни өсөндөр, еңел һулап ҡуйғандай тойолдо. Армияла әҙме-күпме хеҙмәт иткән һәммәһе аңлап тора: командирҙың иң ҡурҡҡан нәмәһе - "неуставщина". Яңылыш үҙе йығылған һалдат өсөн яуап биреү күпкә еңелерәк улар өсөн. Шулай ҙа полк замполиты, әллә үҙен-үҙе тынысландырыу өсөн, дөйөм һорау бирҙе:

- Бәлки, берәйһе Колупаевҡа йығылырға ярҙам иткәндер?

- Ул "бабай"ға кем тейһен, - тине кемдер арала.

- Уныһы ла дөрөҫ, - тигән булды замполит, серле йылмайып.

Эштең ниҙә икәнлеген, моғайын, һиҙенәләр инде был күпте күргән ағай, тик әллә ни соҡсонғоһо ла килмәгән һымаҡ. Шулай тип уйлап торған Тәфтизән "Мин һуҡтым уға", тип әйтергә бер-ике тапҡыр уҡталып та ҡуйғайны, шулай ҙа әлегә өндәшмәҫкә булды.

Офицерҙар өйҙәренә таралышып, казармала яңынан тынлыҡ урынлашҡас, теге өс "баһадир"ҙың береһе килеп, йоҡлай алмай ятҡан Тәфтизәндең ҡолағына шыбырҙаны: "Был хәл тураһында бер кемгә лә ыҫҡындыраһы булма, дисбатҡа элэгәһең килмәһә!"

Бәхеткә ҡаршы, Колупаев "күлдәктә тыуған" булып сыҡты, ике аҙнанан уны госпиталдән сығарҙылар. Тәфтизән тағып йөрөгән сәғәткә ҡыҙығыу теләге ҡыуаҡлыҡ араһында һелкенеп төшөп ҡалды, ахрыһы... Был полкта уға башҡаса хатта ҡырын һүҙ әйтеүсе лә булманы. Ә теге өс "әкиәт батыры" хатта уның менән дуҫлашып та алған кеүек булып киттеләр. Көн дә ҡул биреп күрешәләр, әйтерһең, Тәфтизән уларға ниндәйҙер бер ҙур яҡшылыҡ ҡылған...

Көндәрҙән бер көндө, әлеге бытовка бүлмәһендә Тәфтизән Әмиләһенә хат яҙып бөттө лә, икенсе буш биткә бик матур итеп һүрәт төшөрөп ҡуйҙы.

- Абдулов, минә һинең менән һөйләшеп алырға кәрәк, - тигән тауышҡа артына әйләнде. Уның ярыны аша ҡарап, әлеге үҙе бер ҡарыш Колупаев тора ине. Һөйгән ҡыҙын ҡосоп торған һалдат һүрәтен хаты менән бергә конвертҡа бөкләп һалды ла, Тәфтизән:

- Тағы ла һуғышабыҙмы? - тине тегегә ярым шаяртып.

Был юлы Колупаевтың йөҙөндә төүге тапҡыр үҙенә ҡарата ихтирам саткыларын шәйләне Тәфтизән.

- Минә бер-ике айҙан дембелгә ҡайтырға, - тине сержант дуҫтарса һөйләшергә тырышып. - Беҙҙең арала булған аңлашылмауҫанлыҡты бөткән, тип иҫәплөйек. Һине һүрәт төшөрөргә бик оҫта, тип һөйләгәндәрен ишеткәйнем, әле яңылыш ҡына уҙ күҙҙәрем менән күрҙем. Минә "дембель" альбомы яһарға ярҙам итмәҫһеңме?

- Кешеләрсә мөрәжәғәт иткән кешегә нишләп ярҙам итмәҫкә, - тине Тәфтизән. - Тик ваҡыт табып булһа...

- Ваҡыт табырбыҙ, - тине сержант...

**(Дауамы бар).**

*АФАРИН!*

# МИЛЛӘТЕБЕҘҘЕҢ РУХ ЯҢҒЫРАШЫ -

## сихри ҡурайыбыҙ моңо

**Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына һәм Республика көнөнә арнап үткәрелгән Ҡурай байрамы ысын мәғәнәһендәге моң, рух һәм гәм байрамына әүерелде, тиһәк, һис тә яңылышмабыҙ. Был байрам айҡанлы бер юлы бер нисә сара ойошторолоуы һис тә юҡҡа түгел, киреһенсә, уларҙың йәнәш килеүе байрамды тулы ҡанлы, бер бөтөн итте. Ул саралар: Башҡортостан ҡурайсылар союзы съезы, ҡурай уйнау буйынса оҫталыҡ кластары, башҡорт милли музыка ҡоралдары һатыу һәм "Һыҙҙырт, ҡурай!" концерт программаһы.**



### "Йөрәк ихтилалы"

Байрамдың кульминация нөктәһе, әлбиттә, "Һыҙҙырт, ҡурай!" концерт программаһы булды. Филармонияның ҙур залына эркелеп килеүсе тамашасының рух балҡышына, күңел һулҡыуына, зиһен зыңына, йөрәк тантанаһына әүерелде был концерт. Концертҡа башҡорттар ғына килмәгәйне. Татарҙар ҙа, урыҫтар ҙа, сыуаштар ҙа... Тәржемәһеҙ ҙә аңлашылған моңоҙо уларҙың барыһы тарафынан да өнһөҙ генә, күҙ йәше аша ҡабул ителде. Көй ыңғайына йырлап ебәрмәй, бейергә төшмәй көскә түҙеп ултырылды, малай. Хәйер, бындай тойғо кисергәндәр күп булғандыр, моғайын.

Сығыш яһаусылар араһында ҡурай буйынса малайҙарҙан башлап оло йәштәге аҡһаҡалдарыбыҙ ҙа бар. Бында мин "теге ҡурайсы былайыраҡ уйнаны, быныһы былайыраҡ", тип сығыш яһаусыларҙың исемдәрен һанап сығыуҙы маҡсат итеп ҡуймайым. Шулай ҙа концерт программаһының иң юғары нөктәһе булған Роберт Юлдашевтың сығышына туҡтамайса булдыра алмайым.

Роберттың үҙе төҙөгән "Ҡурайсы" төркөмө менән "Сыңрау торна" көйөн башҡарыуын мин бер һүҙ менән "Йөрәк ихтилалы" тип атар инем. Бында ҡурайҙың һуҡма музыка ҡоралдары менән бер ҡатар яңғырашы фәҡәт ошо көйҙең йөкмәткеһен тағы ла тәрәндәнерәк асып бирә. Ошо фонда халҡыбыҙҙың шанлы-данлы тотош тарихы һынландырыла: Уралтауҙа, киң далалағы иркен азат тормош, ситтәрҙең беҙҙең ергә һөжүме, яуҙар, ихтилалдар, оло еңеүҙәр, еңелеүҙәр, тағы ла яуҙар, тағы балҡыуҙар, тағы ҡайтыуҙар. Ҡурай тауышын ваҡыты-ваҡыты менән барабандар тауышы еңепеңеп алыуы шуға ишара. Барабандар - улар беҙҙең ергә килеүсе менәр-менәр сиреү ҙә, рухты, милли булмышты аямаусы заман машинаһы ла. Ҡурай бер үк ваҡытта беҙгә тарих һөйләүсе лә, сыңрау торна тауышы ла, яуға саҡырыусы һорнай ҙа. Икенсе күҙлектән ҡарағанда, хәҙерге заман глобаллашыуына ҡаршы рухи көрәшкә сыҡҡан милләт яҙмышы ла сағыла был сығышта. Аяуһыҙлыҡҡа, золомға, йәберһеҙлеккә, ҡотһоҙлоҡҡа ҡаршы йөрәк ихтилалы. Роберт ошо сығышы менән генә ҡурайыбыҙҙың кешелек тарихындағы иң боронғо музыка ҡоралы булыуын да иҫбат итте. Быға тиклем дә уның тик ошо төркөм менән йәнаған 2-3 сәғәтлек программаларын ҡарағаным булды. Залда иң күбеһе башҡа милләт вәкилдәре булһа ла, Роберттың был сығыштары өнһеҙ генә, бер тынала ҡабул ителә. Аңлатмаһы ла ябай ғына: кешелектең иң боронғо музыка ҡоралдары ҡурай дөңгөр, барабан менән бергә яңғыраған саҡта һәр ҡайһыбыҙҙың аҫҡы аңындағы боронғолоҡ хисен уята.

### Имеш, һуңғы башҡорт ҡәберендә...

Иншалла, ҡурайыбыҙ халҡыбыҙҙың үҙе кеүек, меңәр-меңәр йыллыҡ тарих һынауҙарын үтеп, XXI быуат башында оло яңғыраш алып, үҙенең мәңгелек яңғырашҡа хаҡлы асылын тағы бер тапҡыр раҫланы. "...һуңғы башҡорт ҡәберендә ҡурай уйнар һуңғы ҡурайсы...", тиеүсе кеше иҫән булып, 30 октябрҙә Башҡорт дәүләт филармонияһына килеп, "Ҡурай" байрамын ҡараһа, үҙенең төптө яңылышҡанын аңлар ине. Ҡурайсылар йыйынында сығыш яһаусы Юлай Ғәйнетдиновтың 1812 йылғы Ватан һуғышының 200 йыллығына ике мең ҡурайсының сығышын әҙерләүҙе тәҡдим итеүе лә күп нәмә хаҡында һөйләй. Әлбиттә, бында күмәк уйнауға ҡушылырлыҡ 3-4 ҡурайсы хаҡында һүҙ йөрөтөргә лә булыр ине, әммә Юлай ағайҙың 2 мең профессиональ ҡурайсы, тиеүе күпкә ишара: милләтебеҙҙең рух яңғырашы булған ҡурай меңәр-меңәр оҫтаның йөрәк, күңел яңғырашы булып, бар донъяға тарала. Улай ғына ла түгел, бынан быуат самаһы элек үҙенә йәназа уҡылған уйын ҡоралында уйнаусылар яңы быуат башында үҙҙәренең профессиональ союздары съезына йыйылды.

Съезд идара рәйесе Азат Айытҡоловтың ҡыҫҡаса отчет доклады менән башланып китте. Артабан сығыш яһаусы Юлай Ғәйнетдинов, Мөхәмәт Түлебаев, Тәлғәт Нуриев, Рөстәм Баһауов, Марсель Вахитов, Рәнис Алтынбаев, Зәйнулла Салихов, Роберт Юлдашевтар ҡурайсылар союзының йәмғиәттәге ижтимағи ролен күтәреү, ҡурайҙы донъя кимәлендә популярлаштырыу буйынса уҙ кәңәштәрен әйтеп үтте. "Хәҙер инде олоғайҙыҡ. Шулай ҙа ҡурайҙың донъя кимәлендә патент алыуын күреп, тынысланып, хур ҡыҙҙарын бейетергә китергә ине", тине шаярыу ҡатыш оло ҡурайсыбыҙ Мөхәмәт Түлебаев үҙенең аҙашы Мөхәмәт Ҡәҙерғоловтың әйткән һүҙҙәрен иҫкә төшөрөп. "Күңеле таҙа кеше тураһын әйтә", тиелә бер япон мәҡәлендә. Тураһын әйтеп һөйләшәйек, ҡурайсы булыу намыҫлы булыу, тигәнде аңлата. Күңеле бысраҡ кеше ысын ҡурайсы була алмай. Шул уҡ ваҡытта "ҡурайсы" һүҙе "шабашник" һүҙе менән бер түгел", тине съезды алып барыусы Рөстәм Баһауов.

Әйткәндәй, съезд дилбегәһен аҡһаҡалдар баштан уҡ йәштәргә тотторол, үҙҙәренең ысын мәғәнәһендәге демократ булыуын раҫланы. Юлай ағай Ғәйнетдиновтың "Башҡортостан дәүләтселеген төҙөү юлында йөрөүселәрҙең күбеһе әле көләш тә алмаған егеттәр булған", тиеүе был йәһәттән өлкән ҡурайсыларҙың йәштәргә ышаныс менән ҡарауын дәлилләне. Съезд аҙағында Башҡортостан ҡурайсылар союзы идараһына асылда йәштәрҙең һайланыуы (идара рәйесе Илшат Солтангәрәев) был ҡараштың тағы ла бер тапҡыр раҫланы. Съезда сығыш яһаусы Марсель Вахитов Башҡортостан ҡурайсылар союзының өрәны структураһын тәҡдим итте. Уның буйынса ҡурайсылар союзының иң юғары органы булып съезд һанала. Союз менән идара етәкселек итә. Ә инде оло йәштәге арҙаҡлы ҡурайсыларҙан торған Аҡһаҡалдар советы (коро), ревизия комиссияһы һәм төрлө йүнәлештәге секциялар ҡурайсылар союзының тулы ҡанлы тормошон тәьмин итер, тигән өмөттәбеҙ.

### Ҡурай уйнауыбыҙ - Аллаһы Тәғәлә ҡушҡан вазифабыҙ...

Ҡурайсылар съезында сығыш яһаусы Роберт Юлдашев үҙенең телмәрендә бер төркмән риүәйәтен иҫкә төшөрҙө:

-Бер бәйғәмбәр ергә килеп төшә лә, Аллаһы Тәғәлә менән осрашып һөйләшеү шатлығын нисек итеп кешеләргә еткерергә белмәй йөрөй. Шулай йөрөгәнендә ул күңелендә Аллаһы Тәғәләнең тауышын ишетә: "Анау сүллеккә сыҡ та, ундағы ҡоҙоҡҡа һөйлә шатлығыңды", - ти уға Хаҡ Тәғәлә. Бәйғәмбәр ҡоҙоҡҡа әйелеп, үҙенең шатлығын еткереүе була, шул ерҙә бер көпшә үҫеп сыға. Шунан һуң бәйғәмбәр унан төркмәндәрҙең төйҙөгән яһай. Төркмәнстанда йөрөгән саҡта мин урындағы халыҡтан шул көпшәнән яһалған төйҙөктәрен күрһәтеүҙәрен һораным. Әммә күпме генә йөрәһәк тә, бер аҡһаҡал да миңә көпшәнән яһалған төйҙөктө күрһәтә алманы. Булған төйҙөктәре барыһы ла бамбуктан яһалған. Шул саҡта минең башҡа бер уй килде: ерҙән үҫеп сыҡҡан көпшә уларҙа түгел, Урал тауҙарында үҫә һәм ул ҡурай тип атала. Башҡа ерҙәрҙә лә үҫә ул көпшәгә оҡшаған үлән, тик улар быуын-быуынлы һәм уларҙан ҡурай яһап булмай. Тимәк, ҡурайҙы беҙгә Аллаһы Тәғәлә бүләк иткән һәм унда уйнаусы төүге башҡорт бабабыҙ быныӊ менән башҡаларға Хаҡ Тәғәлә менән осрашыу шатлығын бәйән итә. Ҡурайсыбыҙҙың илаһи аһәңле булыуы ла ошонан килә. Беҙ үҙебеҙҙең ҡулда ниндәй илаһи ҡорал барлығын оноторға тейеш түгелбеҙ. Ҡурай уйнау - Аллаһы Тәғәлә вазифаһын үтәү ҙә. Беҙ ошо вазифаны үтәмәйбеҙ икән, Аллаһы Тәғәлә беҙҙең юлды асмаясаҡ...

...Бөгөн: "Беҙгә ҡурайсылар союзы кәрәкме?" - тигән һүҙҙәрҙе лә ишетергә тура килә. Минең өсөн был һорау: "Беҙгә Башҡортостан Республикаһы кәрәкме?" - тигән һорау менән бер төрлө яңғырай. Беҙ ҡурайыбыҙҙың патентын да юллап алырбыҙ, әммә патент алыу ғына бар мәсьәләне хәл итмәйәсәк. Ҡурайыбыҙ моңо бар донъяға яңғыраш алырға хоҡуҡлы. Шул уҡ ваҡытта миңә бик күп тапҡырҙар сит илдәргә сығырға тура килә. Мәсеттәргә йома намаҙына ла инәм ул саҡта. Ана шунда намаҙ уҡығандан һуң мосолмандар үҙҙәренең милли музыка ҡоралдарын сығарып уйнап, күмәкләп зекер башҡара. Зекерҙең ҡурай менән ҡушылған формаһы беҙҙә лә булған. Бының менән нимә әйтергә теләйем һуң? Беҙ, ҡурайсылар, дин юлына баҫһаҡ, ҡурайыбыҙҙың тағы ла күп серҙәрен асып, халҡыбыҙ күңеленә тағы ла яҡыныраҡ килә алыр инек, тием.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**"Һыҙҙырт, ҡурай!" концерт программаһына Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов һәм уның әсәһе Рәйсә апай ҙа килде. "Бигерәк оло, матур байрам булды был тамаша! Хатта хистәрем күңелемә һыймай, концерт барышында илап ултырҙым. Моңдоң кеше күңелендә йоҡлап ятҡан тойғоларҙы ла уятырға һәләтле икәненә тағы бер тапҡыр инанып, халҡымдың көйө, йыры өсөн оло ғорурлыҡ тойғолары кисерҙем", тине Рәйсә апай концерттан алған тәьҫораттары менән уртаҡлашып.**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

**(Теманың дауамы 16-сы биттә).**

ИНТЕРНЕТТАН



# ҘУР ҠАЛАЛА... хәүефлерәк

■ АҠШ-ның Калифорния университеты ғалимдары асыҡлауынса, шоколадтың еҫе лә файҙалы икән, сөнки ул кеше организмында А иммуноглобулинының - вирустарға ҡаршы көрәшеүсе матдәнең бүленеп сығыуын әүҙемләштерә. Самалап ҡына ҡулланғанда, шоколад йөрәк-ҡан тамырҙары системаһының эшмәкәрлегенә лә ярҙам итә. Был татлы аҙыҡта кәйефте яҡшыртыусы стимулятор - теобромин да, бәхет гормоны - серотонин һәм эйфория тыуҙырыусы матдә - фенилэтиламин да бар. Яңыраҡ Лондондың Британия колледжы профессоры М. Турна ҡара шоколадтың бауыр циррозын дауалауҙа ярҙам итеүен асыҡлаған.

■ Рәсәй психологтары мәғлүмәттәренә ярашлы, мегаполистарҙа йәшәүселәр мәғлүмәт күплегенән һәм һәр ваҡыт хәүеф тойғоһо кисереүҙән психик тайпылыштар менән йышыраҡ яфалана. Икенсе яҡтан, ҙур ҡалаларҙа нервы көсөргәнешенән арыныу өсөн төрлө мәҙәни учреждениелар ҙа күберәк. Экстремаль шарттарҙа хоҡуҡи һәм психологик ярҙам үҙәге етәксеһе, профессор Михаил Виноградов әйтеүенсә, мегаполис халҡының психологик һаулығына өс төп аспект йоғонто яһай. Беренсеһе - эштәрҙең артыҡ күп булыуы. Төрлө осрашыуҙар, транспорт ағымы, һауаның газлы һәм бысраҡ булыуы организмда төрлө нервы тайпылыштары барлыҡҡа килеүенә килтерә. Икенсе аспект - күптәр мәғлүмәти һөжүмде күтәрә алмай. Өсөнсөһө - таланыу, үлтерелеү мөмкинлеге кеүек хәүефтәрҙең күп булыуы. Етмәһә, ҡалала йәшәүселәр балаларының хәүефһеҙлеге өсөн йышыраҡ борсола.

■ Рәсәйҙең күҙҙәре насар күргән һәр бишенсе кешеһе күҙлек тә киймәй, контакт линзалары менән дә ҡулланмай. Уларҙың фекеренсә, быでの төп сәбәбе - күҙлек кешенең тышҡы ҡиәфәтен матурламай, киреһенсә, боҙа ғына. Офтальмологтарҙың мәғлүмәттәренә ярашлы, һәр икенсе рәсәйлелең күреү һәләте боҙолған, илдә 15,5 млн кеше төрлө күҙ сирҙәре менән яфалана. Әгәр ҙә 20 йыл элек мәктәпте тамамлаусыларҙың 15-20 процентына күрәшлек диагнозы ҡуйылһа, бөгөн был күрһәткес 30-35 процентҡа күтәрелгән. Ортопедтар мәғлүмәттәренә ярашлы, ҡатын-ҡыҙҙарҙың 40 проценты модалы булғаны өсөн генә уңайһыҙ аяҡ кейемендә йөрөргә әҙер. Ә был төрлө сирҙәргә, шул иҫәптән, умыртҡа бағанаһы менән бәйле проблемаларға килтереүе ихтимал.

■ Тауыҡ йомортҡаһына ҡарағанда, бүҙәнә йомортҡаһында витаминдар - 2,5, тимер күләме буйынса - 4,5, ә фосфор һәм калий күләме буйынса 5 тапҡырға күберәк. уны йомортҡаға аллергия булғанда ла ашарға ярай, улар аллергия булдырмай, киреһенсә, аллергик реакцияны баҫа. Етмәһә, бүҙәнә йомортҡаһында бер ҡасан да сальмонелла кеүек ҡурҡыныс бактерия булмай, сөнки бүҙәнәнең тән температураһы бик юғары (42 градус) һәм сальмонеллез булдырыусы бактериялар бындай температурала һәләк була. Был аҙыҡ төрө балаларҙың аҡыл һәләтен үҫтерә, Японияла, мәҫәлән, көнөнә 2-3 бүҙәнә йомортҡаһы ашау илдең төп 12 законында билдәләнгән.

■ Насар яҡтыртылған бүлмә, хатта ҡояштан һаҡлаусы күҙлектәр кешене эгоист яһай. Быны Торонто университетының философия факультеты ғалимдары иҫбатлай алған. Улар өс тәжрибә үткәреп ҡараған. Беренсе тәжрибә күрһәтеүенсә, насар яҡтыртылған урындарҙа хеҙмәт итеүселәр аҡсаны күберәк алыу маҡсатында йыш ҡына хеҙмәттәштәрен алдау юлына барған. Икенсе һәм өсөнсө тәжрибәлә ҡатнашыусыларға ҡара күҙлектәр таратып бирелгән һәм улар парлашып компьютер уйыны уйнаған. Уйын ваҡытында ҡара күҙлекле уйынсылар үҙҙәрен эгоист итеп күрһәткән.

БЕЛГЕС КӘҢӘШ ИТӘ

# ЭШТӘ ҠОТОЛОУ ЮЛЫ ЭҘЛӘМӘ,

## эш - йәшенеү урыны түгел...



**Сираттар. Поликлиникаларҙа, РЭГ-палаталарҙа, кибеттәрҙә, банктарҙа, хакимиәттәрҙә... Сиратта торған һәр кем, күпмелер ваҡытын сарыф итеп, үҙ мәсьәләһен тиҙерәк һәм ыңғай хәл итергә тырыша. Ләкин шуныһы ла бар бит әле: уҡыған кешеме һин, белемһеҙме, оломо, кесеме, ярлымы, баймы, һаумы,сирлеме - һин барыбер ҡабул итәсәк белгескә бәйлеһең.**

Нисек ҡабул итә ул һине? Төрлөсә. Кешеһенә ҡарап, кәйефенә ҡарап. Шулай ҙа, ни өсөн кемдер клиенттар менән аралашыуҙан йәм табып, мәсьәләне профессиональ сиктән сыҡмай хәл итһә, кемдер һәр ингән кешегә эт шикелле "өрөп" ултыра? Сәбәптәре төрлө, әлбиттә. Ҡайһы саҡта белгес үҙе лә аңламай: ни өсөн ул шулай агрессив, тупаҫ, битараф булып китте әле? Һуңғы йылдарҙа Рәсәйҙә психологтар, табиптар "профессиональ һүнеү синдромы" хаҡында күп һөйләй. Беҙ әйткән миҫалдар тап ошоға ҡағыла ла инде.

ПҺС (профессиональ һүнеү синдромы) - уҡытыусылар, һаулыҡ һаҡлау хеҙмәткәрҙәре, психологтар, милиционерҙар, сәйәсмәндәр, журналистар, ғөмүмән, кеше менән йыш аралашыусы һөнәр эйәләре өсөн иң ҡурҡыныс һөнәри сирҙәрҙең береһе. ПҺС- оҙайлы стресс һөҙөмтәһендә белгестең эмоциональ-энергетик һәм шәхси ресурстарының кәмеүе ул. Был тиҫкәре эмоцияларҙан ваҡытында бушана белмәүҙән килә.

Был профессиональ сир бер нисә үҫеш стадияһы үтә. Тәүге стадияла эмоциялар, тойғоларҙың көсһөҙләнеүен күҙәтергә була, барыһы ла тәртиптә, нормала кеүек, тик ни өсөндер күңелдә бушлыҡ, күңелһеҙ... Ыңғай эмоциялар юғала, ғаилә ағзалары менән ҡәнәғәтһеҙлек урынлаша, шомлолоҡ торошо барлыҡҡа килә. Икенсе стадияла клиенттар менән аңлашылмаусанлыҡ барлыҡҡа килә, һөнәрмән коллегалары янында уларҙың ҡайһы берҙәре хаҡында насар һүҙ ҡуҙғата башлай. Артабан белгес клиенттар алдында ла үҙен "күрһәтә" башлай: тәүҙә көс-хәл менән тыйып тотолған антипатия үҫешә, ярһыулыҡҡа әйләнә. Белгестең был торошо - үҙ-үҙен һаҡлау тойғоһонан барлыҡҡа килә. Өсөнсө стадияла кешелә тормош ҡиммәттәренә, хатта үҙенең тормошона хәүефле битарафлыҡ барлыҡҡа килә. Тышҡы ҡиәфәте нормаль кеүек күренһә лә, күҙҙәрендә ҡыҙыҡһыныу осҡондары юғала, хата физик яҡтан һиҙелерлек һалҡынлыҡ, битарафлыҡ кешенең күңелендә урын ала.

Профессиональ һүнеү синдромы менән сирле белгестәр үҙ -үҙен түбән баһалай, яңғыҙлыҡ тойғоһо кисерә, аҡрынлап бүтән төрлө сирҙәргә лә дусар була ( гастрит, мигрень, юғары артериаль ҡан баҫымы, хроник арыу).

Түбәндәге физик үҙгәрештәрҙе күҙәтергә була: эштән һуң ғына түгел, хатта иртәнсәк тә арыу; ҡапыл ғына тән ауырлығы үҙгәреүе; йыш баш ауыртыуы, ашҡаҙан-эсәк тракты эшмәкәрлеге боҙолоуы; йоҡоһоҙлоҡ.

Психологик үҙгәрештәр: эс бошоу, битарафлыҡ, сәбәпһеҙ ҡыҙып китеү, бирләнеү, үҙ-үҙеңә бикләнеү; артыҡ яуаплылыҡ; һәр ваҡыт негатив эмоциялар кисереү (кемделер йә үҙеңде ғәйепләү, хәүефләнеү, шикләнеү, оялыу, үпкәләү), үҙ-үҙеңә ышаныс тойғоһон юғалтыу.

Кешенең үҙ-үҙен тотошо , тәртибе үҙгәреүе: башҡарған эштең көндән-көн ауырайыуы, башҡарып сыға алмаҫлыҡ хәлгә килеүе; белгес башҡаларға һиҙелерлек итеп көн режимын үҙгәртә (иртәрәк ҡайтып китә, эштә тотҡарлана); эшен һәр ваҡыт өйөнә алып ҡайта, ләкин өйҙә лә эшләй алмай; ҡарар ҡабул итә алмай; эшкә ҡарата энтузиазм юғала, һөҙөмтәләргә битарафлыҡ, ыңғай яҡҡа үҙгәрештәргә ышанмаусанлыҡ, файҙаһыҙлыҡ тойғоһо кисереү; мөһим, приоритет эштәрҙе эшләмәй, ваҡ-төйәк мәсьәләләргә баҫым яһап, бушҡа ваҡыт әрәм итеү; белгестәр, клиенттар менән аралашмаҫҡа тырышыу, адекват булмаған тәнҡит; алкоголь эсемлектәр ҡулланыу.

**Профессиональ һүнеү синдромына юлыҡмаҫ өсөн нимәгә иғтибар итергә кәрәк?**

- Үҙегеҙгә иғтибарлы булығыҙ.
- Үҙегеҙҙе яратығыҙ, үҙ-үҙегеҙгә оҡшарға тырышығыҙ.
- Ҡулығыҙҙан килгән, башҡарып сыға алырлыҡ эштәргә генә тотоноғоҙ. Тамамланған эштәр үҙ-үҙегеҙгә булған баһаны күтәреп ебәрер.
- Эштән бәхет, йә иһә ҡотолоу юлы эҙләмәгеҙ. Эш - йәшенеү урыны түгел.
- Бүтәндәр өсөн түгел, ә үҙегеҙ өсөн кешеләр менән бергә йәшәргә өйрәнегеҙ.
- Һәр көндөң ваҡиғаларын айыҡ баһаларға өйрәнегеҙ.
- Үҙегеҙ өсөн ваҡыт табығыҙ, һеҙҙең эштән тыш шәхси тормошҡа ла хаҡығыҙ бар.
- Кемдеңдер йомошон, эшен башҡарыр алдынан уйлағыҙ: ул кеше ошо эште уҙе башҡарып сыға алырлыҡ түгелме, уға һеҙҙең ярҙамығыҙ ысынлап кәрәкме?

Ошо синдром билдәләрен үҙегеҙҙә абайлаһағыҙ, нимәләр эшләргә йәки, киреһенсә, нимәнән баш тартырға?

- Тәү сиратта, был билдәләрҙең үҙегеҙҙә бар икәнен таныу, ҡабул итеү, ризалашыу.
- Үҙегеҙҙең тойғоларығыҙҙы йәшермәгеҙ. Дуҫтарығыҙ, коллегаларығыҙ, яҡындарығыҙ менән кәңәшләшегеҙ.
- Бүтәндәр ярҙамынан баш тартмағыҙ.
- Йоҡоға, ялға, фекерләргә етерлек күләмдә ваҡыт бүлегеҙ.
- Коллегаларығыҙға, клиенттарға, яҡындарығыҙға теләктәрегеҙҙе асыҡ, аныҡ, теүәл итеп еткерегеҙ.

Форсат буйынса, нормаль көн тәртибе буйынса йәшәргә тырышығыҙ.

Әлбиттә, тулы ҡанлы тормош менән, бәхетле йәшәү өсөн эмоциялар менән идара итергә өйрәнеү мөһим. Үҙ-үҙегеҙҙе һаҡлағыҙ, яратығыҙ, сөнки профессиональ һүнеү синдромы эҙемтәләре коллега, клиенттарға, белгескә генә түгел, ә ғаилә ағзаларына ла ҡағыласаҡ. Бар кеше лә үҙ-үҙенә ярҙам итергә һәләтле түгел. Бындай осраҡта психолог- консультанттарға, табиптарға мөрәжәғәт итегеҙ.

**Эльвира МЫРҘАБАЕВА,**
**юғары категориялы психолог.**

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# ГӘЗИТЕБЕҘ МЕНӘН БӘХЕТЛЕБЕҘ

"Киске Өфө"нөң шәп гәзит икәнен белмәй йөрөгәнмен, күптән түгел генә алдыра башланым. Һәр һанын көтөп алам, ҡәҙерләп һаҡлайым. Ризаитдин нәсихәттәре, халыҡ дауаһы, "Аҡыл-ҡаҙна", йәшел дауа, һорау-яуап... Халыҡ өсөн ни тиклем кәрәкле мәғлүмәттәр!

"Киске Өфө"нөң ир-егет журналистары күтәргән темалар үҙҙәре генә лә ни тора! Һүҙ юҡ, ысын ир-аттар. Һәр ҡаршы иҫкән елдән ҡурҡып, боҫоп, бөгөлөп-һығылып ҡалыусыларҙан түгелдер улар (Юғиһә, тыуа бит донъяға ирҙәр... Ир булған булып... Ир булып тыуғандарына үҙҙәре аптырап...) Тормошобоҙҙағы һәр күренеш-ваҡиғаны, һәр проблеманы үткер итеп ярып һала, ишаралапмы, кинәйәләпме, йә туралап тоҫҡап, хәҡиҡәткә күҙҙәрҙе шар астырып ҡуя улар.

Шулай уҡ ҡатын-ҡыҙ журналистарығыҙ яҙған мәҡәләләрҙе лә бик яратып уҡыйбыҙ. Ниндәйҙер тылсымлы бер көс бар кеүек улар яҙған юлдарҙа. Ҡыҙ-ҡатындарға ғына хас һағыш та, моң да, саялыҡ та, әрнеү ҙә, шатлыҡ та, яҡты өмөт тә... Барыһы ла бар... Уҡый бараһың, ә күңелдә, йәндә, әйтерһең дә, бына-бына матур бер йыр тыуа. Был йыр һине берсә күктәргә алып оса. Берсә алға әйҙәй...

Әлбиттә, ошондай "Киске Өфө" тигән гәзитебеҙ һәм унда эшләрлек көслө журналистарыбыҙ булыуы менән беҙ бәхетле, тимәксемен. Хоҙай һеҙҙе бөтә бәлә-ҡазаларҙан һаҡлаһын.

**Вәкилә САФИУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы Амангилде ауылы.**

*ӘҮЛИӘ-ӘҮЛИӘЛЕК*



# МӨЖӘҮИР ХӘҘРӘТ -

## башҡорттоң бөйөк әүлиәһе

### Сәләм ебәреүсе хаҡында

Юланова Сәмсиямал Ғатаулла ҡыҙының саҡырып яҙған хатын алғас та, яйы сығыу менән, сал ҡылғанлы далаға, Хәйбулла районы Уфимка ҡасабаһы тарафтарына ашыҡтым. Беҙҙе оло йәшендә лә төҫ ташламаған мөләйем йөҙлө, баҙыҡ кәүҙәле, йор һүҙле бик һөйкөмлө инәй ҡаршыланы.

-Иҫән саҡта Мөжәүир хәҙрәттең үҙем белеп- күргән, иҫ китмәле хикмәттәре тураһында һөйләп ҡалдырғым килә, зинһар, шуларҙы китапҡа индер, рухы шатланһын,- тине инде йәше туҡһанға яҡынлашҡан ағинәйебеҙ.

-"Мөжәүир хәҙрәт" китабы сыҡҡаны бирле яҙыусыһын күрергә хыяллана инем, иншалла, насип булды, - тине инәй ҡулыма ҡалын ғына дәфтәр тоттороп.- Донъя хәлен белеп булмай, олоғайылды, хәтирәләремде ошо дәфтәргә яҙып ҡуйҙым.

Инәйебеҙ һөйләй, ә мин уның шағиранә матур һүҙҙәр табып тасуирлай белеүенә хайран ҡалып ултырам.

-Беҙ, офоҡҡаса йәйрәп ятҡан тигеҙ дала тыуып-үҫкән кешеләр, армыт -армыт булып күгәреп ятҡан тауҙар илен күреп, һуштарыбыҙ китте. Бына ниндәй мөһабәт тауҙар араһында йәшәй икән дәһә әүлиә, тип хайран ҡалдыҡ. Күкһелләнеп ятҡан Ирәндек ҡуйынына һыйынып ҡына ултырған Манһыр ауылы беҙгә әкиәт илендәй тойолдо. Әүлиәләр нәҡ ошондай кеше-фәлән һирәк йөрөгән һил урынды төйәк итәләр шул, тинек.

Беҙ бәләкәй саҡтан олатай-өләсәйҙәребеҙҙән, атай-әсәйебеҙҙән Мөжәүир хәҙрәт тураһында ишетеп үҫтек,- тип һүҙен дауам итте Сәмсиямал инәй.- Әсәйем һаулыҡҡа йәлсемәне. "Эй, Аллам, Мөжәүир хәҙрәткә барып күренһәм, йүнәлер инем,- ти торғайны.- Ана, Әхмәтша ҡәйнеш Нурия киленде алып барҙы, бермә-бер килеште. Юҡҡа ҡала балнистарына йөрөгәнбеҙ, башта уҡ олатайға барырға булған". "Атаһы, мине хәҙрәткә алып барсы әле",тип ялбара торғас, бер көндө атайым әсәйемде Манһырға алып барырға риза булды. Арбаға мине лә ултыртып алдылар. Яңғаҙыны үтеп, Ҡарамалы ауылына ғына еткәйнек, күк йөҙөн ҡара болот ҡаплап алды ла, эй, ҡойоп ямғыр яуа башланы. Һис туҡтарлыҡ түгел, бер офоҡтан икенсе офоҡҡаса баҫып алған. Бына бер саҡ, ниңәлер, атыбыҙ сығынсылағандай итте. Барған ерҙән ҡапыл туҡтап, артҡа сигенә. Атайым, аптырап, сыбыртҡылап ҡарай, ерән айғыр уның һайын ҡарыша, ауыҙлығын сәйнәй, күҙҙәрен аҡшайта. Тиҫкәреләнгән атты алға атлатыуҙан өмөтөн өҙгән атайым:

-Ғүмере ҡыланмағанын, ни булды был ерәнсәйгә,- тип аптыраны.

-Яҙмағандыр миңә хәҙрәткә күренергә,әйҙә, атыңды бор,бабай, ҡайтайыҡ,- тине ахырыһы хәлһеҙләнгән әсәйем, ерәнсәйҙе лә йәлләне буғай.

-Ҡарамалылағы Сәбилә ҡарындашыма инеп, сәй эсеп, йылынып, кибенеп сығайыҡ,- тине атайым һәм атты ҡайтыр яҡҡа борҙо. Әйләнеп, ҡайтыр яҡҡа боролғайныҡ, сығынсы ат, бөтәбеҙҙе хайран итеп, шунда уҡ күндәм генә атланы ла китте. Бер аҙҙан ямғыры ла туҡтаны. Хәҙрәткә китеп барғаныбыҙҙы белгәс, Сәбилә апай:

-Эй, Аллам, бая беҙгә тейеп китһәгеҙсе,- тине.- Олатайҙы ултыртып ҡуйҙылар бит. - Ул күҙҙәренә йәш алды. Сәй эскән арала хужабикә беҙгә Мөжәүир хәҙрәттең төрлө кирәмәттәрен һөйләп ултырҙы. Ямғырҙың ҡапыл ғына яуа башлауы, ҡапыл туҡтауы, атығыҙҙың сығынсылауы ла уның кирәмәте. Өфөлә ултырһа ла үҙенә китеп барғандарын белеп, бушҡа ыҙалап йөрөмәһендәр, тип, шулай иткән.

Мин, ун биш йәшлек ҡыҙыҡай, был хәлгә ышанырға теләмәй, ихахайлап көлөп ебәрҙем. Сәбилә апайым асыуланып китте. Икеләнеү, шикләнеүҙәргә урын ҡалдырмаҫлыҡ итеп:

-Иҫеңдә тот,Сәмсиямал ҡыҙым, ундай ҡөҙрәт эйәһе оҙаҡ ултырмаҫ,бына, күрерһең, әҙерәк йөрөр ҙә әйләнеп ҡайтыр. Яҙған булһа, үҙеңә әллә нисә барырһың әле. Күрерһең шунда, инанырһың уның илаһи ҡөҙрәтенә.

Сәбилә апайымдың юрағаны юш килде. Оҙаҡламай, хәҙрәт төрмәнән әйләнеп ҡайтты, тинеләр. Аҙаҡтан төрлө ваҡыттарҙа миңә хәҙрәткә өс рәт барырға тура килде.

### Ҡыҙымдың күҙе һауыҡты

1953 йыл ине. Төҫкә зәрә лә һылыу алты йәшлек Зәйтүнә исемле ҡыҙыбыҙ күҙҙән ауырып китте. Ҡояшлы көндә тышта йөрөй алмай, яҡтыға ҡараһа, күҙҙәренән субырлап йәш аға. Дауаханаларға күп алып йөрөттөк, дауалауҙар файҙа бирмәне.Баймаҡта яҡшы күҙ духтыры бар, тигәнгә, ирем Әхмәтғәли менән ҡыҙыбыҙҙы шунда алып барып ҡарарға булдыҡ. Юлда Юлалы тигән ауыл аша үтәбеҙ. Унда Бейешев Сөләймән тигән таныштарға туҡтаныҡ. Хәлебеҙҙе һөйләп биргәс, ул кире ҡаҡҡыһыҙ тауыш менән:

-Хәҙер үк баланы Мөжәүир хәҙрәткә алып барығыҙ. Ул хатта һуҡыр кешеләрҙең күҙен асып ҡайтара. Бына ошонан Ирәндек аша ғына төшөгөҙ ҙә Манһыр булыр,- тип тура юлды күрһәтте.

Бейек-бейек тауҙар аша һуҙылған арба юлынан барабыҙ. Тау битләүҙәре шау сәскә. Үҙәктәрҙә йәм-йәшел сабынлыҡ. Бара торғас, бер матур йылғаға килеп еттек. Урғаҙа тигән йылға ошо икән, тинек. Кисеү аша сыҡҡас, төрлө ағастар менән уратып алынған йорт күренде. Беҙ шунда йүнәлдек. Ҡаҙан өйөндә сәй эсеп ултырған саҡтарына тура килдек. Беҙҙе әйҙүкләп, табынға ултырттылар.

Хәҙрәт олатай беҙгә ҡарап, мут ҡына йылмайып ҡуйҙы ла:

-Йә, ни эшләп Баймаҡҡа бармай, бында килдегеҙ, Сөләймән белешегеҙ өгөтләп ебәрҙеме?- Үҙе тағы хәс малайҙар кеүек шаян йылмайҙы. Бер аҙҙан тағы шелтәләүгә күсте:

-Балнис һайын йөрөтә торғас, баланы һуҡыр итә яҙғанһығыҙ бит. Ҡыҙымдың ауырыуы духтырҙыҡы түгел. Уға урыҫ һоғо тейгән.

Шуларҙы әйтте лә бағымсы, мин хәҙер киләм, тип, Урғаҙа буйына төшөп китте. Үҙе әйләнеп килгәс, беҙгә лә йылға буйына барып, тәһәрәтләнеп килергә ҡушты. Гөлйемеш абыстай беҙҙе оло өйгә саҡырып индерҙе. Матур ағас өй. Буйы менән урындыҡҡа келәм түшәлгән. Уртала тояғы семәрләп эшләнгән ялтырап торған баҙарҡай өҫтәл. Өҫтөндә аҡтан кейенгән, башына түбәтәй кейгән олатай, өшкөрөргә әҙерләнеп, мендәр өҫтөндә ултыра.

Беҙгә нык йәне көйгәндер, ахрыһы, йәнә шелтәнән башланы:

-Баланы күрәләтә эшлектән сығара яҙғанһығыҙ. Быға тиклем алып килмәй, ни ҡарап йөрөнөгөҙ?

Шунан колхозда шофер булып эшләгән ирем Әхмәтғәлегә ҡарап:

-Был шәпле ир бер көтөү бисә-сәсәләрҙе машинаһына тейәп, эргәнән ҡырылмаһа ҡырҡ уҙа, ә ҡыҙын ҡарарға ваҡыт тапмай,-тине. Миңә лә элəкте хәҙрәттән.

- Теге ваҡыт, мин өйҙә юҡта, ауырыу әсәңде алып килгәндә, Сәбилә апайыңдан барыһын ишетеп, белеп ҡайттығыҙ бит. Уның һөйләүенә ышанмай ултыра инең. Хәҙер ышандыңмы?

Беҙ хәҙрәттең барыһын белеп, күреп ултырыуына таң ҡалып, телдән яҙҙыҡ.

-Ҡыҙым, кил эргәмә!-хәҙрәт Зәйтүнәне янына саҡырып алды, башынан һыйпап, ихласлап өшкөрөргә тотондо.

-Балаҡайҙың күҙе-ҡашы ҡыйылып тора шул! Етмәһә, бейергә оҫта икән. Урыҫты әйтәм, ҡалай күҙе ҡаты әҙәм. Үҫеп ултырған ағасты ҡоротор, мәлғүнең. Ярай әле бала иҫән ҡалған. Бынан ары аслан бейемә, йәме, ҡыҙым. Тағы бер һоҡ тейһә, күҙҙән генә түгел, аяҡтан да яҙырһың, мәңгелеккә һуҡыр, сатан булып ҡалырһың.

Хәҙрәт тоҙ өшкөрөп, бетеү яҙып бирҙе. Бетеүҙе баланың маңлай сәсенә сикәләп үреп ебәрергә ҡушты. Тубығында ятҡан көйө йоҡлап киткән ҡыҙыбыҙҙың сикә сәстәренән һыйпай-һыйпай, байтаҡ кәңәштәр бирҙе хәҙрәт. -Башҡаса сәстәрен ялпылдатып, үҙен сосолдороп, бейетеп йөрөтмәгеҙ, тине. Әхмәтғәлегә ҡарап әйтте.

-Шофер улым, ҡыҙыңды бында тағы бер алып килергә ваҡыт табырһыңмы икән?

-Алып килербеҙ, хәҙрәт, килербеҙ. - Шунан хәҙрәт, күрәһең, баланы уятырға ҡыҙғанып, минән атай-әсәйемдәр тураһында һораша башланы. Атайымдың Иҫәнгилде ауылы Ғатаулла мулла булыуын белгәс, йөҙө яҡтырып китте.

-Атаң мәрхүм бик дини кеше булды. Намаҙын, ураҙаһын ҡалдырманы, күп ҡөрьән аштарында табындаш булдыҡ,- тип атайымдың рухына "Ҡөрьән"дән сүрәләр бағышланы.

Ошо бер килеүҙән ҡыҙыбыҙҙың күҙе йүнәлде. Был хәлгә сикһеҙ ҡыуанған Зәйтүнәбеҙ, олатай әйткәнде тыңлап, бейеүен ташланы.

Хәҙрәт теге саҡ ҡыҙығыҙҙы тағы бер алып килерһегеҙ әле, тигәйне. Ысынлап та, беҙгә Манһырға тағы барырға тура килде. Ҡыҙым олатай яҙып биргән бетеүҙе башынан төшөрмәне. Бетеүен араһына ҡуйып тегеп, мәрйендән таж яһап та кейеп йөрөнө. Ике йыл үткәйне, ҡыҙым өҙмәй ҙә ҡуймай:

-Олатайға барайыҡ, мин уға рәхмәт әйтергә теләйем,- тип ныҡыша башланы.

**Лира ЯҠШЫБАЕВА.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Утты нисек яндырырға

Артабанғы бүлектәрҙә һеҙ был илаһи бәйләнеште байлыҡ, мөхәббәт һәм проблемаларығыҙҙы хәл итеү өсөн ҡулланырға өйрәнерһегеҙ. Әммә әлегә һеҙгә әле генә ҡабыҙған ялҡынды нығыраҡ яндырырға кәрәк. Тиҙҙән ул көсәйеп, тормошоғоҙҙо яҡтыртыр.

**Бында ике нәмә бигерәк тә мөһим:**

**1.** Кинәнеп Юғары Минегеҙ менән ҡосаҡлашҡанығыҙҙы иҫләгеҙ.

**2.** Был тәжрибәгеҙ хаҡында башҡаларға һөйләмәгеҙ.

Юғары Минегеҙҙең образын һәм уның менән ҡосаҡлашҡанығыҙҙы иҫләп, һеҙ булдырған бәйләнеште нығытаһығыҙ. Быны сер итеп тотоғоҙ. Башҡалар менән был хаҡта фекер алышһағыҙ, энергияғыҙ таралып, бер көн килеп рухи ҡаҙаныштарығыҙ тамырынан ҡороясаҡ.

Әгәр был хаҡта үҙ алдығыҙға, башҡаларҙан йәшереп кенә уйлаһағыҙ, был шунда уҡ файҙаға китер. Һеҙ үҙегеҙҙе яҡшыраҡ тоя башларһығыҙ. Тормош тураһында яҡшыраҡ уйларһығыҙ. Һуңынан тартыу көсө буйынса тағы бер нәмә тормошҡа ашыр. Һеҙ был тормошта нимә кәрәк, хатта ынтылған нәмәгеҙ булмаһа ла, шуны үҙегеҙгә тарта башлаясаҡһығыҙ. Быға матди байлыҡ та, мөхәббәт тә инә.

Беренсе бүлектә мин иғтибарығыҙҙы башҡаларға ҡарата изге эштәр ҡылырға һәм ниндәй генә ижад эше булмаһын, яулаған ҡаҙанышта туҡтап ҡалмаҫҡа кәрәклеккә йүнәлтәм. Был Юғары Минегеҙҙең, тимәк, Ижадсының, Булдырыусының һеҙгә мөнәсәбәтен булдырыр. Һәр изге эш һеҙ ҡабыҙған ялҡынды көсәйтер. Һеҙ үҙегеҙҙе аҡыллыраҡ тота һәм ҙур һәләттәрегеҙҙе күрһәтә башларһығыҙ.

"Увеличение творческих способностей" китабында Уиллис Хармон менән Говард Рейнголд: "Һабаҡ алынырға мөмкин, һәм иң ышанысլы уҡытыусы - үҙегеҙҙең Юғары Минегеҙ", - тип яҙа.

Юғары Мин менән аралашыу тәжрибәһен иҫләү - һоҡланғыс. Әммә тиҙҙән беҙгә тағы ла бер аҙым эшләргә тура килер. Һеҙгә Юғары Минегеҙҙе саҡырып, көсөргәнештән арынырға һәм Уның менән әңгәмәләшергә тура килер. Уйҙа ғына һөйләшергә һәм тыңларға кәрәк. Ишеткәнегеҙ бүлмә стеналарын һелкетерлек булмаҫ. "Хәҙер мин һиңә нимә эшләргә икәнен һөйләрмен", - тигән көслө тауыш та булмаҫ. Быны көтмәгеҙ, сөнки оҙаҡ көтөргә тура килер.

Барыһы ла бер мәлдә буласаҡ. Һеҙгә нимә эшләргә кәрәклеге тураһында уйҙар килер. Улар һеҙгә үҙегеҙҙең уйығыҙ кеүек булыр, әммә ысынбарлыҡта ул юғары сығанаҡтан киләсәк. Һеҙ уларҙы һоҡланғыс идеялар тип ҡабул итерһегеҙ.

Һеҙ хаҡлы. Бынан да яҡшыраҡ булмай.

**Роберт СТОУН.**

*УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ*

Безгә 8 йәш

# БОЛОТ АРАҺЫНАН СЫҠҠАН ҠОЯШ КЕҮЕК...

**Зәбирә Шәрифуллина, Өфөләге 116-сы мәктәптең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы:** Рус мәктәбе булһаҡ та, директор республикала сыҡҡан барлыҡ баҫмаларға яҙҙырыуҙы бурыс итеп ҡуйған, шуға күрә башҡортса донъя күргән гәзит-журналдар менән бер рәттән, "Киске Өфө" гәзитен дә мәктәп китапханаһына алдырабыҙ. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булараҡ, гәзиттә дәрестә ҡулланыу өсөн бик күп материалдар табам. Ниндәй генә рубриканы алып ҡарама - һәр ҡайһыһында ҡыҙыҡлы фекер, фәлсәфәүи йөкмәткe бар. Телгә булған иғтибар ҙа, атай абруйын күтәреү, әсәй тәрбиәһен баһалау - уҡыусылар өсөн миҫал итеп килтерерлек әҙер материалдар.

**Илдус Ҡолһарин, Дим районының Йорт милексселәре ширкәте (ТСЖ) идараһы рәйесе:** Башҡорт булараҡ, шуны әйтә алам: "Киске Өфө" гәзите халыҡҡа бик йөкмәткеле мәғлүмәт еткерә. Халҡыбыҙға республикалағы социаль, сәйәси, иҡтисади тормошто ябай тел менән асып бирә, аңлата. Башҡорт халҡы йәшәргә, эшләргә, республикабыҙҙың байлығын ҡулланырға, файҙаланырға тейеш икәнен милләттәштәребеҙгә төбө-тамырына тиклем еңтекле еткерәһегеҙ. Был нимә икән, тип уйлап тораһы юҡ, һәр кемдең аңына барып етерлек итеп яҙа хәбәрселәр. Шуға гәзитте ҡулыма алған һайын шатлыҡ тойғолары кисерәм.

**Тәнзилә Ҡотлогилдина, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы) Башҡарма комитетының төп белгесе:** Гәзитте ҡулыма алыу менән уны иң аҙаҡҡы битенән - "Аҡыл ҡаҙнаһы" рубрикаһынан уҡый башлайым. Артабан өсөнсө биткә күсәм. Унда Таһир Ишкининдың йәмғиәтебеҙҙәге көнүҙәк проблемаларҙы анализлап яҙған мәҡәләһе үҙенә магнит кеүек тартып тора. Ниндәй генә актуаль тема булмаһын, ул һәр кемгә аңлайышлы итеп, ябай тел менән еренә еткереп әйтеп бирә. Шулай уҡ һәр ваҡиғаға, хатта һәр фекергә республиканың билдәле шәхестәре менән бер рәттән, ябай халыҡтың да фекерен белешеү, уны гәзит биттәренә сығарыу яҡшы.

"Фекер ҡоро"нда осрашыуҙар, фекер алышыуҙар билдәле шәхестәрҙе, эргәлә йөрөп тә беҙ иғтибар итмәгән кешеләрҙе яңынан аса, улар тураһында башҡа бер ерҙә баҫылмаған яңы мәғлүмәт менән байыта. Ғөмүмән, "Киске Өфө" гәзите бөгөнгө көндә башҡорт баҫмалары араһында иң уҡымлы гәзит.

**Айрат Искәндәров, Өфө ҡалаһы Совет районының гуманитар мәсьәләләр буйынса бүлек мөдире:** "Киске Өфө" гәзитенең һәр һанын көтөп алабыҙ һәм бөтә ғаиләбеҙ менән беренсе битенән һуңғыһына тиклем яратып уҡыйбыҙ. Минең үҙемә бигерәк тә "Аҙна шаңдауы" рубрикаһы аҫтында баҫылып сыҡҡан мәҡәләләр, аналитик материалдар оҡшай. Шулай уҡ "Әйт, тиһәгеҙ...", "Монолог", "Диалог" рубрикалары, уларҙағы аҡыл, фекерҙәр, билдәле күренекле шәхестәр менән әңгәмәләр, актуаль темаларға фекер алышыуҙар күңелгә ятышлы. Балалар исемдәргә бәйле "Атың кем?" рубрикаһын ярата, диалекттар, урындағы һөйләштәргә бәйле "Әсәйем лөғәт" рубрикаһы ғаиләбеҙҙә ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡыла. Гәзит, башҡаларҙан айырмалы, бик ҡыҙыҡлы баҫма булараҡ, ысынлап та, баш ҡала ғына түгел, республикала үҙ уҡыусыһын тапты. Бындай гәзитте күптән көтә инек, хәҙер ул беҙҙең ғаилә ағзаһы кеүек өйөбөҙгә килә, беҙҙең бер туғаныбыҙ һымаҡ. Уның менән уртаҡ тел табып, фекерҙәр алышабыҙ йәки нимәләр тураһында уйланып йөрөгәнбеҙ икән, шул фекерҙәребеҙҙе гәзит битендә күреп, уҡып шатлана, борсоған һорауҙарға, проблемаларға яуаптар табабыҙ. Шуныһы менән ҡәҙерле был баҫма.

**Рим Ғәббәсов, Стәрлетамаҡ ҡалаһының "Ашҡаҙар" гәзите директор-мөхәррире:** "Киске Өфө" гәзите - болотло көндә ҡапыл ҡалҡҡан ҡояш кеүек, халҡыбыҙҙы рухи яҡтан байытыуға, милләтебеҙ проблемаларын халыҡ менән уртаға һалып хәл итеүгә, халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын тергеҙеүгә, тарихи ваҡиғаларҙы киләсәк быуындарға еткереүгә йүнәлтелгән милли баҫма. Ул республикабыҙҙа йәшәгән һәр кемдең яҡын гәзитенә әйерелгәндер тип уйлайым. Минең шәхсән үҙемә гәзиттең рубрика исемдәре, унда исеменә есеме тура килерлек мәҡәләләрҙең баҫылыуы оҡшай.

**Айгөл Буранғолова, З. Вәлиди исемендәге Милли китапхананың башҡорт әҙәбиәте һәм тыуған яҡты өйрәнеү бүлеге мөдире:** Милли китапхананың милли баҫмалар бүлегендә эшләүсе кеше булараҡ, шуныһына иманым камил: "Киске Өфө" гәзите ололарҙың да, мәктәп уҡыусыларының да, вуз студенттарының да күңеленә юл таба алған иң уҡымлы баҫмаларҙың береһе. Китап һөйөүселәр был гәзитте йыш һорай, уның яңы һандары ғына түгел, бынан бер нисә йыл элек сыҡҡан һандарын да ҡулдан-ҡулға йөрөтөп уҡый. Башҡорт әҙәбиәте һәм тыуған яҡты өйрәнеү бүлеге янында эшләп килгән ижади интеллигенция залында ла был гәзит иң уҡымлыһылыр, моғайын. Баймаҡ китапханаһындағы коллегаларыбыҙҙың "Киске Өфө"нөң бар һандарын туплап, китап итеп төпләп, уҡыусыларға тәҡдим иткәнен дә беләм. Һәр һүҙендә халҡыбыҙҙы ыңғай уйҙар менән йәшәргә саҡырған, уҡышлы булырға өндәгән был баҫманы баш ҡала зыялылары ғына түгел, республиканың бар төбәктәре лә алдыра һәм уҡый икән, тимәк, алдынғы ҡарашлы, уйлана белгән милләттәштәребеҙ ҙә бар, тиген һүҙ.

"Киске Өфө" минең үҙемдең дә яратҡан, көтөп алған гәзитем. Башҡортостанда барған хәл-ваҡиғалар, төрлө өлкәләрҙә булған яңылыҡтар менән тап ошо баҫма аша танышырға тырышам, сөнки унда мәсьәләгә һәр ваҡыт тапҡыр һәм дөрөҫ баһа бирелә. Мәғлүмәт заманында йәшәгәнлектән, мәғлүмәтте төрлө сығанаҡтарҙан алырға мөмкинлегебеҙ бар, әммә минең өсөн иң мөһиме - был сығанаҡ кире ҡараштар, негатив фекерҙәр менән тултырылмаған булһын. Ҡараңғы уйҙар менән, ҡайҙандыр гел яманлыҡ көтөп, тормоштоң тик кире яҡтарын ғына күреп йәшәргә күнеккән йәмғиәтебеҙҙе ыңғай яҡҡа бороп ебәрә алһаҡ, шул тиклем йәшәүе еңеләйәсәр ине. "Киске Өфө" тап ошо юҫыҡта эшләгән, халҡыбыҙ өсөн тормош дингеҙендә маяҡ булған баҫма һәм уға тағы ла юғарыраҡ бейеклектәр теләйек, алдырайыҡ, уҡыйыҡ һәм алдынғы ҡарашлы булайыҡ.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**6 ноябрь "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев) музыкаль комедия
**7 ноябрь "Туй"** (А. Чехов), шаярыу, 2 бүлектә
**9 ноябрь "Мөхәббәт ҡарағы"** (Ф. Бүләков), музыкаль комедия
**10 ноябрь "Шәүрәкәй"** (М. Буранғолов), романтик-музыкаль драма

**КЕМ АЛЫҠ?**

**1.** Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең халыҡ артисы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Заһир Вәлитов нисәнсе йылда тыуған?
**2.** "Ҡоҙаса" спектаклендә З. Вәлитов ниндәй роль башҡара?

**8-937-341-91-92 номерына шылтыратырға.**

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**13 ноябрь** Рәмил Ғәйзуллин етәкселегендәге Халыҡ ҡоралдары милли оркестры байрам концерты тәҡдим итә. **"Тыуған ерем"** тип аталған программа Нур Дауытов ижад иткән йырҙарҙан тора. Тамашала Вәхит Хыҙыров, Әлфиә Заһизуллина, Радик Вәлмөхәмәтов, Айгиз Ғизәтуллин һәм башҡа йырсылар ҡатнаша.

**Башлана 19.00 сәғәттә.**

*ЙӘШЕЛ ДАУА*

## ҠОМАЛАҠ

**Ҡомалаҡтың иң файҙалы өлөшө - сәскәһе. Боронғо замандарҙа уҡ әле тибет медицинаһында уның сәскәһен яман шеш ауырыуҙарына ҡаршы ҡулланғандар. Шулай уҡ ҡомалаҡ тубырсыҡтары халыҡ медицинаһында киң ҡулланыла. Уны элек-электән нервылар системаһы ҡаҡшағанда, невроздан, йөҡөнһоҙлоҡтан, гастрит, цистит, уретрит, бөйөр лаҡаны ауырыуҙарынан, шулай уҡ йөрәк-ҡан тамырҙары системаһын нығытыу сараһы булараҡ файҙаланғандар. Уны шулай уҡ баш ауырыуҙарынан, баш әйләнгәндә, үпкә туберкулезынан, матдәләр алмашыныуы боҙолоуҙан, киҙеүҙән дә ҡулланырға була. Йоҡоһоҙлоҡ менән йонсоғанда ҡомалаҡтан мендәр эшләйҙәр. Был шулай уҡ баш ауыртыуын баҫа.**

**Ҡан тамырҙарының варикоз киңәйеүе.** 2 ҡалаҡ ҡомалаҡ тубырсығын 0,5 л ҡайнар һыуға һалырға, һыу быуында 15 минут тоторға, унан һуң 30-40 минут төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда ярты стакандан эсергә.

**Астения, климакс, цистит.** 2 балғалаҡ үләнгә (яңы тубырсыҡтар булһа тағы ла яҡшыраҡ) бер стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 30-40 минут йылы урынға төнәтергә ҡуйырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1/3 стакан эсергә.

**Аллергия.** 1 ҡалаҡ тубырсыҡҡа бер стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ҡайнар һыу быуында 15 минут тоторға. Һыуытырға, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан стакандың 4/1 өлөшөн эсергә. Шул уҡ төнәтмәне тәндең сыбыртып сыҡҡан ерҙәренә һөртөргә була.

**Холецистит.** 2 ҡалаҡ тубырсыҡҡа стакан ярым ҡайнар һыу ҡойорға, ҡапҡас менән ябырға һәм 3 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 4 тапҡыр 1 стакан эсергә.

**Ашҡаҙан, бауыр яман шеше.** 1 ҡалаҡ бешеп етмәгән тубырсыҡҡа 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, һүрән утта бешекләргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан 1 ҡалаҡ ҡабул итергә.

**Бауыр һәм башҡа локализациялы яман шештәр.** 1 ҡалаҡ ҡомалаҡ сәскәһен бер стакан ҡайнар һыу һалып, 1 минут ҡайнатырға, 2 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан 50-60 мл ҡабул итергә.

## БАШЛЫ БИЛСӘН

**Күп кенә ҡый үләндәре кеүек уҡ, билсән дә дауалау үҙенсәлектәренә эйә. Халыҡ медицинаһында билсәндең төнәтмәһен һәм һарҡындыһын төрлө нервы ауырыуҙарынан, эпилепсиянан, бауыр һәм бөйән әсәге ауырыуҙарынан ҡулланалар. Билсән үләне төнәтмәһенән сылатҡыстарҙы яраларҙы бөтәштерер өсөн ҡулланалар.**

**Эпилепсия.** 1 ҡалаҡ үләнде 1 стакан һыуға һалып, 5 минут ҡайнатырға, 1 сәғәт төнәтергә, һарҡытырға. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-2 ҡалаҡ ҡабул итергә. Ошо уҡ төнәтмә нервы ауырыуҙарынан һәм боғаҡтан, бауыр ауырыуҙарынан, ануриянан (һейҙек ҡыуыуына бөйөрҙәрҙән һейҙек килмәүе) файҙалы.

**Яралар, сиҡан, тиреләге тимгелдәр.** 3 ҡалаҡ үләнгә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 2 сәғәт төнәтергә, һарҡытырға. Сылатҡыс рәүешендә ҡулланырға, оҙайлы ваҡыт ҡулланырға мөмкин. Ҡан киткән осраҡта көнөнә 2-3 тапҡыр 2 ҡалаҡ ҡабул итергә. Ошо уҡ төнәтмәнән конъюнктивит булған саҡта күҙгә сылатҡыс эшләп һалырға мөмкин.

**Рим ӘХМӘДОВ.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# МИЛЛӘТЕБЕҘҘЕҢ РУХ ЯҢҒЫРАШЫ -

## сихри ҡурайыбыҙ моңо



(Теманың башы 11-се биттә).

**Рөстәм БАҺАУВ:** Мин бөгөн ҡурай сәнғәтендәге ҡурайсыларҙы ике төркөмгә: ҡурайсы һәм ҡурай уйнай белеүселәргә бүлеп ҡарайым. Был ике төркөм араһында ҙур айырма ята. Ысын ҡурайсы булыр өсөн, съезда бик дөрөҫ билдәләүҙәренсә, күп эшләргә, күп өйрәнергә кәрәк. Музыка сәнғәтендә ҡурай тигән музыка ҡоралының исемен, моңон һаҡлап ҡалыу өсөн беҙгә бөгөн сифат өҫтөндә эшләү мөһим. Ҡурайҙа уйнау кимәле Ишмулла ағай, Ишғәле ағай Дилмөхәмәтовтар, Кәрим ағай Дияровтарҙың кимәленә әле барып етмәгән, уларҙың белеме лә беҙҙә юҡ. Улар кеүек мәшһүр ҡурайсылар рәтенә индерерлек, улар һымаҡ уйнай алырлыҡ ҡурайсыларыбыҙ һирәк әле. Шул уҡ ваҡытта республиканың бар төбәктәрендә лә тиерлек һәүәҫкәр ҡурайсылар булыуы, йәш ҡурайсылар үҫеп килеүе ҡурай сәнғәтенең киләсәге яҡты буласағына ишара яһай. Концертта Мөхәмәт Түләбаев, Әнүәр Шафиҡов, Әскәт Хаинуров, Тәлғәт Нуриев кеүек боронғоса оҫта итеп уйнаған, төрлө боронғо көйҙәрҙе халыҡҡа еткереүселәрҙең дә сығыш яһауы йәштәр өсөн оло үрнәк булғандыр, моғайын. Онотолоп барған көйҙәрҙе тергеҙеү йәһәтенән дә ҡурайсылар байтаҡ эштәр башҡара, айырыусы Өфө сәнғәт академияһын билдәләп китер инем. Дөйөм алғанда, ҡурай уйнаусы йәштәребеҙ күп, уларҙың үҙҙәренә генә хас стилдәре лә бар, тимәк, киләсәктә ысын ҡурайсылар күбәйәсәк һәм тамашасылар уларҙы дәррәү баҫып алҡышлаясаҡ әле.

**Юлай ҒӘЙНЕТДИНОВ:** Мине йәштәрҙең әүҙемлеге ҡыуандыра. Ҡурай сәнғәтенә бик аҡыллы, төплө белемле, үҙ фекере булған йәштәр килә, уларҙы ҡурай үҙе тәрбиәләй, күрәһең. Ысынлап та, ҡасандыр булһа ла ҡурайға тотоноп, ҡурай уйнай башлағандар тәрбиәле булып үҫә. Бындай йәштәр тулҡыны айырым бер төбәктән генә түгел, ә республикабыҙҙың бөтә райондарында ла бар. Ҡурай сәнғәте һүнеп ҡалған төбәктәрҙә бөгөн ҡурай моңо яңғырай һәм нисегерәк яңғырай әле! Уйлап ҡарағыҙ, Дүртөйлө, Туймазы һ.б. райондарҙың балалары республика бәйгеләрендә лауреат була, төрлө исемдәр яулай. Былар барыһы ла бер нәмә тураһында ғына һөйләй - халҡыбыҙ иҫ киткес талантлы, был моң уның күңелендә, ҡанында бар, ҡулына ҡорал килеп эләкһә, ошо моң үҙенән-үҙе ҡалҡып килә лә сыға. Сәхнәлә ҡурай тартып торған ошо егеттәрҙең ҡурайында уларҙың олаталарының моңо яңғырай, был иҫ киткес күренеш бит.

**Әбүбәкер БАЙТИМЕРОВ:** Ҡурай моңон яратһам да, ҡыҙғанысҡа күрә, үҙем ҡурайҙа уйнамайым. Их, ҡурайҙа уйнай белһәң ине, тигән күңел төпкөлөндә генә йөрөгән хыялым ейәнем донъяға килгәс тағы өҫкә ҡалҡып сыҡты. 158-се Башҡорт гимназияһында өсөнсө синыфта уҡып йөрөгән Шамил ейәнем беренсе йыл ҡурай түңәрәгендә шөғөлләнә, унлаған көй уйнай белә лә инде. Унан профессиональ ҡурайсы булыуын талап итмәйем, әммә минең нәҫелемдең дауамы булған уланымдың күңелендә ҡурай моңо яңғырарға тейеш. Ул үҙе лә был моңдоң йөрәгенә көс өҫтәүсе тылсымын тоя, ысын башҡорт егете ҡурайҙа мотлаҡ уйнай белергә тейеш, тип иҫәпләй.

Концертта Роберт Юлдашев, Ишмөрат Илбәков, Рәсүл Ҡарабулатов, Азат Айытҡолов кеүек ҡурайсыларҙың ҡурайҙа уйнауҙары, сәхнәлә үҙ-үҙен тотоштары баланың ғына түгел, минең күңелемде үҫтереп ебәрҙе әле, шуға ла бындай тамашаларҙы йышыраҡ ойоштороу яҡшы булыр ине.

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҮҘЕНДӘ ҠОЯШ ЙӨРӨТКӘНДӘР...

## ситтән яҡтылыҡ эҙләмәҫ

Беҙҙең тормош туҡымаһы сейәлгән ептәрҙән туҡылған, шуға ла уларҙа изгелек һәм яуызлыҡ күрше йәшәй.

**(О. Бальзак).**

Һәр кем тормошҡа үҙ каланчаһынан ҡарай, ләкин ҡайһы ваҡыт был каланча ноль билдәһенән дә түбәнерәк була.

**(И. Шевелев).**

Яҡтылыҡ күрергә теләгәндәр өсөн донъяла яҡтылыҡ күп, ҡараңғылыҡ күрергә теләгәндәргә лә ҡараңғылыҡ етерлек.

**(Б. Паскаль).**

Үҙендә ҡояш һәм тормош йөрөткән кеше ситтән яҡтылыҡ эҙләмәҫ.

**(Р. Роллан).**

Кешелә барыһы ла - күңеле лә, уйҙары ла, ҡараштары ла һоро төҫтә булыуы насар, был төҫ ҡоштарға ғына килешә.

**(М. Стельмах).**

Был тормошто йәшәгән һайын аҙыраҡ аңлайым, ләкин йәшәгән һайын күберәк яратам.

**(Ж. Ренар).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер монах сиркәүгә китеп барған юлда үҙен донъя рәхәтлектәренән мәхрүм иткән өс дәрүишке осрата. Береһе ҙур ҡырмыҫҡа өйөмөнә ултырып, үҙен ҡырмыҫҡалар тешләүенә дусар иткән, ти. Икенсеһе йылға буйына ултырған да һыу ағышын күҙәтә, ти. Ә өсөнсөһө бер ағас төбөндә йырлап-бейеп йөрөй, ти. Монахтың сиркәүгә китеп барғанын белеп ҡалғас, улар унан: "Сиркәү башлығынан һора, зинһар, ҡотолоу табыу өсөн беҙ тағы ла күпме ваҡыт дәрүиш хәлендә булырға тейешбеҙ икән?" - тип үтенгән. Монах уларҙың үтенесен сиркәү башлығына еткерергә вәғәҙә биргән. Кире ҡайтҡан юлда монах дәрүиштәр янында туҡтаған һәм һәр береһенә сиркәү башлығы әйткән һүҙҙәрҙе еткергән. Монахтың: "Һинә, ҡырмыҫҡа иләүе өҫтөндә ултырыусы, тағы ике ғүмер ошолай яфаланырға тура килер", - тигән һүҙҙәрен ишеткәс, дәрүиш ҡайғырып башын аҫҡа эйгән. "Ә һинә тағы ла ун ғүмер һыу ағышын күҙәтергә тура киләсәк", - тигән яуап ишеткәс, икенсе дәрүиш тәрән итеп уфылдап ҡуйған. Монахтың: "Ә һинә ошо ағаста күпме япраҡ булһа, шул ҡәҙәре ғүмер бейергә һәм йырларға тура киләсәк",- тигән һүҙҙәрен ишетеү менән өсөнсө дәрүиш шатланып ҡысҡырып ебәргән һәм ҡулдарын киң йәйеп, "Был беҙгә бер ни тормай!" тигән дә, йырлап ебәргән. Шул саҡта уның эргәһендәге ағастың бар япраҡтары ҡойолоп төшкән..."**

ҺҮҘ АРАҺЫНДА

# ТӘҘРӘМ "ТИРЛӘЙ"

## кем ғәйепле?

**Ярайһы ғына ҙур сығымдар түгеп ҡуйҙырған пластик тәҙрәләрегеҙ ҡышын боҫлана, хатта ҡайһы саҡта туңамы? Әйҙәгеҙ, быны сәбәптәрен бергә асыҡлап ҡарайыҡ.**

**1-се осраҡ. Фатирҙа дымлылыҡ юғары.**

ПВХ тәҙрәләр герметик, унда ағас тәҙрәләрҙәге кеүек бер ниндәй ҙә ярыҡ юҡ. Шуның өсөн дә һеҙ уларҙы ҡуйҙырттығыҙ түгелме һуң? Йылыраҡ булһын, ел һуғып тормаһын өсөн, хатта ремонт ваҡытында фатирығыҙҙа һауа һура торған һығынтыны ла ҡаплап ҡуйғанһығыҙҙыр әле. Тимәк, һеҙ үҙегеҙ нормаль һауа әйләнешен боҙғанһығыҙ һәм хәҙер фатирығыҙҙа дымлылыҡ норманан, йәғни 60 проценттан юғарыраҡ.

Был тәҙрәгә конденсант ултырыуы менән генә янамай. Юғары дымлылыҡ - бәшмәк һәм үңәҙ үрсеү өсөн яҡшы шарттар тыуҙыра, һөҙөмтәлә иммунитеттары түбән оло йәштәге кешеләр һәм балалар йышыраҡ һалҡын алдырып сирләй башлай, аллергия киҫкенләшә.

**2-се осраҡ. Тәҙрә төптәре артыҡ киң.**

Өҫтәүенә, белгестәр унда гөл ҡуйырға ла кәңәш итмәй. Эш бында конвекцияла - һауаның күсеп йөрөүендә. Физиканың мәктәп курсын хәтерегеҙгә төшөрөгөҙ: йылы һауа ағымы өҫкә күтәрелә, һалҡыны аҫҡа төшә. Батареянан йылы һауа түшәмгә тиклем менә, һыуына һәм тәҙрәгә ҡаршы стена буйлап, аҫҡа төшә. Шуға ла батареяларҙы тәҙрә аҫтына ҡуялар.

Тәҙрә төбө батареяларҙан киңерәк булғанда йәки, әйтәйек, тәҙрәгә өҫтәл йә башҡа төрлө берәй йорт йыһаҙы терәтеп ҡуйылғанда батареяларҙан килгән һауа тәҙрә быялаһын тейешенсә йылытмай, шуға ла улар һыуына һәм "тирләй". Гөл дә өҫтәмә дымлылыҡ сығанағы булып тора.

**3-сө осраҡ. Быяла пакет артыҡ ҡалын.**

Ҡағиҙә булараҡ, тәҙрә тулыһынса түгел, ә ситтәре генә туңа. Тап шунда ПВХ-тәҙрәләренең "һалҡын" өлөшө - алюмин рамка урынлашҡан. Металл өлөшсәләре булмаған тәҙрәләр ҙә була, нормаль һауа әйләнешендә бындай тәҙрәләр туңмай.

Тәҙрә туңыуҙың сәбәбе булып артыҡ ҡалын быяла пакет та тора ала. Идеаль ҡалынлыҡ - 70 мм-ға тиклем. Бындай тәҙрәләр, етмәһә, осһоҙораҡ та тора.

Ҡыш беҙҙә нисек кенә һыуыҡ булмаһын, күп камералы быяла пакет ҡуйырға кәңәш ителмәй, махсус энергия һаҡлаусы быяла ҡулланып эшләнгән 2 камералыһы ла (3 быялалы) етә. Бындай тәҙрәләр ябай тәҙрәләрҙән артыҡ ҡиммәт тормай, ә конденсант проблемаһын хәл итә. Етмәһә, артыҡ ҡалын конструкцияларҙа үҙ ауырлығынан тәҙрә ҡапҡастары эйелә башлай һәм барлыҡҡа килгән ярыҡтарҙан ел инә.

**4-се осраҡ. Тәҙрәләрҙе таҙартмайһығыҙ.**

Тәҙрә туңыуына уларҙы дөрөҫ таҙартмау ҙа килтерә ала. Ярты йылға бер фурнитураны һөртөп, тығыҙлағысты (уплотнитель) таҙартығыҙ.

**5-се осраҡ. Тәҙрә дөрөҫ ҡуйылмаған.**

Бындай осраҡта иң тәүҙә тәҙрә ҡуйған ойошма менән төҙөлгән килешеүҙе эҙләп табығыҙ. "Ҡулланыусылар хоҡуғы тураһында"ғы законға ярашлы, улар был етешһеҙлектәрҙе юҡҡа сығарырға тейеш. Һәм мотлаҡ бушлай. Килешеү менән тәҙрәләргә бирелгән гарантияны бутай күрмәгеҙ. Ғәҙәттә тәҙрә ҡуйған өсөн гарантия ваҡыты 1 йылдан 5 йылға тиклем булыуы ихтимал. Әгәр ҙә бер генә быяла пакет "илай" икән, был, ысынлап та, тәҙрәнең дөрөҫ ҡуйылмауы тураһында һөйләй.

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | 253-25-44 |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | 246-03-24 |
| **Бухгалтерия** | 246-03-23 |
| **Хәбәрселәр** | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 6035
Заказ 4424